ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

4-10 декабрь (аҡъюлай) 2021

№49 (987)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Фәкирлекте нисек еңергә?**



2

**Баймаҡта - карантин**



6

**Уларҙың тәрбиәһе ҡатыраҡ ине,**



ә беҙҙеке - замансараҡ...

8-9

**Түбәләстәр ҡор йыйҙы**



12-13

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 6 декабрҙән 16 декабргә гәзит-журналдарға ташламалы хаҡ менән яҙылыу ун көнлөгө иғлан ителә. Ошо мәлдә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 2022 йылдың беренсе яртыһы өсөн ташламалы хаҡ менән 642 һум 38 тингә яҙыла алаһығыҙ. Был мәғлүмәтте йәнәшәгеҙҙәге дуҫ-иштәрегеҙгә, туғандарығыҙға ла еткерһәгеҙ ине. Әйҙәгеҙ, ошо ун көнлөктә "Киске Өфө"гә дәррәү яҙылып, гәзитебеҙҙең киләһе йыл буласаҡ 20 йыллыҡ юбилейына бер бүләк эшләйек!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

## ХАҠ АРТЫНАН...

### хаҡ саба

**Һәр көн иртән тороуға беҙҙе ике яҡ яурынға ҡунаҡлаған ике хәбәр ҡаршылай: коронавирус һәм ... хаҡтар. Тажзәхмәт, ярай, стихиялы бәлә һәм уға ҡаршы, шөкөр, көрәш саралары, дарыуҙар бар, яҡшымы-юҡмы, уның менән идара итергә өйрәнделәр. Ә бына хаҡтар тамам идараны юғалтып, рулевойһыҙ ҡалған һәм ағым ыңғайына йөҙөүсе карапты хәтерләтә башланы түгелме?**



Аҙыҡ-түлектең бар төрҙәренә, шул иҫәптән, көндәлек ихтыяждағы ярма, макарон изделиелары, он, икмәк ризыҡтары ғына ла кәмендә 10-20 процентҡа артты. Үҙебеҙҙә етештерелгән һөт, ит ризыҡтары, йәшелсәгә хаҡтарҙың күтәрелеүен дә өнһөҙ генә "йотто" ҡулланыусы. Былармдан тыш, хужалыҡ-төҙөлөш материалдары, яғыулыҡ, коммуналь хеҙмәттәр хаҡтары ла әсе ҡамыр төҫлө ҡабара ғына. Асыҡланыуынса, былар ҙа сик түгел икән әле, марафон дауам итә. Яңы йыл "тоғонда" күстәнәстәр мул әле: йыл ахырына тиклем ҡалған бер ай эсендә таҡы ла электроника, көнкүреш техникаһы, автомобиль кеүек категория тауарҙарына ла сират килеп етәсәк, ти эксперттар. Өҫ һәм аяҡ кейемдәренә лә, мәхрүм тороп ҡалмаһын, типтер инде, 3-5 процент булһа ла артығыраҡ хаҡтар һуғып сығыласаҡ. Күрәһең, Яңы йылда - яңы хаҡтар тигән лозунг менән эш итәлер ауҙа ойошмалары һәм тауар етештереүселәр.

Тағын нимәләр "өҫтәмәһеҙ" тороп ҡалды? Ә-ә-ә, ашар ризыҡтарын онотоп, көнө-төнө гаджетта ултырыусыларға ла сәләм бар: интернет-хеҙмәттәр һәм телевидение өсөн кәмендә 10 процент хаҡ өҫтәләсәк, тип хәбәр итә TelecomDaily аналитиктары. Аҙыҡ-түлеккә хаҡтар артыу шыма ғына үтеп киткән хәлдә лә, интернет һәм бәйләнеш хеҙмәттәре өсөн өҫтәмәләр һиҙелмәй ҡалмаҫ: бөтөн донъя бөгөн ашамай-йоҡламай тиерлек интернетта, виртуаль донъяла йәшәй. Хәйер, кемдер әйтмешләй, был да тауыш-тынһыҙ ғына үтеп китер, моғайын. Һәр хәлдә, аҡса йәлләп, бер кем дә интернетһыҙ ултырып ҡалырға теләмәҫ, шәйт. Ни өсөн тигәндә, интернетҡа 10 процент өҫтәмәне һумдарға күсергәндә, 200 самаһы тәшкил итер, ти Telecom аналитиктары һәм улар интернет-ҡулланыусының ваҡланып тормаҫына өмөт итә.

Ләкин РФ Монополияға ҡаршы федераль хеҙмәт белдереүенсә, интернет һәм телевидение тарифтарын арттырыуға сәбәптәр юҡ. Тик бына интернет-провайдерҙар бер ҙә бирешерҙән түгел. Улар "Яровая законы"на ышыҡланып, клиенттар мәғлүмәттәрен ярты йыл буйы һаҡлауҙың сығымдар талап итеүенә һылтана. Өҫтәүенә, ҡорамалдарға, электр энергияһына, коммуналь хеҙмәттәргә хаҡтар артыуҙың уларҙы ла ситләтеп үтмәүен дәлилләй.

Эйе, эт саба, тип, бет саба, тиҙәр бит тап бына ошондай осраҡта. Монополияға ҡаршы хеҙмәт фекере бер кемде лә ҡыҙыҡһындырмай, сөнки "сылбыр принцибы" эшкә ҡушылған, һәм ул ниндәйҙер административ сараларға буйһоноу сиген үткән. Бая телгә алынған рулевойһыҙ карап һымаҡ...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!*

**Көндәлек ашарға әҙерләүҙә тоҙ төп урынды алып тора. Тоҙһоҙ аҙыҡ тамаҡҡа ла үтмәй, тәмһеҙ һәм сөсө лә. Тоҙ, фәнни телдә әйтһәк, "хлорлы натрий" (хлористый натрий) - тәбиғәттең кешелеккә һәм бөтә тереклеккә бирелгән ҡиммәтле бүләге.**



## ДИҢГЕҘ ТОҘО ФАЙҘАЛЫМЫ?

Тоҙ составына ингән натрий иондары мускул сүстәре эшмәкәрлегендә ҡатнаша, нервы импульстарының тапшырылыуына булышлыҡ итә. Ә мускул сүстәренең тотҡарлыҡһыҙ эшмәкәрлеге организмдың иң мөһим функцияларының береһе, сөнки ул һаҡланыу, тын алыу, ашау, енси, бүлеп сығарыу һәм башҡа физиологик процестар менән бәйле. Шуға күрә кеше организмында әлеге натрий иондарының етерлек кимәлдә булмауы тиҙ арыусанлыҡҡа, дөйөм көсһөҙлөккә, нервы-мускул эшмәкәрлегенең боҙолоуына килтерергә мөмкин.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

## МӘҒЛҮМӘТ ҺӘМ ФЕКЕР



Бик сетерекле бер мәсьәлә буйынса материалдар йыйырға тура килде. Фекер туплар өсөн тәүҙә мәғлүмәт кәрәк бит инде. Ваҡытында район кимәлендә юғары вазифала эшләп, хаҡлы ялға сыҡҡан бер ағайға барҙым. Ваҡиғалар сылбырын бик тәфсирләп һөйләп бирҙе ул. Уға тиклем дә булып үткән хәлдең айышына төшөнгәс, артыҡ ҡыҙыҡһыныу тыуҙырманы ағайҙың һөйләгәндәре.

"Ниңә ошондай хәл килеп сыҡты?" - тип һораным. Әле генә ауыҙ һыуын ҡойоп, бөтә донъяһын онотоп хәбәр һатҡан оло кеше ҡапыл туҡтап ҡалды. "Диктофоныңды һүндер!" - тине ул, ҡаушап, кемдәндер ҡурҡҡандай, - быныһын мин үҙеңә генә һөйләйем, мин әйтте, тип яҙып ҡуйма гәзитеңә..."

Шул мәлдә мин мәғлүмәт бөтөп, фекергә ваҡыт еткәнен аңланым. Тимәк, мәғлүмәт һөйләү ҡурҡыныс түгел, ә фекер әйтеү ҡурҡыныс. Мәғлүмәтте ни, һөйләнең дә бөттөң. Шуның менән, вәссәләм. Ни хаҡҡа алдың, шул хаҡҡа һаттың. Ә фекер өсөн яуап бирергә кәрәк!

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ.**

12+

*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!*

# ДИҢГЕҘ ТОҘО ФАЙҘАЛЫМЫ?

**(Башы 1-се биттә).**

Тоҙҙағы хлор ионы иһә ашҡаҙан һутының мөһим компоненты булған тоҙло кислотаны етештереүсе төп материал. Белгестәр әйтеүенсә, тәбиғәттә һәр тере йәнгә тоҙ мөһим, сөнки ул организмдағы кислоталы-һелтеле балансты нормала тотоп тора, матдәләр алышыныуына булышлыҡ итә һәм эске органдарҙың яҡшы эшләүен тәьмин итеүсе натрий сығанағы булып тора.

Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы белдереүенсә, оло кешегә бер тәүлеккә 5 грамм тоҙ ҡулланыу норма һанала. Ләкин хлорлы натрийҙың күпселек аҙыҡ-түлектә булыуын иҫтән сығарырға ярамай. Тоҙ, мәҫәлән, ярымфабрикаттар, соус, консерва, йәшелсә, кәнфит, газлы һыу, печенье, шоколад, сыр, колбаса, икмәк һәм башҡа аҙыҡтар составында бар. Шуға күрә тоҙҙо ҡулланыуҙа ла сама белергә кәрәк, сөнки ул ҡан баҫымының күтәрелеүенә, тәндә һыуҙың тотҡарланыуына һәм башҡа сирҙәрҙең барлыҡҡа килеүенә булышлыҡ итә.

Бөгөнгө көндә әлеге тәмләткестең әллә нисә төрө бар: йодлы (йодированный), экстра, ташлы, ҡара һәм диңгеҙ тоҙо. Һуңғыһын айырыуса файҙалы, тип баралар. Ләкин был ысынлап та шулаймы? Яуапты билдәле геолог Исхаҡ Фәрхетдинов бирә.

- Эйе, диңгеҙ тоҙоноң составында, ташлы тоҙға ҡарағанда, микроэлементтар күп. Мәҫәлән, йод, магний, кальций, фосфор һәм башҡалар. Ләкин һуңғы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, бөгөнгө көндә билдәле брендтар аҫтында магазин кәштәләренә сығарылған диңгеҙ тоҙҙарында микропластиктың күләме ҙур. Бер килограмм тоҙҙа ул уртаса 675



өлөшсә. Айырыуса был күрһәткес Азия илдәрендә етештерелгән тоҙҙарҙа күп (Kim, 2018). Картала төрлө илдәрҙә етештерелгән тоҙҙарҙа микропластик концентрацияһының күпме икәнен күрергә була.

Ә диңгеҙ тоҙона микропластик нисек барып эләгә һуң? Был кеше эшмәкәрлегенең тәбиғәт өсөн зыянлы һәм ауыр эҙемтәләре. Пластиктың диңгеҙгә, унан инде беҙҙең өҫтәлгә килеп эләгеү циклы ябай - беҙ ҡулланылған тоҡсай, пакет һәм башҡа целлофан әйберҙәрҙе ҡайҙа етте, шунда ташлайбыҙ, улар бәләкәй генә өлөшсәләргә бүленеп, йылғаларға эләгә һәм уның һыуҙары менән бергә диңгеҙгә барып етә. Ә диңгеҙ тоҙон нәҡ ошо һыуҙы парға әйләндереү (выпаривание морской воды) юлы менән етештерәләр. Ә бөтә ер шарында бер көндә генә күпме пакеттың сүплеккә эләгеүен барлағанда ла, бының ниндәй эҙемтәләргә килтереүен күҙ алдына баҫтырыуы ла ҡурҡыныс.

Диңгеҙ тоҙон ҡулланыу хәүефле булғас, ниндәй тоҙ ашарға һуң? Иң таҙа һәм зарарһыҙ тоҙ - ташлы (каменная) тоҙ. Ул боронғо диңгеҙҙәрҙә барлыҡҡа килгән. Мәҫәлән, 250 миллион йыл элек әлеге беҙ йәшәгән биләмәлә йәйрәп ятҡан Урал диңгеҙендә. Ул ваҡытта кеше тәбиғәтте бысратмаған әле, шуға күрә бөгөнгө көндә шахталарҙан сығарылған, һоро төҫтәге тәбиғи тоҙ ашау өсөн зарарһыҙыраҡ.

Микропластик айырыуса ирҙәрҙә түлһеҙлектең сәбәпсеһе булырға, шулай уҡ яман шеш барлыҡҡа килтерергә лә мөмкин, шул иҫәптән балаларҙа ла. Шуға күрә, пластик ҡулланыуҙы кәметеү яйын ҡарағыҙ. Һәм аш-һыу әҙерләүҙә үҙебеҙҙең Урал тоҙон, Пермь крайында йәки Ырымбур өлкәһендә сығарылғанын, ҡулланығыҙ. Осһоҙ ҙа, зарарһыҙ ҙа.

**Гөлназ САФУАНОВА әҙерләне.**

*БЫНАҒАЙЫШ!*

# ФӘҠИРЛЕКТЕ НИСЕК ЕҢЕРГӘ?



**Был һорау өҫтөндә баш ватыуҙар дауам итә. Һөйөнөргәме, көйөнөргәме: Рәсәйҙә быйылғы йылдан алып артабанғы өс йыл эсендә фәҡирлек кимәле йылдам темптар менән кәмейәсәк, имеш һәм 2023 йылға ул 10,1 процент тәшкил итәсәк!**

Юҡ, яңылыш ишетмәнегеҙ: Рәсәй Хеҙмәт һәм социаль яҡлау министрлығы яңы уйын, уй, ғәфү итегеҙ, яңы ысул уйлап тапҡан, ти. Фәҡирҙәр һанын кәметә торған. Юууҡ, ярлылар тормошонда бер ни ҙә үҙгәрмәйәсәк, ә бәлки, улар һаны, киреһенсә, арта ғына төшөр - быныһы мөһим түгел әлеге яңылыҡты уйлап сығарыусы чиновниктар өсөн. Нимә мөһимме? Илдә фәҡирлек кимәлен кәметеү буйынса көрәш тураһында РФ президентына отчет тотоу мөһим. Юғиһә, шул 20 млн фәҡир йылдан-йыл күҙгә төшкән сүп кеүек йонсота бит уларҙы, быға сик ҡуйыу кәрәк, юғиһә, алдағы көндәрҙә, һәр хәлдә Яңы йылға тиклем, ил етәксеһенең сираттағы матбуғат конференцияһы менән бәйле кемдәргәлер ҡыҙарып-бүртенергә, ә кемдәргәлер йылы урындары менән хушлашырға тура килмәгәйе...

Хәтерләһәгеҙ, Владимир Путин былтырғы матбуғат конференцияһында фәҡирлек сигендә йәшәүсе рәсәйҙәр һанын 2030 йылға тиклем ике тапҡырға кәметеү бурысын ҡатмарлы, ләкин реаль эш, тигәйне. Беҙҙең чиновниктар быны үҙҙәренсә аңланы, ахыры, һәм тиҙерәк рапорт бирергә ашыҡты. Һөҙөмтәлә фәҡирлек сигендә көн күреүселәр һанын иҫәпләүҙең яңы формулаһын уйлап тапты бер "алтын" башлыһы. Граждандарҙың тормош хәлен асыҡлау механизмы хәҙер элеккесә йәшәү минимумын файҙаланып түгел, ә "фәҡирлек сиге" күрһәткесе менән билдәләнәсәк. Ошоға тиклем минималь эш хаҡы менән йәшәү минимумы ҡулланыу кәрзиненә ҡарап, аҙыҡ-түлек хаҡына нигеҙләнә ине, хәҙер иһә 1 ғинуарҙан был күрһәткес йән башына медиан (йәғни, ябай тел менән әйткәндә, уртаса) килем менән медиан эш хаҡынан сығып хисапланасаҡ. Рәсәй Хеҙмәт министрлығы аңлатмаһы буйынса, яңы формула индереү фәҡирлек кимәленең ошоға тиклемге, бөгөнгө һәм киләсәкке күрһәткестәрен сағыштырып ҡарау һәм инфляцияның фәҡирлеккә йоғонтоһон иҫәпкә алып барыу мөмкинлеген бирәсәк икән.

Тик шуныһы аңлашылмай, бынан фәҡирҙәргә ниндәй еңеллек? Ҡайһы бер аналитиктар фекеренсә, яңы күрһәткес "илдәге реаль иҡтисади картинаны" күрергә ярҙам итәсәк, йәнәһе. Иҡтисад хәлен "күрер өсөн" башҡа төрлө "тәҙрәләр" юҡтыр, күрәһең: һаман да халыҡ кеҫәһен ҡапшау кәрәк.

Эксперттар араһында башҡасараҡ фекер йөрөтөүселәр ҙә бар. Иҡтисад фәндәре докторы, билдәле аналитик, "Глобалләшеү проблемалары иституты" етәксеһе, бөгөнгө көндә РФ Дәүләт Думаһы депутаты Михаил Делягин фекеренсә, был сара фәҡирҙәр һанын тағы ла арттырасаҡ ҡына һәм уларҙы барлы-юҡлы пособиеларынан мәхрүм итәсәк, сөнки әлеге яңы формула буйынса аҙ килемле граждандарҙың күпселеге "хәллеләр" иҫәбенә инеп китәсәк. Рәсәй Хеҙмәт министрлығының был идеяһы яңы ысул нигеҙенә минималь ҡулланыу продукттары йыйылмаһын түгел, ә дөйөм инфляция кимәлен һаласаҡ.

Шул арала аң-тоң иткәнсе, Рәсәй Хөкүмәте илдә фәҡирлек кимәлен иҫәпләүҙең яңы тәртибен раҫлап та ҡуйҙы. "Хөкүмәт иҫәп формулаһын үҙгәртеп, фәҡирлекте ҡағыҙҙа еңергә йыйына", - тип яҙа был турала "Московский комсомолец.ru".

Шуныһы ҡыҙыҡ: пособиелар тәғәйенләүҙә иҫкесә иҫәп - йәшәү минимумы һаҡланасаҡ, тип ышандыра Хеҙмәт министрлығы. Шулай булғас, ниңә башты ҡатыралар? Йәнәһе, статистика өсөн... Шул уҡ ваҡытта рәсми статистика шундай: Юғары иҡтисад мәктәбенең Граждандар йәмғиәте тикшеренеүҙәре үҙәге мәғлүмәттәре буйынса рәсәйҙәрҙең 69 проценты матди ауырлыҡтар тотҡононда йәшәй; һорау алынған 39 процент кеше ғаилә килемен төп ихтыяждары өсөн дә еткерә алмауына зарлана...

Бындай яңғырауыҡлы социаль сара тураһында Дәүләт Думаһының "Ғәҙел Рәсәй - Хәҡиҡәт өсөн" фракцияһы ла үҙ фекерен белдермәйенсә ситтә тороп ҡалманы, әлбиттә. Уның етәксеһе Сергей Миронов фекеренсә, Хеҙмәт министрлығының яңы формулаһы илдәге фәҡирлектең ысын кимәлен күрһәтмәйәсәк. "Беренсенән, реаль инфляция һәр саҡ рәсми мәғлүмәттәгенән күберәк; икенсенән, аҙыҡ-түлек, халыҡ ҡулланыу тауарҙары һәм хеҙмәттәр күрһәтеүгә хаҡтар йылдамыраҡ арта. Был, тимәк, килемдәренең яртыһын аҙыҡ-түлеккә тотоноуға мәжбүр булғандар өсөн хаҡтарҙың тиҙерәк артыуын аңлата, - тине ул.- Өсөнсөнән, йәшәү минимумы һәм минималь эш хаҡы күләме күп тапҡырға кәметелгән. Ике-өс бүлмәле фатирҙарҙа коммуналь хеҙмәттәр хаҡы 7-8 меңгә барып баҫа икән, 12-13 мең аҡсаға нисек йәшәмәк кәрәк? Йәшәү минимумы кимәленең иҡтисади яҡтан нигеҙләнгән кимәле бөгөн - 35 мең булһа, МРОТ - 65 мең". Үәт!

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин республикала халыҡтың ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү өсөн коронавирустан вакцинаның етерлек булыуын хәбәр итте. Әлеге ваҡытта 2 миллион 450 дозанан ашыу вакцина әйләнештә, тине ул. Уның һүҙҙәренсә, республиканың вакциналау пункттарында 400 меңдән ашыу вакцина бар.

✓Башҡорт дәүләт аграр университеты "Башҡорт буҙаһы" эсемлеген алыу ысулына патентҡа эйә булды. Аҙыҡ-түлек технологиялары факультеты технологтары алдына Башҡортостандың милли эсемлеген яңынан тергеҙеүҙән тыш, уның организмға күберәк файҙа килтереүенә өлгәшеү бурысы ҡуйылғайны. Мәҫәлән, эсемлектең составында ваҡ күҙәнәктәр һәм витаминдар һаҡланған. Уның төп өҫтөнлөгө - әсеү компоненты сифатында яраҡлаштырылған таҙа культура ҡулланыуҙа, был иһә юғары сифатлы продукт алырға мөмкинлек бирә. Әскелтем-сөскөлтөм эсемлек дауалау, диетик, антибиотик үҙенсәлектәргә эйә.

✓Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров Балаҡатай районына рәсми сәфәрендә "Балаҡатай" эсәр һыу етештереү предприятиеһында, Балалар-үҫмерҙәр спорт мәктәбендә булды. Ай ярымдан тамамлау күҙалланған район поликлиникаһында барған ремонт эштәрен тикшерҙе. Премьер-министр шулай уҡ былтыр төҙөкләндереү тамамланған Соҡалы ауылы быуаһында булды.

✓Өфөлә башҡорт шәле оҫталарының республика фестивале бара. Быйыл ул онлайн-форматта үткәрелә, эштәрҙе Республика халыҡ ижады үҙәгенең Бәйләнештәге рәсми төркөмөндә ҡарарға мөмкин. 2-4 декабрҙә иһә ВДНХ-ЭКСПО комплексында "Өфө. Арт. Һөнәр. Сувенирҙар" күргәҙмә-фестивалендә башҡорт дебет шәле күргәҙмә-йәрминкәһендә фестивалдә ҡатнашыусыларҙың эштәре һатыла. 4 декабрҙә конкурсҡа йомғаҡ яһала һәм еңеүселәр бүләкләнә.

✓Башҡортостанда ата-әсәләр балалар баҡсаларында ойошторолған яңы йыл иртәлектәренә коронавирус инфекцияһына ҡаршы вакцинацияның тамамланыуын раҫлаған QR-код, йәки ауырыуҙы үткәреүҙе раҫлаған QR-код менән генә инергә мөмкин, тип хәбәр итте Башҡортостандың Мәғариф министрлығы. Республикала мәктәпкәсә учреждениеларҙа яңы йыл саралары һәр төркөм өсөн айырым уҙғарыла. Аниматорҙарға, артистарға, фотографтарға һәм башҡа сит кешеләргә байрамда ҡатнашырға рөхсәт ителмәй.

✓ *Штраф һалыусылар ауылға килһә, күптәр "Эт менән эт булғансы, бәләһенән баш-аяҡ" тип эт-бесәйҙәрен үҙҙәре үлтерә, юҡ итә башламаҫмы? Хайуандарҙың йәнен ҡыйыуҙы балалар һәм үсмерҙәр нисек ҡабул итер?*



*ӨС ДӘЛИЛ: АБВ*

# ЭТ, БЕСӘЙ УЙЫНСЫҠ ТҮГЕЛ ДӘҺӘ!



**Ҡала-ауыл урамдарында берәҙәк эттәр, бесәйҙәр проблемаһы оло бәләгә әүерелә бара. Хатта урамдарҙа эттәрҙең балаларҙы талап үлтергән осраҡтар ҙа йышайҙы. Ошоларҙы иҫәпкә алып, Дәүләт Думаһы йорт хайуандарын урамға ҡыуып сығарыусы хужаларға - 30, эт-бесәйҙәре менән насар мөғәмәлә итеүселәргә 100 меңгә тиклем штраф һалырға тигән закон проекты тәҡдим итә. Бындайын, бигерәк тә ҙур суммалағы штрафҡа бәйле сараларҙың ике йә өс осло булыуы ла ихтимал. Шул йәһәттән өс дәлилемде килтереп үтергә булдым:**

**А** Фәҡир илгә эт кәрәкмәй, тиҙәр. Эт-бесәйҙәрҙең урамға ҡыуып сығарылыуының бер сәбәбе илебеҙҙә осон-осҡа ялғап йәшәүселәрҙең үтә лә күбәйеүе менән дә аңлатыла. "Эт-бесәйемде ашатып, үҙем ас ултырайыммы?" тиеүселәр ҙә бар. Магазиндарҙа улар өсөн махсус һатылған аҙыҡ-түлектең хаҡы ла яҡын барырлыҡ түгел. Нимә генә тимә, йорт хайуандарының һәр ҡайһыһына айырым "ҡулланыусы кәрзине" талап ителә икән, улар ҙа "ғаилә ағзаһы" тип иҫәпләнә ала. Шуға күрә бындай күләмдәге штраф һалынған хәлдә лә, магазиндар янында һуңғы тинлектәрен һанаусы пенсионерҙар был сумманы түләй ҙә алмаясаҡ. Дөрөҫөн әйткәндә, илдең иҡтисадын штраф ярҙамында ғына күтәреү мөмкинме икән? Ә бына олигархтарға килгәндә инде, уларҙың океан аръяғынан килтерелгән затлы тоҡомло эт-бесәйҙәре уңайлы фатирҙарҙа ожмах шарттарында күпселек халыҡтан да яҡшыраҡ көн күрә. Тағы ла шуныһы: күп кенә хужалар эттәрен парктарға морондоҡһоҙ йөрөтөргә алып сыға. Ошондай шарттарҙа осон-осҡа ялғаусыларҙан 30 мең штраф түләтеү дөйә муйынынан да ҡырыныраҡ булыр ине. Дөрөҫөн әйткәндә, иҫерек килеш руль артына ултырыусыларға ла шундай уҡ күләмдә штраф түләтәләр түгелме?

**Б** Ярар, урамға ҡыуып сығарылған берәҙәк эттәрҙең хужаларына штраф һалып, был хәлде яҡшыртып булды икән, ти. Ә бына берәҙәк эттәр араһынан ҡайһы эттең кемдеке икәнлеген нисек билдәләргә һуң? Ауыл халҡын урамға сығарып теҙеп ҡуйып, эттәргә ҡарап: "Кил, кил, маһ, маһ!" - тип ҡысҡыртып ҡарапмы? Икенсенән, штраф һалыусылар ауылға килһә, күптәр "Эт менән эт булғансы, бәләһенән баш-аяҡ" тип эт-бесәйҙәрен үҙҙәре үлтерә, юҡ итә башламаҫмы? Хайуандарҙың йәнен ҡыйыуҙы балалар һәм үсмерҙәр нисек ҡабул итер? Тимәк, берәҙәк эт-бесәйҙәргә бәйле мәсьәләне штраф һалыу менән хәл итергә тырышыу үҙенән-үҙе башҡа көтөлмәгән проблемаларҙы ла тыуҙырыуы бик ихтимал.

**В** Күберәк осраҡта ата-әсәләр балаларының тыуған көндәренә йорт хайуандарын, эт-бесәйҙәрҙе бүләк итеүсән. Шуға күрәлерме, был бүләктәрҙе балалары уйынсыҡ, тәтәй һымаҡ күреп өйрәнә. Уйнап туйған уйынсыҡты ниндәй яҙмыш көтһә, эт, бесәй көсөк йәшенән үткәс, шулай уҡ иғтибарҙың һәм мөнәсәбәттең икенсе, өсөнсө планына күсеүсән. Артабан инде уларҙың урамда тороп ҡалыуына ара алыҫ түгел. Минеңсә, йорт хайуандары тәтәй ҙә, уйынсыҡ та булырға тейеш түгелдер. Ә башҡалар нисек уйлай?

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# БӨГӨН ЭҘЛӘЙЕМ



**Кеше өсөн нимә мөһимерәк: үткәнеме, хәҙергеһеме әллә киләсәгеме? Өс аҡһаҡал ошо хаҡта бәхәс ҡорған.**

- Бөгөн мин нисек бармын, бының өсөн үткәнемә бурыслымын. Үткәнемдә нимәгә өйрәнһәм - шуны эшләй беләм. Үҙемә ышанысым да элек башҡарған эштәрем арҡаһында. Мин электән һыналған һәм уларға оҡшаған кешеләргә ышанам, - тигән бер аҡһаҡал.

- Мин һинең менән килешмәйем, - тигән икенсеһе. - Әгәр һин хаҡлы булһаң, кеше үрмәксе кеүек үҙенең ғәҙәттәре ауында көндәр буйына табыш көтөп ултырырға тейеш булып сыға. Кешене уның киләсәге, маҡсатлы булыуы уңышлы яһай. Минең бөгөн нимә белеүем түгел - киләсәктә кәрәгер шөғөлгә өйрәнеүем мөһим. Ике йылдан кем булырым ике йыл элек кем булыуымдан да мөһимерәк. Миңә элек белгән кешеләргә оҡшамағандар яҡыныраҡ...

- Һеҙ бер нәмәне иҫегеҙҙән сығараһығыҙ, - тип уларҙы бүлгән өсөнсө аҡһаҡал. Үткән һәм киләсәк һеҙҙең уйҙарығыҙҙа ғына йәшәй. Үткән күптән үткән. Киләсәк әле етмәгән. Һеҙ үткәнде иҫкә алһағыҙ ҙа, киләсәк хаҡында хыялланһағыҙ ҙа, былар бөгөн бара. Тик бөгөн генә тормошонда нимәнелер үҙгәртеп була. Кеше тик бөгөн генә бәхетле, үткән бәхет хаҡында уйлау һағышҡа алып килә, киләсәктәге бәхет һыуға һәнәк менән яҙылған...

...Миңә барыбер ҙә Саҙритдин Айниҙың фекере яҡыныраҡ. Ул "Киләсәкте яҡтыртыр өсөн үткәндең көлөнән ҡуҙ эҙләйем", тигән. Өс аҡһаҡалдың әйткәненән сығып, С. Айниҙың әйткәненә ике һүҙ өҫтәргә кәрәктер: "Бөгөн эҙләйем", - тип.

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

*ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!*

# ӘПИЛКӘ ЛӘ...

## эшкә ярап ҡала



**Гәзиттәге ошо рубриканы ҡыҙыҡһынып уҡып барам. Аҡса эшләүҙең төрлө ысулын өйрәтеүселәрҙең күплеген күреп, "Халыҡ аҡса юҡ тип ҡул ҡаушырып ултырмай, тырыша, әмәлен таба", тип ҡыуанам. Баҫмала донъя күргән аҡса эшләү юлдарын ҡулланып, үҙ килемен арттырыусыларҙың байтаҡ булыуына шигем юҡ. Бөгөн үҙем өсөн асҡан әмәл тураһында яҙып үткем килә. Төп эшемдән тыш алып барғанға күрә әлеге ысулдың минең өсөн күп аҡса килтереүен иҫбат итә алмайым, шулай ҙа аҡмаһа ла тамып тора.**

Ҡаланан алыҫ булмаған ауылда йәшәйем һәм эшмәкәрлегем ағас эше менән бәйле. Ағас эшкәрткән пилорамала күпләп артып ҡалған әпилкәнең сүплеккә алып барып түгелеүен күреү һәр саҡ әрнеүле тойғолар уята ине. Ысынлап та, әпилкәне баҡсаға һалыуҙан һәм башҡа төрлө өйрәнелгәнсә ҡулланыуҙан тыш, бер нәмә лә эшләтеп булмаймы икән, тип оҙаҡ уйландым. Ошо хаҡта мәғлүмәт эҙләнем. Элегерәк гәзит-журналдарҙан ҡараштыра инем, интернет киңлектәрендә гиҙә башлағас, эҙләгәнемде таптым. Оҙаҡ ҡына бөтә үҙенсәлеген өйрәнгәндән һуң, әпилкәнән яғыулыҡ брикеттары эшләй башланым. Эш барышы әллә ни ҡатмарлы түгел, ә һөҙөмтә үҙен аҡлай. Шулай әпилкәне үҙемә алып ҡайтып ауҙарам да, махсус ҡоролмала әпилкәнән уңайлы, ҡыҙыу яныусы, ябай утын һәм башҡа яғыулыҡҡа альтернатив булырлыҡ брикеттар эшләйем.

Масштаблы эшмәкәрлек алып бармағас, ҡыйбатлы преслаусы ҡоролмалар һатып алыуҙы кәрәкле тип тапманым, ә үҙем эшләнем. Мин брикеттарҙы иң ябай ысул менән етештерәм. Тәүҙә әпилкәне обой өсөн тәғәйенләнгән иң осһоҙ елем һалынған һыуға ебетәм. Килеп сыҡҡан ҡатнашманы преслау ҡоролмаһына һалып, электрҙы тоҡандырам. Ҡоролманың ҡеүәте ҙур заводтарҙағы кеүек түгел, шуға күрә брикеттар ятып кибергә тейеш. Шәхсән үҙем брикеттарҙы тик тышта ғына яндырам, сөнки миңә елем еҫе сыҡҡан кеүек, ә һатып алыусыларым (уларҙы алдан иҫәкәртәм) әлегә тиклем дәғүә белдергәне юҡ. Әгәр ҙә был эшкә етди тотонорға уйлаһам, ҙур ҡеүәтле ҡоролма алырға уй бар, ул саҡта брикеттарҙы бер ниндәй елемһеҙ эшләргә мөмкин. Бөтә нескәлеген тәфсирләп яҙып тормайым, ҡыҙыҡһыныусылар мәғлүмәтте интернеттан таба ала. Брикетты әпилкәнән тыш, дөгө, ҡарабойҙай, көнбағыш ҡабығынан (шелуха), шулай уҡ ҡоро япраҡтан да эшләргә мөмкин.

Ял көндәрендә бына ошондай үҙем өсөн ҡыҙыҡлы шөғөл менән булышам. Миңә был эштең барышы һәм, йәшерәһе түгел, аҡса килтереүе лә оҡшай. Күрше-күлән бик ихлас һатып ала. Шулай уҡ яҡын-тирәләге баҡса хужаларына ла тәҡдим итәм, ҡыҙыҡһыныусылар етерлек.

**Сәлим ЙӘҺҮҘИН,**
**Иглин районы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓"Юғары мәктәптең алтын исемдәре" проекты сиктәрендә Рәсәй вуздары һәм ғилми учреждениелары тәҡдиме буйынса йыл һайын үҙ һөнәре буйынса юғары һөҙөмтәләргә өлгәшеүсе уҡытыусыларҙы һайлап алыу конкурсы үткәрелә. Күптән түгел уҙған конкурс еңеүселәрен бүләкләү тантанаһында "Фән һәм юғары мәғариф өлкәһендәге өлөшө өсөн" номинацияһында филология фәндәре докторы, профессор, БДУ-ның башҡорт филологияһы, шәрҡиәт һәм журналистика факультеты деканы Гөлфирә Абдуллина еңеүсе булды.

✓Республиканың 10 ғаиләһе "Атаәсә ҡаһарманлығы" дәүләт наградаһына лайыҡ булды. Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров Благовещен, Дәүләкән, Хәйбулла, Саҡмағош, Кушнаренко, Туймазы райондарынан һәм Өфө ҡалаһынан 10 ғаиләгә юғары дәүләт наградаһы тапшырҙы. Ишле ғаиләләр республика етәкселегенең даими иғтибары үҙәгендә тора, тип билдәләне Премьер-министр. Республикала улар - 50 меңгә яҡын. Уларға белем биреү өлкәһендә, торлаҡҡа һәм коммуналь хеҙмәттәргә түләү, пособиеларҙың өҫтәмә төрҙәре буйынса ярҙам күрһәтелә, транспорт һалымы түләүҙән азат ителә.

✓Башҡорт дәүләт университетында Ғиниәтулла Ҡунафиндың 75 йәшенә бағышланған "Күп милләтле дәүләт шарттарында рухи мәҙәниәт менән туған телде һаҡлау һәм үҫтереү: проблемалары һәм перспективалары" исемле Халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференция үтте. Сараны университет ректоры Николай Морозкин асты. Башҡортостан Республикаһы Башлығы Хакимиәте етәксеһе вазифаһын башҡарыусы Урал Килсенбаев Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың ҡотлауын уҡып ишеттерҙе.

✓"Беҙҙең Бренд. Халыҡтың таныуы" беренсе төбәк аҙыҡ-түлек конкурсы барышында тауыш биреү тамамланды. Сараны республиканың Ауыл хужалығы министрлығы һәм Башҡортостан күргәҙмәләр компанияһы ойошторҙо. Конкурста республикабыҙҙың 48 муниципаль берәмегенән 118 бренд ҡатнашты. Онлайн тауыш биреү йомғаҡтары буйынса Стәрлебаш бауырһағы һәм Көйөргәҙе деликатестары еңеүсе тип танылды.

***✓ Дәүләт Думаһының Ғаилә, ҡатын-ҡыҙҙар һәм балалар буйынса комитеты ете йәштән 16 йәшкә тиклемге балаларға йәмәғәт транспортында бушлай йөрөү яңы закон проектын әҙерләүҙе тәҡдим итергә йыйына.***



ҠЫҪҠАСА

# СИКЛӘНӘ...

✓ **БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙа "Башҡортостан Республикаһында этил спирты, алкоголь һәм спиртлы продукция етештереү һәм уның әйләнеше өлкәһендә эшмәкәрлекте көйләү, шулай уҡ алкоголь продукцияһы ҡулланыуҙы сикләү тураһында" законға үҙгәрештәр ҡабул ителде.** "Закон был өлкәлә эштәрҙе көйләү буйынса дәүләт власы органдары вәкәләтлеген киңәйтә,- тип аңлатма бирә Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. - Башҡортостанда алкоголь һәм спиртлы эсемлектәрҙе ваҡлап һатыу буйынса төбәк дәүләт контроле тураһында Положение эшләнде, ул республика Хөкүмәте тарафынан раҫланасаҡ". Парламент спикеры һыҙҙеренсә, был өлкәне көйләү бик сетерекле мәсьәлә һәм ул иплерәк мөнәсәбәт талап итә. "Был өлкәне көйләү буйынса дәүләт власы органдары эше ике йүнәлештә алып барыла: спиртлы эсемлектәр ҡулланыуҙы сикләү һәм суррогат продукцияның таралыуына ҡаршы көрәш. Ҡабул ителгән закон - ошо юлда тағы бер аҙым", - тине Константин Толкачев.

✓ **Рәсәй Хөкүмәте 2022 йылға вуздарға маҡсатлы ҡабул итеүгә квоталарҙы раҫланы.** Киләһе йылда бюджет урындарының күбеһе медицина өлкәһе һөнәрҙәре буйынса буласаҡ. "Дауалау эше" һәм "Педиатрия" һөнәрҙәре өлөшө 75 процент тәшкил итә, ә "Анестезиология", "Акушерлыҡ һәм гинекология", "Радиология", "Рентгенология", "Балалар онкологияһы", "Балалар эндокринологияһы", "Кардиология", "Неврология", "Оториноларингология", "Офтальмология", "Пульмонология", "Һаулыҡ һаҡлауҙы ойоштороу һәм йәмғиәт сәләмәтлеге", "Бактериология", "Йоғошло сирҙәр" һәм "Ашығыс медицина ярҙамы" кеүек дефицит йүнәлештәр буйынса ординатура урындары тулыһынса маҡсатлы булвнә. Башҡа һөнәрҙәрҙән иң ҙур квота радиоэлектрон системалар һәм комплекстар, тимер юлдарын ҡулланыу, поездарҙың хәрәкәте системаһын тәьмин итеү өлкәһе йүнәлештәре буйынса 70 процент бюджет урыны буленә. 60 процент урын "Тимер юлдары, күперҙәр һәм транспорт тоннелдәре", "Авиация һәм ракета двигателдәрен проектлау", "Самолёт һәм вертолёт эшләү", "Осоу аппараттарын һынау" һөнәрҙәренә бирелә.

✓ **Рәсәйҙә 16 йәшкә тиклемге балалар йәмәғәт транспортында бушлай йөрөүе ихтимал. Әлегә ете йәшкәсә балаларҙың ғына бындай мөмкинлеге бар.** Дәүләт Думаһының Ғаилә, ҡатын-ҡыҙҙар һәм балалар буйынса комитеты ете йәштән 16 йәшкә тиклемге балаларға йәмәғәт транспортында бушлай йөрөүҙе күҙ уңында тотҡан яңы закон проектын әҙерләүҙе тәҡдим итергә йыйына. Комитет рәйесе Нина Останина һыҙҙеренсә, бөгөн төбәк властары был проблемаларҙы айырым бойороҡтар, социаль карталар һәм башҡа ысулдар менән үҙҙәре хәл итә. Башланғыс авторҙары иһә быны нығытып ҡуйырға теләй. Хәҙер ете йәшкәсә балалар ғына транспортта бушлай йөрөргә мөмкин. Шул уҡ ваҡытта өлкәндәрһеҙ йөрөгән 16 йәшкә тиклемге балаларҙы юл хаҡы түләмәгән өсөн төшөрөп ҡалдырыу тыйыла.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ТУҒАН ТЕЛЕНДЕ БЕЛ!



**Республикала Башҡорт теле көнө алдынан Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән төбәк-ара олимпиада еңеүселәренә һәм призерҙарына, шулай уҡ уларҙы әҙерләгән уҡытыусыларға премиялар булдырылды. Республика Башлығы Радий Хәбиров тейешле Указға ҡул ҡуйҙы.**

Документҡа ярашлы, Башҡортостан Республикаһы Башлығының Бөтә Рәсәй олимпиадаларында еңгән һәм призлы урындар өсөн тапшырылған премияларына өҫтәмә рәүештә Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән төбәк-ара олимпиадала еңеү яулаған һәм призлы урындар өсөн премиялар ҡарала. Еңеүселәр һәм уларҙың уҡытыусылары - 5-әр мең, призерҙар һәм уларҙың педагогтары 3-әр мең һум алырға тейеш.

Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығының Милли мәғариф идаралығы начальнигы Азат Батыршин әйтеүенсә, башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән олимпиада 1987 йылдан башлап үткәрелә. Ә төбәк-ара кимәлдә 1996 йылдан ойошторола. Йылдан-йыл олимпиадала Ырымбур, Силәбе, Ҡурған өлкәләре уҡыусылары ҡатнаша, төрлө йылдарҙа Һамар, Һарытау, Свердловск өлкәләре, Пермь крайы, Татарстан Республикаһы балалары ҡатнашты. 34 йыл үткәрелгән башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән төбәк-ара олимпиадала 9 меңдән ашыу уҡыусы ҡатнашты. "Олимпиада туған телен һәм әҙәбиәтен тәрән белгән һәләтле уҡыусыларҙы асыҡларға ярҙам итә. Быйыл Красноусолда уҙған туған тел уҡытыусылары йыйынында балаларҙа башҡорт телен өйрәтеүгә өҫтәмә мотивация булдырыу кәрәклеге билдәләнде. Был премияның олимпиада еңеүселәренә һәм призерҙарына ла, уҡытыусыларға ла яҡшы ярҙам булырына ышанам", - тине Азат Батыршин.

# АТТЕСТАЦИЯ ҮТӘСӘКТӘР



**"Башҡортостан Республикаһында туристик эшмәкәрлек тураһында" закон проектын депутаттар сираттағы пленар ултырышта ҡабул итергә йыйына. Документ төбәк туристик хеҙмәт күрһәтеү баҙарындағы эшмәкәрлекте көйләргә тейеш.**

2022 йылдың 1 июненән тотош Рәсәйҙә экскурсоводтарҙы, гид-тәржемәселәрҙе һәм инструктор-оҙатып йөрөүселәрҙе мотлаҡ аттестациялау ғәмәлгә инә. Шуға бәйле Башҡортостанда махсус аттестация комиссияһы ойошторолаcаҡ һәм экскурсоводтарҙың йәки гид-тәржемәселәрҙең күкрәккә таға торған идентификация формаһы раҫланасаҡ. Бынан тыш, туристик хеҙмәт күрһәтеүсе һәм махсус һалым режимын ҡулланыусы ойошмалар, шәхси эшҡыуарҙар һәм кешеләрҙең эшмәкәрлеген тикшереүсе төбәк дәүләт контроле ойошторолаcаҡ.

БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев белдереүенсә, 2022 йылдың 1 июненә тиклем бирелгән аттестаттар мөҙҙәте сыҡҡанға, йәки 2024 йылдың 1 ғинуарына тиклем, ғәмәлдә буласаҡ. "Күпселек Европа илдәрендә экскурсоводтар һәм гид-тәржемәселәр өсөн ҡаты талаптар бар. Был эш менән шөғөлләнер өсөн махсус белем алырға һәм аттестация үтергә кәрәк, аттестация биреү системаһы һөнәри ассоциациялар һәм дәүләт органдары тарафынан ҡәтғи контролләнә. Беҙ әҙерләгән закон проекты асыҡ һәм контролләнгән экскурсия хеҙмәте баҙарын булдырыуға, туристарҙың ихтыяжын яҡлауға һәм төбәктең туризм һәм ял өсөн имен һәм хәүефһеҙ төбәк булараҡ ыңғай имиджын формалаштырыуға йүнәлтелгән", - ти Константин Толкачев.

# ЭШ ХАҠЫ КОНВЕРТТАМЫ?



**Ҡайһы бер бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ ойошмалары һалымды тулыһынса түләмәҫ өсөн эш хаҡының бер өлөшөн генә рәсми түләй, ә ҙурыраҡ икенсе өлөшөн бухгалтерия документтарында күрһәтмәй. Һөҙөмтәлә бюджет һәм бюджет булмаған фондтар һалым-йыйымдың ярайһы ҙур ғына суммаһын алып бөтмәй.**

Республиканың һалым органдары ошондай эш хаҡын йәшереп ҡалыу факттарын асыҡлау буйынса саралар үткәрә. Алдынғы технологиялар ярҙамында килгән мәғлүмәт тә уларҙы асыҡларға булышлыҡ итә. Формаль булмаған мәшғүллек тураһында граждандарҙың мөрәжәғәте Рәсәй Федераль һалым хеҙмәтенең Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығының +7(347)226-38-00 "ҡыҙыу линия" телефонына килә. "Сигнал мәғлүмәт" буйынса тикшереү ойошторола.

"Конверт"та эш хаҡы алырға ризалашҡан граждан уның әҙемтәһе хаҡында уйламай. Тимәк, больничный ҡағыҙы, йөклөлөк буйынса, бала тапҡандан һуң, производствола йәрәхәтләнгән, һөнәри сиргә юлыҡҡан һәм башҡа осраҡтарҙа бирелгән түләүҙәрҙе, пособиеларҙы алмай; пенсияға сыҡҡанда иҫәпләнгән эш стажы булмай; күсемһеҙ милек һатып алғанда мөлкәт һалымы түләүен, уҡыған һәм дауаланған өсөн социаль түләүҙе алмай; яңы коронавирус инфекцияһы таралыуы һөҙөмтәһендә хәл-ваҡиға үҙгәреп киткән осорҙа ярҙам сараларынан мәхрүм була.

Рәсәй Федераль һалым хеҙмәте даими рәүештә интерактив сервисты яңырта, үҫтерә, тулыландыра. Хәҙер һәр граждан үҙенең эш хаҡын, эш биреүсе түләгән страховка иғәнәһен, физик шәхестең килеменә һалымын Рәсәй Федераль һалым хеҙмәте сайтының "Физик шәхестәр өсөн шәхси кабинет" сервисының "Килем һәм түләү/килем" бүлегендә тикшерә ала. "Шәхси кабинет"тағы тулы йәки дөрөҫ булмаған мәғлүмәт осрағында үҙенең эш биреүсеһенә, һалым органына йәки Дәүләт хеҙмәт инспекцияһына мөрәжәғәт итергә кәңәш бирелә.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә балаһына телде үҙләштерергә ярҙам итергә теләгән ата-әсәләр өсөн башҡорт телен өйрәнеү курстары башланды. Дәрестәр Өфөнөң 44-се мәктәбендә үткәрелә. Дәрестәрҙе "Башҡорт теле. Яңы ҡараш" уҡыу ҡулланмаһы авторҙары, башҡорт һәм төрөк телдәре уҡытыусыһы Ләлә Сафина, филология фәндәре кандидаты, Өфө күп профилле һөнәри колледж уҡытыусыһы Рида Латипова үткәрә. Курс ата-әсәләргә тәғәйенләнгән, дәрескә тотош ғаилә менән килергә була, ти ойоштороусылар. Уҡыу бушлай.

✓Өфөлә республиканың коронавирустан һәләк булған табиптары хөрмәтенә Медицина ҡаһарманлығы аллеяһы асылға. Ҡала Советы ултырышында ошондай ҡарар ҡабул ителде. Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһының баш табибы Шамил Булатов депутаттарға әлеге медицина учреждениеһы биләмәһендәге аллеяға ошондай исем биреүҙе һорап мөрәжәғәт итте. Аллея Достоевский урамында (Кустар урамынан алып Минһажев урамына тиклемге участкала) урынлашҡан. Уның оҙонлоғо - 200 метр. Рәсми мәғлүмәттәргә ярашлы, республикала 33 табип үҙ вазифаһын башҡарғанда вафат булған.

✓Баш ҡалабыҙҙа "Ёлки" яңы йыл комедияһының дауамын төшөрҙөләр. Өфөләргә "Ёлки" яңы йыл комедияһының дауамы төшөрөлгән майҙансыҡҡа килеп, үҙҙәрен экранда күреү мөмкинлеге бирелде. Сара проекттың режиссёры һәм продюсеры Антон Богданов етәкселегендә "Бөтә ил менән шыршы биҙәйбеҙ" исеме аҫтында ойошторолдо. Әлеге сара Мәскәү, Пермь, Красноярск, Төмән һәм Саранск ҡалаларында ла уҙҙы. Комедияның яңы өлөшө 16 декабрҙә прокатҡа сыға.

✓Өфөнөң В.И. Ленин исемендәге майҙанында баш ҡаланың төп шыршыһы ҡуйылды. "Эпидемиологик хәлдең насар булыуын иҫәпкә алып, боҙ ҡаласыҡтары һәм шыршылар ҡуйылған майҙансыҡтар, былтырғы менән сағыштырғанда, арттырыла. Әйтәйек, 2019 йылда - 85, 2020 йылда 247 майҙансыҡ булды, быйыл иһә 321 майҙансыҡ булдырыла", - тип хәбәр иттеләр Өфө мэрияһының матбуғат хеҙмәтенән.

**БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# КӨН МӘШӘҠӘТТӘРЕ ТУРАҺЫНДА

**Рәсәйҙең спорт министры Олег Матыцин Өфөнөң 450 йыллығы уңайынан баш ҡалала спорт объекттарын төҙөүгә һәм "Рәсәй - спорт державаһы" форумын уҙғарыуға федераль ярҙам буласағын вәғәҙә итте. Был хаҡта ҡала хакимиәтендәге сираттағы оператив кәңәшмәлә ҡала мэры Сергей Греков белдерҙе.**

Бөгөн, әлбиттә, төп темаларҙың береһе булып Яңы йыл, ҡайҙа ниндәй шыршы ҡуйылыуы, ниндәй ҡаласыҡтар эшләнеүе һәм башҡа күңел асыу һәм ял майҙансыҡтары ойоштороу мәсьәләһе тора. Әммә көндәлек һәм тағы ла мөһимерәк проблемалар ҙа бар. Мәҫәлән, көҙгө-ҡышҡы йылытыу миҙгеле өсөн түләүҙәр. Был хаҡта хакимиәт башлығы советнигы Вадим Беляков сығыш яһаны. Өфө хакимиәте алдағы йылдарҙағы йылытыу миҙгелендәге барлыҡ хаталарҙы иҫәпкә алып, уларҙың ҡабатланыуына юл ҡуймаҫҡа тырыша. Был маҡсатта 2021-2022 йыл миҙгеленә әҙерләнеү өсөн махсус план тормошҡа ашырыла, эксперттар йәмғиәте ойошторолған һәм уға төрлө кимәлдәге депутаттар, Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығы, ресурстар менән тәьмин итеү ойошмалары, БР Башлығы ҡарамағындағы Кеше хоҡуҡтары буйынса совет вәкилдәре ингән.

Тикшереү барышында асыҡланған етешһеҙлектәрҙең 95 проценты буйынса квитанцияларға үҙгәртеүҙәр индерелгән һ.б. Башҡарылған эштәр һөҙөмтәһендә баш ҡалалағы күп фатирлы йорттарҙың 73 процентында йылылыҡ ҡулланыу күләме лә, башҡа етешһеҙлектәр ҙә кәмегән. Статистикаға мөрәжәғәт иткәндә инде, был, октябрҙә өфөләр йылылыҡ өсөн былтырғыға ҡарағанда 60 миллион һумға кәмерәк түләгән, тигән һүҙ. Шул уҡ ваҡытта 27 процент йортта, киреһенсә, былтырғы менән сағыштырғанда йылылыҡ ҡулланыу күләме артҡан. Уларҙағы етешһеҙлектәр ҙә мөмкин тиклем хәл ителгән. Ноябрҙә һауа температураһы түбәнәйеүе һөҙөмтәһендә, йылылыҡ биреү күләме лә артҡан, йәғни йорттар йылытылыуы 6,5 градусҡа күберәк ҡулланған (ҡала буйынса уртаса 49 процентҡа артҡан), әммә былтырғы менән сағыштырғанда барыбер ҙә кәмерәк килеп сыға.

Көн тәртибендә ҡаралған мөһим темаларҙың тағы береһе - мәғариф. Бөгөн Өфөлә "Мәғариф" милли проекты тормошҡа ашырыла. Ул үҙенә өс төбәк компонентын ала. Мәҫәлән, "Заманса мәктәп" милли проекты буйынса ҡаланың балалар баҡсалары ҡарамағында консультация үҙәктәре асылған. Уларҙа ата-әсәләргә иртә йәштән һәм сәләмәтлек үҙенсәлектәре булған балаларҙы үстереү мәсьәләләре буйынса бушлай ярҙам күрһәтелә. "Һәр бала уңышы" төбәк проектын тормошҡа ашырыуға 5-18 йәштәге балаларға өҫтәмә белем бирелә һәм 2024 йылға тиклем был проектҡа баш ҡалалағы ошо йәш категорияһының 80 проценты йәлеп ителергә тейеш. Әле 4 мең берләшмә, түңәрәк, секцияларҙа төрлө йүнәлештәр буйынса балалар бушлай шөғөлләнә, мәктәптәрҙә бындай ойошмалар - 2 мең.

"Цифрлы белем биреү системаһы" проекты буйынса белем биреү учреждениеларының матди-техник базаһы яңыртыла. Быйыл 45 белем биреү ойошмаһы яңы комплекттарға эйә булған. Һәр учреждение күп функциялы ҡорамал һәм 28 ноутбук алған. Проект эшләй башлағандан алып баш ҡаланың 60 мәктәбе цифрлы ҡорамалдар менән йыһазландырылған.

Бынан тыш, былтырҙан башлап балаларҙы заманса мәғлүмәт һәм телекоммуникация технологияларына өйрәтеү буйынса "IT-куб" эшләй, унда ете педагог 400 балаға алты йүнәлеш буйынса белем бирә.

Беләге бар берҙе йығыр, белеме бар меңде йығыр, тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр. Саф һауала боҙ ҡаласыҡтарында уйнап, ял итеп, асыҡ зиһендәренә заманса яңы белем туплаған йәштәребеҙ булғанда, дәүләтебеҙ ҙә тиңдәр араһында тиң булыр.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ЙЫЛЫТЫЛА...



**Баш ҡалала пассажир транспорты салондарының микроклиматы тикшерелде. Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров ҡушыуы буйынса БР Транспорт һәм юл хужалығы министрлығы хеҙмәткәрҙәре 227, 13, 6, 207, 266-сы маршруты транспорты салонының температура режимын тикшерҙе.**

Автобус йәки трамвай салоны температураһы ГОСТ менән билдәләнә. Аныҡлап әйткәндә, ул йылдың һалҡын миҙгелендә тыштағы һауа температураһынан 20 градусҡа юғарыраҡ булырға тейеш. Тышта -15-тән -20 градус һыуыҡ булғанда, салонда температура +10 градус булыуы, -40 градус булғанда +5 градустан түбән булмауы ҡаралған. Тикшереү күрһәтеүенсә, барлыҡ автобустарҙа һәм маршрут таксиҙарында температура норма сиктәрендә була - 12 градустан да кәм түгел.

Йәмәғәт транспортының барлыҡ төрҙәре лә йылытыу системаһы менән йыһазландырылған. Мәҫәлән, "НефАЗ" маркалы автобустарҙа 5 йылытҡыс ҡаралған: береһе водитель кабинаһында, ҡалғандары салондың алғы һәм артҡы рәттәре ултырғыстары аҫтында урынлаштырылған. Трамвайҙың ике йылытҡысы водитель кабинаһында һәм 13-ө салонда ике яҡлап урынлашҡан. Троллейбустарҙа 5 йылытҡыс, уның береһе водитель кабинаһында, ҡалғандары алғы, урта һәм артҡы ултырғыстар аҫтында.

Шәхси һәм дәүләт пассажир ташыусыларының барлыҡ составы маршрутҡа сығыр алдынан техник тикшереү үтә, шул иҫәптән мотлаҡ рәүештә йылытыу ҡорамалы ла тикшерелә. Водитель линияға йылы салон менән сығырға, барлыҡ йылытыу ҡорамалдары ла эшләргә тейеш. Ҡорамалдар төҙөк булмаһа, транспорт маршруттан алына. Пассажир транспорты салонындағы микроклиматҡа ҡуйылған ГОСТ талаптарын үтәү маҡсатында бындай тикшереүҙәр киләсәктә лә ойоштоласаҡ.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ИҪКЕЛӘР КИТӘ...

**Өфөлә генә түгел, тотош Башҡортостанда транспорт реформаһы уңышлы тормошҡа ашырыла: рөхсәтһеҙ йөрөгән автобустар мәсьәләһе хәл ителә, "Алға" картаһы индерелде, автобус паркы яңыртыла. Быйыл ғына 220 уңайлы автобус һатып алынған һәм улар баш ҡала урамдарында йөрөй.**

Артабанғы бурыс - йыл һуңына тиклем иҫке һәм хәүефле ПАЗ-иктарҙы хәүефһеҙлек һәм экологияны һаҡлау талаптарына яуап биргән заманса автобустар менән алмаштырыу. Был бурыс йыл башында уҡ ҡуйылған булһа ла, күптәр уны тулыһынса үтәмәгән. Уҙған аҙнала Өфө ҡала хакимиәте Ространснадзор һәм БР Транспорт министрлығы менән берлектә ҡала маршруттарын тикшереп, Телеүҙәктән ДОК-ка тиклем йөрөүсе 272-се маршрут автобусында етешһеҙлектәр булыуын асыҡлай. Шуға бәйле был маршрутта автобустар һанын 40-тан 5-кә тиклем кәметергә, ошо йүнәлештәге хәрәкәттә өҙөклөктәр булмаһын һәм транспорт хеҙмәтләндереүе сифаты кәмемәһен өсөн 290-сы маршрутта автобустар һанын арттырырға ҡарар ителә. Бында "Башавтотранс" автобустары иртәнге алтынсы яртынан төнгә тиклем эшләйәсәк, ә пик сәғәттәрендә хәрәкәт араһы ни бары 3 минут тәшкил итәсәк.

# ЙӘМӘҒӘТСЕЛЕК МЕНӘН...

**Өфөлә Октябрь революцияһы урамының дөйөм ҡулланылышта булған территорияһы проекты буйынса йәмәғәт тыңлауҙары үтәсәк.**

Ҡала Советының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, был урамда 69 мәҙәни мираҫ объекты урынлашҡан, уларҙың 20-һе - йәмәғәт тәғәйенләнешендә, 49-ы милекселәр күсерелгән, күсерелмәгән йәки күсереү процесында булған торлаҡ йорттар. Бер өлөшө ҡыҙыл һыҙатҡа сыға. 29 бина мәҙәни мираҫ объекты түгел. Ведомствонан белдереүҙәренсә, объекттар барыһы ла һаҡлана һәм реконструкцияланыуға тәҡдим ителә. Проект участка торошонан сығып, урамды 12-19 метрҙан 7-10.25 метрға тиклем тарайтыуҙы күҙаллай. Йәмәғәт транспорты йүнәлеше Зәки Вәлиди урамынан Ленин урамына тиклем ике яҡлы буласаҡ. Октябрь революцияһы урамы буйлап тротуарҙар, киңлеге 3 метр булған велосипед юлы, парковка урындары эшләү планлаштырыла.

Йәмәғәт тыңлауҙары 25 ноябрҙән 2022 йылдың 1 февраленә тиклем дауам итәсәк. Экспозиция 2 декабрҙән 2022 йылдың 14 ғинуарына тиклем, ял һәм байрам көндәренән тыш, иртәнге 9-ҙан кискe 5-кә тиклем асыҡ. Тәнәфес - 1-ҙән 2-гә тиклем. Экспозицияла йәмәғәт тыңлауҙары буйынса консультациялар үткәрелә. Йәмәғәт фекер алышыуы осоронда граждандар үҙҙәренең тәҡдимен экспозиция эшләгән ваҡытта тәҡдимдәр һәм иҫкәрмәләр; Өфө ҡалаһының Архитектура һәм ҡала төҙөлөшө баш идаралығына (Рәсәй урамы, 50) яҙма рәүештә һәм хат; https://discuss.ufacity.info сайты аша ҡалдыра ала.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

### Быуындар шешһә

❖ Быяла һауытты ваҡланған әрем һабаҡтары менән тултырып, бер аҙ һеңдерә баҫырға һәм өҫтөнән 5-6 сантиметр сыҡҡансы араҡы ҡойорға. Шунан 3 аҙна ҡараңғы урында тоторға, ваҡыты-ваҡыты менән һелкетеп болғатып торорға. Шунан ҡара быялалы шешәгә һөҙөп ҡойоп алырға. Йәшкелт һоро төҫтәге, яҡшы еҫле төнәтмә килеп сыға. Дауаға бер нисә ҡатҡа бөкләнгән марля киҫәген сылатып, ауыртҡан урындарҙы ыуырға. Төнәтмәне һалҡын урында һаҡларға. Һеҙөп алынған ҡалдыҡтарын ташлап ҡуймаҫҡа: һыҙлаған урынға башта тирене яндырмаһын өсөн кизе-мамыҡ туҡыма киҫәге ҡаплап, өҫтөнә үләнде йәйеп бәйләргә була.

### Бөйөр

❖ Бөйөрҙөң функциялары боҙолған осраҡта бәрхәт сәскәһе ярҙам итә. 1 балғалаҡ ваҡланған бәрхәт үлән япрағы һәм сәскәләренә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, ярты сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда стакандың өстән бер өлөшө күләмендә эсергә.

### Ҡаҙна ҡанаһа

❖ Теш ҡаҙнаһы ҡанағанда имән ҡайырыһы төнәтмәһе ярҙам итә. 1 ҡалаҡ имән ҡайырыһын эмалле һауытҡа һалып, 1 стакан һыу ҡойорға, ҡапҡас менән ябырға. Ҡайнап торған һыуҙың быуында 30 минут йылытырға, һөҙөргә һәм ҡайырын һығып алырға. Килеп сыҡҡан ҡайнатманың миҡдарын 1 стаканға тултырып һыу өҫтәргә. Шуның менән ауыҙҙы көнөнә 6-8 тапҡыр сайҡатырға.

### Гайморит

❖ 2 ҡалаҡ һарыгүҙ (золототысячник) һәм 1 ҡалаҡ меңъяпраҡҡа ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, 2 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Төнәтмәне танау аша һурып тамаҡты сайырға. Дауаланыу - 3 көн. Был рәүешлә дауаланғандан һуң танауҙың ике тишегенә лә әсе борос йәки аҡһырғаҡ (чемерица белая) тамыры онтаҡтарын тығып, сөскөрөргә кәрәк. Эрен сөскөргән һайын тамсылап сыға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Дәүләт ветеринария хеҙмәте менән килешмәйенсә тороп, сит өлкәләр һәм төбәктәрҙән малдар килтермәҫкә; мал һатып алыу йә булмаһа, үрсем алыу, мал һуйыу һәм һатыу хаҡында ветеринария хеҙмәтенә хәбәр итергә.*

*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# ЙОРТ ЙЫҺАҘДАРЫ

Шул уҡ ваҡытта ағас йорттарҙы йыһазлағанда ниндәйҙер яңылыҡтар индереүҙән дә баш тарта алмағандар. Тирмә эсендә кеүек үк, өйҙә әйберҙәр ишек һәм усаҡ урынына ҡарап урынлаштырылған. Әммә бында мейес ишек төбөндәге мөйөшкә күсерелгән, уның алдына алғы яҡ стена буйында иҙәндән күтәрелеберәк торған, таҡтанан һалынған урындыҡ (һике лә тиҙәр ҡайһы яҡтарҙа) барлыҡҡа килгән. Урамға ҡарап торған тәҙрәләр тапҡыры түр урын һаналған.

Ҙур ғына территорияла (тау-урман һәм Урал аръяғы райондарында) нәҙек бейек ауыҙлы һәм тура торбалы сыуал киң таралған. Шуныһы ҡыҙыҡлы, уны һалғанда ишелгән һайғауҙарҙан ағас каркас ҡуйғандар, ҡайһы берҙә иҫке ҡайыҡ ҡулланылған. Сыуал эргәһендә аш бешерер өсөн ҡаҙанлы усаҡ эшләнгән. Аш бешерелмәгән "таҙа" бүлмәлә тик сыуалдар ғына эшләнгән, һуңыраҡ уларҙы яҡшыраҡ йылытыу системалары - голландка-мейестәргә алмаштырғандар. Урал буйында усаҡ менән ҡаҙанлыҡты икмәк бешерә торған мейескә тоташтырғандар, быларҙы урыҫ мейесе тип атағандар. Яйлап ошо төр мейес Башҡортостандың бөтә райондарына таралған.

Дим йылғаһынан Өфө ҡалаһы аша көнсығышҡа, Йүрүҙән йылғаһына тиклем сәйәхәт иткән иҡтисадсы һәм этнограф М.А. Круковский юлъяҙмаларында XX быуат башындағы башҡорт өйөн һүрәтләй: "Ишектән ингәс тә уң яҡта ҙур булмаған мейес тора... Мейестән алғы яҡ стенаға тиклем төрлө төҫлө биҙәктәр сигелгән һәм бүлмәне икегә бүлгән шаршау һуҙылған, ишеккә ҡаршы стенаның буйынан-буйына киң, тәпәш урындыҡ эшләнгән". Урындыҡ телгә алынмаған бер генә этнография хеҙмәте лә юҡ: "Өйҙә стеналар буйлап һуҙылған һәм кейеҙ ябылған урындыҡтар мебель ролен үтәй". "Өйҙөң ҙур өлөшөн яҫтыҡтар, келәмдәр түшәлгән урындыҡ биләй".

Урындыҡ ысынлап та йорттоң ҙур ғына өлөшөн биләп торған. Ғәҙәттә улар ишектән алыҫ урынлашҡан яҡта өйҙөң ике стенаһы араһында эшләнгән. Киңлеге метр ярым-ике метр тирәһе, бейеклеге 40-50 сантиметр булған. Ҡайһы саҡ ишек төбөндә, мейес эргәһендә тағы бер ҙур булмаған урындыҡ ҡуйылған. Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышында урындыҡтың мөйөшө сыуалға ҡаршы урынлашҡан һәм өйҙөң тотош ике стенаһын алып торған.

XIX-XX быуаттарҙа ултыраҡ тормошҡа күсеү һәм торлаҡ һалыу үҫеше өйҙөң урам рәтендә нисек урынлашыуына, ишек ҡайһы яҡтан уйылыуына (бураның оҙон йәки нәҙек яғында), бүлмәләр һаны һ.б. шарттарға ҡарап, урындыҡ һәм мейес төрлө урында эшләнә башлаған. Бик оҙаҡ, XX быуат уртаһына тиклем урындыҡ башҡорт өйөнөң айырылғыһыҙ бер өлөшө булып торған, сөнки ул ял итеү, йоҡлау, ашау урыны ла булған. Элек тирмәлә кеүек түшәк өйөлгән һандыҡтар, йәки урын аяҡтары ҡуйылған. Бер нисә таҡтаһын күтәреп, урынағастарҙы индереп эшләгәндәр. Һуңыраҡ ошо рәүешле ҙур булмаған өҫтәл дә ҡуйғандар. Урындыҡтың өй эсендә иң күренеп торған, хатта үҙәк күренеше булғанға күрә, уларҙы һырлау ғәҙәткә ингән. Башҡорт өйөнөң эсен семәрләү тышҡы яҡтан биҙәүгә ҡарағанда иртәрәк барлыҡҡа килгән күренеш кеүек тойола.



*Һырланған урындыҡ. Әбйәлил районы, Буранғол ауылы, 1971 й. Н.В. Александров һүрәте*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

*ИҪКӘРТЕҮ*

# БАЙМАҠТА - КАРАНТИН



**Баймаҡ районында эре баш малға йоғошло нодуляр дерматит сире янай. Унда карантин иғлан ителде.**

Район хакимиәте башлығы Фәнис Әминев социаль селтәрҙәге диуарында хәбәр итеүенсә, эре баш малдарҙың төйөрлө дерматит менән зарарланыу билдәләре Моҡас ауыл хакимиәтенең 1-се Төркмән ауылында табылған. Тикшереү үткәрелеп, өлгөләр алғандан һуң 17 шәхси ярҙамсы хужалыҡта ошо сир менән зыянланған 124 баш һәм ике крәҫтиән-фермер хужалығында 76 баш мал булыуы асыҡланған. Малдарҙың бөтәһе лә юҡ ителде. "Сир сығанағы табылған ауыл халҡы менән сход үткәрелде, белгестәр кешеләрҙе ҡыҙыҡһындырған бөтөн һорауҙарға ла яуаптар бирҙе. Халыҡтың был проблема айҡанлы борсолоуҙары аңлашыла: улар мал көсө менән донъя көтә. Сир сығанағын сикләү маҡсатында тораҡ пункты тирәләй карантин постары булдырылды. Әлегә карантин 3-4 аҙнаға тиклем индерелде, хәлде даими контролдә тотасаҡбыҙ. 15 км радиустағы 8 ауылдағы барлыҡ малдарға ла прививка эшләнә. Әлбиттә, 2021 йыл район өсөн бик ҡатмарлы килде: саранча, ебәк күбәләге баҫып алғайны, унан ҡоролоҡҡа, янғындарға ҡаршы көрәштек. Урындағы халыҡ менән был проблеманы ла еңеп сығырбыҙ, тип уйлайым", - тип һөйләне "Башинформ" агентлығына район хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Азат Шәрипов.

Белгестәр бәйән итеүенсә, был сирҙең тышҡы билдәләре шундай: биҙгәк тотоу, малдарҙың ябығыуы һәм продуктлылығы кәмеү, лимфа системаһының зарарланыуы, тире аҫты күҙәнәклеге һәм эске органдарҙың шешенеүе, тирелә төйөрсәләр барлыҡҡа килеү, күҙҙәр, тын һәм аш һеңдереү юлдарының лайлаһы зарарланыу. Был сирҙән малдарҙың үлеү кимәле 10 проценттан артмаһа ла, ҡабатлап йоғоу хәүефе була ҡалһа, хәл ҡатмарлаша һәм үлем осраҡтары ла арта.

Район башлығы Баймаҡ районы халҡына мөрәжәғәт итеп, түбәндәге ҡағиҙәләрҙең үтәлеүен һораны: Дәүләт ветеринария хеҙмәтенең Баймаҡ бүлексәһе менән килешмәйенсә тороп, сит өлкәләр һәм төбәктәрҙән малдар килтермәҫкә; мал һатып алыу йә булмаһа, үрсем алыу, мал һуйыу һәм һатыу, бер нисә баш мал үлгән осраҡтар хаҡында дәүләт ветеринария хеҙмәтенә хәбәр итергә; ветеринария белгестәренә уларҙың талабы буйынса малдарҙы ҡарарға, тикшерергә һәм диагностика ҡуйырға булышлыҡ итергә; малдарҙы һуйырҙан алда һәм аҙаҡ ветеринария белгестәренә күрһәтергә. Эре баш малдарҙа йоғошло нодуляр дерматит билдәләре асыҡланыу менән был хаҡта Баймаҡтағы дәүләт ветеринария хеҙмәтенә ошо телефондар буйынса шылтыратырға кәрәк: 8 (34751) 3-33-21; 8 (34751) 3-32-37.

**Азат ҒИЗЗӘТУЛЛИН.**

# ЗАРАРЛЫ ОРЛОҠ ТАБЫЛҒАН

**Башҡортостанға хәүефле ҡый үләне орлоғон индерергә маташҡандар. Шикле был табыш Дүшәмбе ҡалаһынан килгән пассажирҙың багажындағы аҡ әнис орлоғо партияһында булып сыға. Был хаҡта Россельхознадзорҙың Башҡортостан референт үҙәге матбуғат хеҙмәтенән хәбәр иткәндәр.**

"Өфө" халыҡ-ара аэропортында Дүшәмбе-Өфө рейсы пассажирының багажы менән ҡул сумкаһын тикшергәндә Россельхознадзор идаралығының Башҡортостан буйынса дәүләт инспекторы унда аҡ әнис орлоғо таба. Бер ниндәй документы булмаған үҫенте орлоғо тартып алына һәм экспертизаға ебәрелә. Башҡортостан тәжрибә лабораторияһының үҫемлектәр карантины һәм орлоҡтар сифаты бүлеге белгестәре экспертизаһы һөҙөмтәһендә аҡ әнис орлоғо араһында Ценхрус атамалы хәүефле карантин ҡый үләне орлоғо табылған. РФ территорияһында зарарлы карантин үҫемлеге таралыу ҡурҡынысын иҫкәртеү маҡсатында орлоҡ тотошлайы менән юҡ ителгән. Оҙон сәнскеле Ценхрус - ҡыяҡлылар ғаиләһенә ҡараған зарарлы карантин ҡый үҫемлеге. Ул тупраҡтан дым һурып һәм файҙалы матдәләр менән туҡланып, ауыл хужалығы культуралары уңышының кәмеүенә килтерә. Шул уҡ ваҡытта уның малсылыҡта ла зыяны ҙур: сәнскеле башаҡтары үлән аҙығы араһында мал ауыҙына эләгеп, унда шеш һәм яралар барлыҡҡа килтерә, һарыҡтарҙың йөн сифатын боҙа.

# МАЛДАРҘА - ЛЕЙКОЗ СИРЕ

**Башҡортостанда бер меңдән ашыу һыйыр лейкоз менән зарарланған. Был турала Россельхознадзорҙың төбәк идаралығы матбуғат хеҙмәте хәбәр итә.**

Сирле малдар Бөрө, Благовещен, Йәрмәкәй, Иглин, Кушнаренко һәм Өфө райондарының ауыл хужалығы предприятиеларында һәм фермаларында табылған. 3 972 баш малдан алынған ҡан өлгөһө тикшерелгән. Башҡортостан ғилми-производство ветеринария лабораторияһында тикшерелгән анализдар һөҙөмтәһендә 105 баш малдың лейкоз һәм яман шеш менән сирләүе асыҡланған. Ветеринария хеҙмәте бындай осраҡтар табылған бөтөн хужалыҡтарҙа ла карантин иғлан иткән. Сирле малдар төп һауын һыйырҙар көтөүенән айырып ҡуйылған. "Россельхознадзорҙың Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығында был хәл даими мониторингта һәм контролдә тотола, РФ ветеринария закондары положениелары үтәлә", - тип белдерәләр ведомствонан. Термик эшкәртеү үтмәгән һәм зыянланған мал итен ҡулланырға ярамай. Һыйыр организмындағы яман шеш вирустарында ағыулы һәм башҡа зарарлы матдәләр туплана, шунлыҡтан, был кеше организмына эләгеп, уны ла ағыулауы ихтимал. Әлеге ваҡытта һыйыр лейкозы кеше өсөн ҡурҡыныс тыуҙырмаһа ла, вирус бик тиҙ мутацияға дусар ителә һәм ул кеше һаулығы һәм ғүмере өсөн ҙур хәүеф менән янай.

*ТАҒЫ БЕР ИҪКӘРТЕҮ*

# ЯЛҒАН АҠСА НИНДӘЙ?



**Башҡортостанда ялған банкноталарҙың 93 проценты 5 меңлек купюралар икән. Был хаҡта БР Милли Банктан хәбәр иттеләр. Тәүге ярты йыллыҡта республикала 495 ялған аҡса асыҡланды. Шуның 460-ы- биш меңлек купюра. Икенсе урында - 1 меңлек һәм 100 һумлыҡ аҡсалар. Шулай уҡ 500 һумлыҡ һәм 2000 һумлыҡтар ҙа бар.**

Алданмаҫ өсөн бәләкәй магазиндарҙа, автозаправкалау станцияларында, баҙарҙа йәки ҡулдан-ҡулға иҫәпләшкәндә 5000 һәм 1000 һумлыҡ аҡсаның ялғанмы-ысынмы икәнлеген һәр ваҡыт тикшерегеҙ, йәғни кәмендә өс-дүрт һаҡлау билдәһен табырға тырышығыҙ. Уны яҡтылыҡҡа ҡуйып күрергә мөмкин. Унда һандарҙан тыш, тарихи шәхестәр портреттары, номинал һаны ҡабатланған полимер пленканан нәҙек кенә епсәләр бар. 1000 һәм 5000 һумлыҡ банкнотаны ҡырынайтып ҡараһаң, ҡала гербтары буйынса ялтыр һыҙат үткән һымаҡ була. Шулай уҡ ҡулға рельефтар ҙа беленә: Рәсәй Банкы эмблемаһы, "Рәсәй Банкы билеты" тексы,ситендәге штрихтар.

✓ ***Антик Европа халыҡтары ҡырынмаған да, сәстәрен дә ҡырҙыртмаған. Тик шуныһы, ошо "таҙ" атамаһын үҙ иткән төркиҙәр Азия далаларында ғына түгел, Көньяҡ Уралда ла бик боронғо замандарҙан бирле көн иткән.***



*ЫРЫУЫҢ КЕМ?*

# ТАҘЛАР - ТАРИХ АТАҺЫ ГЕРОДОТ АРГИППЕЙҘАРЫ ВАРИҪТАРЫ

XX быуат урталарында башҡорттарҙың Көньяҡ Урал ерлегендә автохтон халыҡ булыуын, йәғни уларҙың ата-бабаларының бик боронғо, архаик дәүерҙәрҙән бирле ошо территорияла йәшәүен раҫлаған ғилми концепциялар бар. Ошо ерле башҡорт ҡәүемдәре араһында таҙлар ырыуы вәкилдәренең дә булыуын раҫлаусы мәғлүмәттәр табылған. Бында иң элгәре "таҙлар" этнонимының баштарында сәстәре булмаған, таҙа итеп ҡырылған, таҡыр башлы кешеләргә ҡарата ҡулланылыуын иҫәпкә алырға кәрәктер. Тап ошо урында башҡорт ир-егеттәренең боронғо осорҙарҙан бирле оҙон сәс үҫтермәйенсә, башлыса, баштарын тап-таҡыр итеп ҡырып йөрөү традицияһы хаҡында иҫләргә кәрәктер. Башҡорттар борон-борондан яугир халыҡ булып танылған, ә оҙайлы походтарҙа, меңәр саҡрым ерҙәр буйлап, ҡомло-туҙанлы юлдарҙы һыбай үткән атлы ғәскәргә тәндәрен таҙа тотоу фарыз бит инде. Ә оҙон сәсте таҙалау өсөн күп осраҡтарҙа тейешле шарттар ҙа булмағандыр. "Таҙ" һүҙенең этимологик мәғәнәһе буйынса шул уҡ "таҙа" һүҙенә барып тоташыуына ышанып булалыр.



XX быуатта бер төркөм тикшеренеүселәр тарафынан иртә тимер эпохаһында уҡ Көньяҡ Урал ерлегендә урындағы ҡәбиләләрҙән башҡорт этносының нигеҙен тәшкил иткән этник ядро-үҙәктең барлыҡҡа килеүе хаҡындағы мәсьәлә күтәрелә. Тарих фәнендә ошо фаразды, тәүгеләрҙән булып, күренекле этнолог, башҡорт этнографияһына нигеҙ һалыусы ғалим С.И. Руденко күтәрә. Ул Евразия киңлектәрендә билдәлелек тапҡан сак-дахо-массагет-исседон ҡәбиләләре менән урта быуаттар тарихында - IX-XIV быуаттарға ҡараған тарихи сығанаҡтарҙа теркәлгән башҡорттар араһында туранан-тура генетик бәйләнеш булыуына инанған. Беҙҙең өсөн С.И. Руденконың бына ниндәй фекере мөһим: беҙҙең эраның башында уҡ тарихи башҡорттар (Көньяҡ Уралда һәм уға йәнәш булған географик өлкәләрҙә) уртаҡ көнкүрешле, бер үк тел һәм мәҙәниәткә ҡараған ерле берҙәм этник төркөм булып формалашҡан була. Улар үтә оҙайлы тарихи дәүерҙәрҙә, башлыса, хәрәкәтсән малсылыҡҡа (урындағы климатҡа яраҡлаштырылған ярым күсмә хужалыҡ итеү менән бәйле, әммә төпләнгән ерҙәренән бигүк алыҫ булмаған территорияла) нигеҙләнгән йәшәү рәүешенә тоғро ҡала, Көньяҡ Уралда һәм уға яҡын ареалда барған тарихи ваҡиғалар уларҙың физик булмышында ла, телендә һәм көнкүрешендә лә артыҡ сағылыш тапмай.

С.И. Руденконың боронғо башҡорт тарихына асыҡлыҡ индереүсе ҡараштарын шулай уҡ киң билдәле ғалимдар С.Е. Малов һәм Ж.Ғ. Кейекбаев хуплап сыға. Был ғалимдар башҡорт теленә, башҡа бер төрки ҡәүемдәре телдәренән айырмалы, үтә боронғо, реликт һыҙаттар хас булыуын иғтибарға алған. Телдең фонетик һәм лексик составын тикшереү аша ошо телдә аралашҡан халыҡтың тарихи үҙенсәлектәре хаҡында ла ысынбарлыҡҡа тап килгән һығымталар эшләргә була. Ошо ғилми гипотеза, Урал ерлегендә хасил булып, ошо территорияла меңәр йылдар дауамында көн иткән төп башҡорт этник төркөмдәренә тарихи-сәйәси процестар барышында яңынан-яңы төрки сығышлы ҡәүемдәрҙең килеп ҡушыла барып, башҡорт этник берлеген ҙурайта һәм ҡеүәтләндерә барыуын да инҡар итмәй.

Тикшеренеүсе С.Е. Малов фекеренсә, боронғо башҡорт теле бик иртә (беҙҙең эраға тиклем V быуаттан да һуң түгел) уға нигеҙ булған боронғо төрки теленән айырылып сығып, төрки донъяһының көнбайыш сигендә үҙаллы үҫеш кисергән башҡорт-ҡыпсаҡ-мишәр төркөмө телдәрен хасил итә. Ошо ғалимдың фаразлауынса, боронғо башҡорттарҙың айырым этник төркөмдәре иртә урта быуаттар осоронда ғәйәт киң географик ареалда таралып йәшәп, Көнсығыш Европаның көньяҡ тарафтарынан (Дунай йылғаһы тамағынан, Ҡара диңгеҙгә яҡын далаларҙан) Көньяҡ Уралға тиклемге ерҙәргә хужа була. Ғалим фекеренсә, б.э. тиклем VII - III быуаттарҙа Ҡара диңгеҙҙең төньяҡ тарафтарында йәшәгән скиф ҡәбиләләре лә, башҡорттарға ҡәрҙәш халыҡ булып, боронғо төрки телендә аралашҡан. Күренекле лингвист Жәлил Кейекбаев та, шул уҡ фекерҙе ҡеүәтләп, боронғо башҡорт ҡәүемдәренең бынан 4000 - 3500 йылдар самаһы элегерәк, Азия төркиҙәренең төп массивынан айырылып киткән хәлдә лә, тарихи сығанаҡтарҙа сағылыш тапҡан дахо-массагет, иссидон-иирктар менән генетик бәйләнештә булыуын раҫлай.

Шул уҡ ваҡытта Көньяҡ Урал ерлегендә көн иткән тәү ҡәбилә халыҡтарының, урындағы ҡырағай аттарҙы (тарпандарҙы) эйәләштереп, үҙҙәре йәшәгән төбәктән байтаҡ алыҫ ерҙәргә күсеп йөрөй алыуы ысынбарлыҡҡа тап килә, тип раҫлап була. Көньяҡ Уралдан Арал диңгеҙенәсә, Урта Азияның Һырдаръя һәм Амударъя йылғалары үҙәндәренә, Алтай тауҙарына тиклем һуҙылған киң арауыҡта беҙҙең эраға тиклем йәшәгән ҡәүемдәрҙең этник бәйләнешен инҡар итеп булмай. Ошо архаик осорҙа, донъя аренаһында төркөттәр (тюркют) исеме менән билдәле буласаҡ этник берләшмә формалаша. Әлбиттә, уртаҡ мәҙәниәттәре һәм бер-береһенә аңлайышлы телдәре барлыҡҡа килгәнсе үк, боронғо төрки ырыу-ҡәбиләләренең үҙатамалары, йәғни этнонимдары ла була. Күренекле ориенталист, Урта, Үҙәк һәм Кесе Азия төркиҙәре тарихын ентекләп өйрәнгән Ә.-З. Вәлиди Туған, бәғзе бер башҡа ғалимдар, тарихсы-этнологтар архаик башҡорттарҙың ата-бабаларының борон Рифей тип атап йөрөтөлгән бейек тау һырттарында йәшәүен тарихи факт, тип иҫәпләй. Боронғо грек авторы, тәү тарихсы Геродот (б.э. тиклем V быуат) аргиппейҙар ҡәүеме хаҡында бына нисек яҙған: "Бейек тауҙар итәгендә кешеләр йәшәй, уларҙың таҙ булыуы хаҡында әйтәләр, уларҙың исеме аргиппей". Ул таҙларҙы "ете ырыулылар" тип тә яҙған.

Был ҡәүем кешеләрен ни өсөн таҙ тип атағандар һуң? Белеүебеҙсә, антик Европа халыҡтары ҡырынмаған да, сәстәрен дә ҡырҙыртмаған. Сәстәрен тап-таҡыр итеп ҡырҙырып алдырған кешеләр улар өсөн үтә лә сәйер булып тойолғандыр инде. Тик шуныһы, ошо "таҙ" атамаһын үҙ иткән төркиҙәр Азия далаларында ғына түгел, Көньяҡ Уралда ла бик боронғо замандарҙан бирле көн иткән, быны бер нисек тә инҡар итеп булмай. Күренекле башҡорт археологы, академик Нияз Мәжитов та Көньяҡ Урал ерлегендә көн иткән сак-массагет ҡәбиләләренең төрки телле булыуы хаҡындағы фараз менән килешкән.

Ғөмүмән, боронғо Азия халыҡтары араһында сәстәрен ҡырҙырып йөрөүсе төркиҙәр менән бер рәттән, көнсығыш фарсы ҡәүемдәре лә булған. Ҡытай хроникаларында юэчжи, йәғни тохар ҡәүеме "Аҡ башлылар", тип иҫкә алына. Таҙларҙы "ай башлы", тип тә атағандар. Фарсыларҙың "Шахнамә"һендә "Ай батшаһы" тип аталған Кабул хакимы Мехрабтың бабаһы ла Таҙ исемле булыуы хаҡында мәғлүмәт бар. Заманында Азияла хакимлыҡ иткән эфталиттар (уларҙы "аҡ һундар", тип атағандар) ҙа сәстәрен ҡырҙыртып йөрөр булған.

Шуныһы ҡыҙыҡ, эфталиттарҙағы кеүек үк, таҙларҙың да "аптал" йәиһә "абдал" тип йөрөтөлгән нәҫел тармағы була. Көнсығыш тарихында киң билдәле Истеми ҡаған улы, төркөт ҡағаны Дяньгуның 598 йылда Византия императоры Маврикийға яҙған хатында (Феофилакт Симокатты яҙмаһы буйынса) ла абдел ҡәүеме хаҡында мәғлүмәт бар: "Разбив наголову вождя племени абделов (я говорю о тех, которые называются эфталитами), этот каган победил их и присвоил себе власть над ними".

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы. Башы 48-се һанда).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 76*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Мәңгелеккә рейд: бер туғандай үтәнеләр изге Ватан ҡушҡанды

Байтаҡ ҡына ваҡыт үткәндән һуң, дошман арьергардта барған 15-се корпус частарын шәйләп ҡалып, көслө ут аса. Әммә атлылар ут аҫтынан алыҫҡараҡ китеп өлгөрөп, артыҡ юғалтыуҙар кисермәй. Бында ошо дивизияның подразделение командирҙары ла бик оҫта эш итә: төнөн, Чернухино станцияһын ҡалдырып сығып киткәндә, унда алты ғына снаряды булған бер орудие расчеты ҡалдырыла. Көн яҡтырыуға немец пехотаһы һәм уларҙың танкылары Чернухино урамдарына инә. Гвардия лейтенанты Гоненконың орудиеһы дошманға, яҡындан тура төҙәп, ут аса, уның 3 танкыһын емертә, 2 пулемет расчетын һәм 2 тиҫтәгә яҡын автоматчиктарын сафтан сығара. Беҙҙең артиллеристар, снарядтары бөткәс, йәшертен торған егеүле ат саналарына ултырып, поселоктан тиҙ арала сығып китергә өлгөрә.

19 февралдә кискә табан корпус колоннаһы Стрюково ауылына яҡынлаша. Унда был ваҡытта дошмандың инженер ротаһы оборона рубежын нығытыу менән мәшғүл була, урындағы халыҡ та окоптар ҡаҙыу эшенә йәлеп ителгән була. М.М. Шайморатов 60-сы атлы полкҡа Стрюковоға бәреп инергә бойора. Иң алдан ауылға өлкән лейтенант Мөлки Байрамов эскадроны сабып килеп инә. Атыш башланғанын күреп, окоп ҡаҙыусылар көрәк-кәйләләре менән албырғап ҡалған немец һаҡсыларына ташлана. Дошман ротаһы тулыһынса ҡыйратыла. Стрюково ауылында беҙҙең яугирҙарыбыҙ һуғыш припастарын барлай, һуңғы патрондар, гранаталар өләшеп бирелә. Рассыпной утары яғынан немецтар һөжүмгә күскәс, түңәрәк оборона ҡорола, дошман атакалары кире ҡағыла.

Кис етә. Корпус командиры М.Д. Борисов һәм корпус штабы начальнигы, гвардия полковнигы Иван Дмитриевич Сабуров, М.М. Шайморатов менән кәңәшләшеп, Стрюкованан алыҫ булмаған Грабово ауылына төнгө һөжүм ойоштороорға була.

Грабово ауылына төнгө атакаға иң тәүҙә 62-се атлы полк яугирҙары ебәрелә. Ауылға етмәҫ элек үк уларға дошман частары менән алышҡа инергә тура килә. Өлкән лейтенант Әсғәт Искәндәровтың пулемет тачанкаһы, дошман сылбырына үтеп инеп, фашистарҙы көслө пулемет утына тота, байтаҡ дошман һалдаттары ошонда үҙ үлемен таба. Мәргән пулеметсылар Ғәзизйән Ҡотдосов, Кәбир Кинйәбулатов һәм башҡа яугирҙар батырҙарса һәләк булып ҡалған яуҙаштарының ҡанмаған үсен ошолай ала: Грабово ауылы янындағы һуғыш яланында 85 дошман һалдаты ятып ҡала. Тере ҡалған дошман һалдаттары Грабово ауылына сигенә, әммә был саҡта 60-сы гвардия полкы яугирҙары, көньяҡ-көнбайыштан урап үтеп, ауылға бәреп ингән була. Улар, дошмандың 3 һуғыш припастары складына юлығып, уны тиҙ арала шартлатып юҡ итә. Ошо ғәйрәтле төнгө һөжүмдә 15-се гвардия дивизияһының разведка дивизионы ла батырҙарса алыша: улар дошмандың 90 һалдаты һәм офицерын юҡ итә, уның аҙыҡ-түлек төйәлгән бер нисә автомашинаһын һәм хәрби мөлкәт менән тулы складын ҡулға төшөрә.

Тарихи хикәйәтебеҙҙең ошо урынында, дивизияның артабанғы һуғыш хәрәкәттәре барышынан бер аҙға ситкәрәк китеп, мөмкин булғанса, алдараҡ иҫкә алынған яугирҙарыбыҙҙың яҙмышына күҙ һалайыҡ.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

✓ *Атайҙарҙың тормош юлы беҙгә сынығыу һәм рух ныҡлығы өлгөһө булып ҡала. Әле ауыр ваҡыттарҙа ла, еңел мәлдә лә төплө аң кимәлебеҙ, атайым шулай ине, атайым былай ине, тип иҫкәртеп тора.*



**"Йөрәгендә халҡы булмағандың
Кеше булырға ла хаҡы юҡ!" - халыҡ шағирының рефрен булып яңғыраған шиғыр юлдары "Атайҙар мәктәбе" исемле яңы рубрикаға материал әҙерләгәндә ҡолаҡ төбөндә сыңлап тик торҙо. Был сыңлау халыҡ артистары менән осрашҡанға ғына түгел, күрәһең. Тимәк, халыҡ күңеленә үтеп инергә тейеш яңы ауаз. Һүҙ бит атайҙар, олатайҙар тураһында ғына түгел, ғөмүмән, йәшәйеш тураһында, беҙҙең турала. Үҙебеҙҙе борсоған меңәрләгән һорауҙың береһенә булһа ла яуап тапһаҡ, атайҙар һүҙе бушҡа булмаҫ. Һүҙ ғаиләләрендә өсәр ул тәрбиәләүселәргә: Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Хөрмәтулла Ғаззали улы ҮТӘШЕВ менән Башҡортостан Республикаһының халыҡ артисы Илдар Ибраһим улы ҒҮМӘРОВҡа.**

**Һүҙҙе атайҙарығыҙҙан башлайыҡ. Кемдәр улар? Хәтерегеҙҙә нисек уйылып ҡалғандар?**

**Хөрмәтулла:** Беҙ ғаиләлә дүрт малай, дүрт ҡыҙ үҫтек. Алтынсы бала - мин. Беҙҙең осорҙоҡолар - фронтовик балалары. Әңгәмәбеҙ атайҙар мәктәбе тураһында булғас, бик шатланып, атайым тураһында күп итеп һөйләй алам. 1909 йылғы ул. Билдәле көрәшсе була. 14-15 йәшенән көрәшә башлай. Атай-әсәйен бер тәүлек эсендә юғалтып, етемлектә үҫә. Еңелдән булмаған атайымдың бала сағы. Ололар уның көрәш менән ихлас ҡабырғаларын һындырғанда, йә ҡулдарын, бармаҡтарын имгәндергәндә ауыртынғандыр ҙа. Башҡа һыймаҫлыҡ хәл булды ул минең өсөн. Ун ете йәшемдә башҡа һыймаҫлыҡ эмоциональ тетрәнеү кисерҙем. Атайҙы юғалтыу ҡайғыһы шул тиклем көслө булғандыр инде, унынсыны көс-хәл менән уҡып бөттөм.

**Илдар:** Беҙҙең ғаиләлә биш бала булдыҡ: өс малай, ике ҡыҙ. Атайым Ибраһим Исмәғил улы 1910 йылғы ине. Ауыр яҙмыш юлы үтә ул. 1917 йылғы революция, нығынып аяҡ баҫып килгән мәлдәренә 21-се йылғы аслыҡ тура килә. Астан үлмәҫ Исмәғил ҡартатай) тәрбиәгә үҙенә алып ҡала. Атайым һөргөндә Колымала булып, 1939 йылда ғына өйләнеп ҡайта. Шунан Мәфтуха исемле икенсе инәйебеҙгә (уртансы ағайым Мөхәммәтдиндең әсәһенә) өйләнә. Әммә яҙмыш һынауы атайым өсөн быны менән генә бөтмәй. Ун йәшлек Ғәйнетдин менән бер йәшлек Мөхәммәтдинде ҡалдырып, 1941 йылдың 23 июнендә һуғышҡа китә. Һуғыштан иҫән-һау ҡайтып, инде тормош көтә башлаған саҡта, 1947 йылда Мәфтуха инәйебеҙ вафат була. Ике ағайымдың донъяға килеү һәм ғүмер юлдаҡалмағанбыҙ. Атайым шофер булараҡ Ладога күлендәге "Дорога жизни" тип нарыҡланған юлда йөрөгәнен, бер гармунсы егеттең, бомбежка башланһа, "Двум смертям не бывать, Эх Семеновна..." тип гармунда уйнап ебәргәнен, бергә утлы юл үткән, үлем алдында ла кеше баҙап ҡалмаған башҡа фронтташтарын һөйләй торғайны.

Әле атайымдың яҙмышы тураһында уйланам да, уның сабырлығына һоҡланам. Ҡай саҡ ниндәйҙер ҡырҡыу мәсьәләләрҙе хәл иткәндә уның рух ныҡлығын иҫемә төшөрәм. Күпме ауырлыҡтар күрһә лә, төшөнкөлөккә бирелеп ултырғанын хәтерләмәйем, киреһенсә, юморға бай булды. Бер мәл ауылға ҡайтһам, атай: "Мылтыҡты алып бир әле", - ти. "Нимәгә ул?" - тим. "Бынау кәртә башына бер ҡарға килеп ҡуна ла, ҡаааррт, ҡаааррт," - тип мине үсекләп ҡысҡырып ултыра, ҡарт икәнемде үҙем белмәйемме ни мин. Атам мин уны", - тип шаяра ине. Йәнгә ауыр саҡтарҙа юморҙың күңел йыуатыуатайым ун метрлап алдан атлай, әсәйем артынан эйәреп бара. Табын бөткәс, ҡатындар ҡайта, ирҙәр донъяуи мәсьәләләр тураһында һөйләшеп ултырып ҡала. Ғөмүмән, былай ваҡытта ла ирҙәр менән ҡатындарҙың йәнәшә йөрөгәндәре иҫтә ҡалмаған. Хатта балалары ҙурайып, оҙаҡ йылдар бергә ғүмер кисереүҙәренә ҡарамаҫтан, бергә йөрөмәне ир менән ҡатын. Борондан килгән тәрбиә, йола шулай булғандыр, күрәһең.

Ә инде үҙебеҙҙең өйҙәге тормошҡа килгәндә, атай беҙҙе тик эш менән генә тәрбиәләне тип әйтә алмайым. Шулай ҙа эшкә ҡуша ине. Иртәгә шул-шул эш менән булабыҙ, тип, бер көн алдан иҫкәртеп ҡуйыр ине. Үҙенсә эшкә көйләүе булғандыр. Һиңә биш йәшме, ун йәшме - мөһим түгел, бөтә ғаилә ағзалары менән бергә йөрөргә тейешһең. Атайҙың тәрбиәһе шунан ғибәрәт: ҡулдан тотоп өйрәтмәй, уның таһыллығына ҡарап өйрәнергә тейешһең. Ҡарап тороу өсөн күп аҡыл кәрәкмәй, бергәләп эшләү күп нәмәгә өйрәтә.

# УЛАРҘЫҢ ТӘРБИӘҺЕ

## ә беҙҙеке -

мауығыуын аңлап, был баланы һаҡларға кәрәк, тип кәңәш ҡоралар. 16 йәшенә ул ҙур көрәш майҙандарында ла бил бирмәй, көрәшсе исемен яҡлай башлай. Атайымдың һөйләгәне иҫемдә: теләһә кем уның менән көс һынаша алмаған. Ауыл осонда ятҡан ауыр йомро ташты кем күкрәге тәңгәленә тиклем күтәргән, шул ғына майҙанға сығыу хоҡуғы алған. Элек бит ауырлыҡ категорияһы тигән төшөнсә булмаған, майҙанға сыҡҡандар ҙа, бил бирмәҫ бер кеше ҡалғансы көрәшкәндәр.

Атайым шулай 62 йәшенә тиклем көрәшә, Урал аръяғында билдәле көрәшсегә әйләнә. Ул ғына ла түгел, Ырымбур яҡтарында, ҡаҙаҡ далаларында ла ишетәләр еңелмәҫ батыр тураһында. Ул осор көрәшселәре бер-береһе тураһында хәбәрҙар булғандар, эҙләп табып, үҙ-ара осрашып торғандар. Быны өсөн мотлаҡ һабантуйҙарҙа, йыйындарҙа көрәшеү генә етмәгән, бәйге көндәлек тормошта ла дауам иткән. Ҡаҙаҡтарҙан, истәк батыры килһен, тигән хәбәр алһа, барған, көрәшкән, еңгән. Ҡаҙаҡтар үҙҙәре лә эҙләп килә торған булғандар уны. Башҡорт бит ҡунаҡсыл, һәйбәтләп ҡаршылағандар, ҡунаҡ иткәндәр. Һәм, әлбиттә, ундай осрашыуҙар көрәш менән тамамланыр булған.

Аллаһҡа шөкөр, әле лә йыл һайын атайым исемендәге призға көрәш ярыштары уҙғарылып тора. Республика, төбәкара кимәлдә лә үтә ундай саралар. Аҡъярҙа Ғаззали Үтәшев исемен йөрөткән урам бар. Спорт комплексы эргәһендә 100 йәше уңайына бюст ҡуйылды.

Унынсы класта уҡып йөрөгәнемдә атайым 67 йәшендә үлеп ҡалды. Ул ауырыманы ла, имен-һау йөрөнө лә ҡоланы ла ҡуйҙы. Һыҙланып йөрөгәнен дә иҫләмәйем. Бәлки, көрәштәрҙә



өсөн атайым ике йәшкә өлкәнерәк ағаһы Иҙрис менән Үзбәкстан яҡтарында ла йөрөп ҡайта. Колхозлашыу йылдарында атайым районда тәүге механизаторҙарҙың береһе була. Шулай колхозда тырышып эшләп йөрөгән кешене көтмәгәндә 1935 йылдың 23 февралендә ҡулға алалар. Комбайнға зыян килтергән өсөн, тип әйтә торғайны атайым, әммә кемдәрҙер көнләшеүҙәнме, үс алыу ниәтенәнме, трактор радиаторына лом тығып киткән булған, тип тә әйттеләр. Атайымдың ҡартатаһы Ғүмәрҙең хажи булыуы ла, бәлки, йоғонто яһағандыр. Ни булһа ла 25 йәшендә атайымды "халыҡ дошманы" мөһөрө менән төрмәгә һөргөнгә оҙатҡас, уның кире ҡайтырына өмөттәр өҙөлә. Тәүге ҡатыны, Мәхүпъямал инәйебеҙ (өлкән ағайым Ғәйнетдиндең әсәһе) тыуған яғына ҡайтырға мәжбүр була. Хәллерәк тә, көслөрәк тә булғанлыҡтан, Ғәйнетдин ағайымды олатаһы (атайымдың атаһы рының башы бына шулай. Шулай итеп, атайым беҙҙең әсәйебеҙ (апайымдар Зәриә, Гөлфирә һәм мин) Минеүәрәгә өйләнә. Беҙ бала саҡта ағайымдарҙың икенсе әсәйҙәрҙән булыуын күҙ алдына ла килтермәнек, шатлыҡтарыбыҙ ҙа, ҡайғыларыбыҙ ҙа, мәшәҡәттәребеҙ ҙә һәр саҡ уртаҡ булды. Әлеге көнгә тиклем бер туған булып йәшәйбеҙ һәм шулай ҡаласаҡ та, быныһына иманым камил! Хәҙер атайым да, әсәйҙәр ҙә, ағайҙарым да, еңгәләрем дә мәрхүмдәр инде, йәндәре йәннәттә булһын.

Һуғышта атайым башта Мәскәүҙә, аҙаҡ Ленинград блокадаһына эләгә. Йыш ҡына ниндәйҙер "ҡамау" тураһында һөйләй торғайны. Интернет архивтарҙан атайым хеҙмәт иткән 804-се автобатальон тураһында материалдар таптым. Меңәрләгән кешенән торған батальондан 120-һе генә иҫән сыҡҡан тип хәтерләйем. Ошо хаҡта һөйләргә тырышманы микән ул? Бәләкәй инек шул, күп нәмәне һорашып сы бер сара икәнен шулай төшөнә башланым мин. Атайҙарҙың тормош юлы беҙгә сынығыу һәм рух ныҡлығы өлгөһө булып ҡала. Ниндәй дәүерҙә, нисек йәшәһәләр ҙә, әле ауыр ваҡыттарҙа ла, еңел мәлдә лә төплө аң кимәлебеҙ, атайым шулай ине, атайым былай ине, тип иҫкәртеп тора. Тик кеше тәбиғәте шулай ҡоролған, бер кем дә, бер ҡасан да хаталаныуҙарҙан азат түгел.

**Атайҙарығыҙҙан алған тәрбиә һабаҡтары тураһында ентекләберәк туҡтап үтәйек әле...**

**Хөрмәтулла:** Бөгөнгө тәрбиә менән беҙҙең осорҙағы тәрбиәне сағыштырһаң, ер менән күк араһы. Һүҙҙе көнкүрештән башлайыҡ. Ҡунаҡ саҡырһалар, ирҙәр менән ҡатындар айырым бүлмәләрҙә ултырыр ине. Ирҙәр - түр яҡта, ҡатындар - аш-һыу эргәһендә. Ҡунаҡҡа барғанда ир менән ҡатын урамдан ҡултыҡлашып үтмәне. Мәҫәлән, "Берәү эш менән булғанда, тексәйеп ҡарап торма, күҙәтеүсе булма", тип, йыш ҡабатлай торғайны ул. Тәү ҡарамаҡҡа, ябай тәрбиә һымаҡ, әммә һөҙөмтәле булған. Йүгереп йөрөп, бергәләшеп эшләгәс, эштең ауырлығы һиҙелмәй торғайны. Атайҙың һәр эште урынына еткереп, еңел генә башҡарыуына аптырай ҙа, һоҡлана ла инем. Әле уйлап ҡуям да, шәхсән үҙ өлгөһө аша тәрбиәләгән бит, тигән фекергә киләм.

Тамаҡҡа ашауҙың да үҙенә күрә тәртибе була торғайны. Төп үтәлергә тейеш ҡағиҙә: өҫтәл артына бөтәбеҙ ҙә йыйылмайынса, ашай башламайбыҙ. Уйынға онотолоп йөрөһәң дә, аш мәлендә өйҙә булырға тейешһең. Уҡыуға килгәндә, атайҙың мәктәпкә килеп йөрөгәнен иҫләмәйем. Ул үҙе ваҡытында ғәрәп алфавиты менән уҡыған, яңыса уҡый ҙа, яҙа ла белмәй ине. Шуға микән, уҡыу мәсьәләһенә ҡыҫылманы. Мәктәптәге ата-әсәләр йыйылыштарына әсәй йөрөнө. Ҡай саҡ, иҫкәртеп тормайынса, дәрескә инеп ултыра. Ул дәрестә булғас, уҡытыусы, әлбиттә, минән һорай. Әсәйҙең, атайыңа әйтәм, тигән һүҙҙәренән ҡот оса торғайны. Ә инде атайҙың бер ҡарауы етә, тән семберләп китә.

Атайым малдар ҡарай ине. Сменаһы етһә, өс тәүлеккә йәйләүгә китә. Ҡайһы саҡ үҙе менән мине лә ала ине. Унда иртәнге дүрттә йоҡонан торорға кәрәк. Өс тәүлек буйы икмәккә яғылған май ҙа сәй менән йөрөйһөң. Әйтәм бит, эштән ҡурҡманыҡ. Тышаулы булһа ла, ат йәйләүҙән ике-өс саҡрым ситкә китә. Шуны алып ҡайтырға кәрәк. Ҡай саҡ ат башында бәүелеп килеп, ойоп йоҡлап

***✓ Атайҙарҙың тәрбиәһе менән сағыштырғанда, беҙҙең тәрбиә бөтөнләй икенсе: уларҙың тәрбиәһе ҡатыраҡ ине. Үҙем демократик ҡарашлы атаймындыр. Ниндәйҙер берәй мәсьәлә килеп тыуһа, күберәген кәңәшләшеп хәл итәбеҙ.***

# ҠАТЫРАҠ ИНЕ,

## замансараҡ...

та кителә торғайны. Ҡыйынлығы ла булғандыр, бәлки, әммә шулай эшкә өйрәнгәнбеҙ. Ҙурая килә, совхоз да эшкә ылыҡтыра ине. Бесән мәле етһә, ат тырмаһына ултырталар, аҙаҡ бесән сабыу, күбәләү, кәбән ҡойоуҙар башлана.

**Илдар:** Сәңгелдәктә сағымда ныҡ ауырығанмын. Һине район үҙәгендәге йәш табип Риза Шәйехйән улы Мағазов үлемдән алып ҡалды, тип һөйләй торғайны атайым (хәҙер ул билдәле академик, оҙон ғүмерҙәр насип итһен уға Раббыбыҙ). Йыш ауырығас, мин күберәген өйҙә һүрәт төшөрөп ултыра инем. Бер саҡ атайым бәләкәй генә аҡ төймәле ҡыҙыл гармун һатып алып ҡайтты, мин уны мәктәпкә барғансы уҡ уйнарға өйрәнеп ҡуйҙым. Икенсе синыфта уҡығанда беренсе тапҡыр гармун күтәреп сәхнәгә сыҡтым. Алтынсы класта инде атайым баян алып бирҙе. Ул ваҡытта баян атайымдың ай ярымлыҡ эш хаҡына бәрәбәр ине. Оҙон ҡышҡы көндәрҙә, әллә ниҙә бер фронтовиктар беҙгә йыйылып, үҙҙәренә байрам ойоштора торғайнылар. Шунда атайым мине тегеләр алдында гармунда уйната торғайны. Ғорурланыуы булды микән, белмәйем.

Мине ҡыҙыҡһындырған нәмәләр бер гармун ғына булманы. Миңә 1972 йылда легендар серия СССР - Канаданың уйындары шаһиты булырға яҙҙы телевизор аша. Шул ваҡыттан бирле миңә "хоккей ене" ҡағылды. Ғәйнетдин ағайым Өфөнән ботинкалы коньки алып ҡайтып биргәс, төндәрен ай яҡтыһында ла уйнарға сығып китә инем дуҫым менән. Хоккей, ҡашты ярып, яуырын һөйәгемде һындырһа ла, физик яҡтан һаулығымды ныҡ ҡына нығытты ул йылдарҙа. Инде ауыр эштәр башҡарырға ла аҙмы-күпме әҙер инем.

Тәрбиәгә килгәндә, атайҙар беҙҙе, ошолай эшлә, былай эшлә, тип, ҡулдан тотоп өйрәтмәне бит, ваҡыттары ла юҡ ине. Шоферҙар гел генә кәрәк. Һәр саҡ юлда, һәр саҡ эш менән булдылар. Кәрәк булһа, үҙең өйрәнәһең, ә бына эшкә мөнәсәбәт, нисек тотоноуың, таһыллыҡ атайҙарҙан киләләр. Ғөмүмән, кешенең бәхете йәшәйешкә ҡарата дөрөҫ мөнәсәбәттә булыуына ҡоролған. Кеше был аҡылды иң башта ата-әсәнән алалыр, тип уйлайым.

**▸ Атайҙарығыҙ алдында бурыстарығыҙҙы үтәй алдығыҙмы?**

**Илдар:** Әҙәм балаһы олоғая барған һайын ата-әсә алдындағы бурыстың ни тиклем ҙур булыуын аңлай бара кеүек һәм ул бурысты ғүмеребеҙ буйы үтәһәк тә бөтөрә алмайбыҙҙыр. Атайымдан мин был донъяға нисек ҡарарға өйрәндем. Уның ғүмер юлын, ил алдында үтәгән бурысын, фронтта күргәндәрен, бер туған ағаһы менән һуғыштан бер көндә ҡайтып төшөү ваҡиғаларын хәтер ебенә теҙеү һәм рухын онотмау - минең бурысым. Был бурысты мин малайҙарыма ла йөкмәтәм. Әлбиттә, атайҙарҙың хаталанған саҡтары ла булғандыр. Кеше теләһә лә абсолют идеаль була алмай. Әммә беҙҙең өсөн улар изгеләр. Беҙгә, малайҙарға, уларҙың өмөттәрен аҡлаусы ла, дауамы булырға ла ынтылырға кәрәктер тип уйлайым. Мин, төпсөк малай, уҡырға Өфөгә сығып киткәс, һағынғандыр ҙа, көткәндер ҙә, әммә миңә тормош юлын һайлар өсөн шулай кәрәклеген яҡшы аңлаған. Йәшлек дыуамал, бик күп нәмәләрҙе аңлап та, иғтибарға алып та бөтмәгәнбеҙ икән. Атайыма күпме йылы һүҙҙәр әйтелмәй ҡалған, уны шатландыра торған күпме шатлыҡтарымды күрмәй китте ул. Уның ышанысын тулыһынса аҡлай алдым, тип тә әйтә алмайым, әммә быға ынтылышым ҙур, ул мине алға әйҙәүсе көстәрҙең береһе.

**Хөрмәтулла:** Хәйбулла районы етәкселегенә ҙур рәхмәт, атайымдың исемен мәңгеләштереү буйынса күп эштәр башҡарылды. Былтыр үҙем дә Зәйнәб Бишева исемендәге "Китап" нәшриәтендә "Таштуғайҙың ике батыры" исемле китап сығарҙым. Уның яртыһы атайыма бағышланған. Бала сағы, миңә ҡарата, ғаиләгә ҡарата булған мөнәсәбәте, холҡо, фиғеле, булмышы, тормош юлы сағылыш тапты ул китапта. Атайымдың исемен мәңгеләштереүҙе китап аша булһа ла үтәрмен, тигән ниәтемде тормошҡа ашырҙым. Кулак балаһы, тигән мөһөр һуғылғас, атайым артыҡ асылып һөйләй һалып та барманы шул үҙе тураһында. Хәтеремдә, туғыҙынсы класта уҡығанда беҙгә Өфөнән бер журналист килде. Атайым йәйләүгә эшкә китергә тора ине. Был кеше атайымдан көрәш тураһында, тормошо тураһында һорашмаҡ була. Атайым: "Ваҡытым юҡ", - тип, эшенә китте лә барҙы. Аҙаҡ әсәйҙән атайҙың шул ҡылығы тураһында һораштым. "Төпкә төшөп һөйләй башлаһа, үҙенең кулак балаһы булыуы тураһында ла һөйләргә тура киләсәк. Күләгәһе һеҙгә төшәсәк бит", - тип аңлатты әсәй. Шуға күрәлер, бәлки, асылып та китмәгәндер инде. Атайым ниндәй баһа бирер ине, ни тип әйтер ине, тигән сағыштырыу, ниндәйҙер эске һөйләшеү, уның менән рухи бәйләнеште тоям һәр ваҡыт.

**▸ Фронтовик улдары үҙҙәре лә әрмелә булғандыр?**

**Илдар:** Әрмегә 1984 йылда (институтты тамамлағандан һуң) Сибай театрынан киттем. Йыл ярым хеҙмәтем Төньяҡ Кавказда үтте. Актер, етмәһә, тәүге һөнәрем буйынса рәссам булғас, клубтағы саралар, биҙәү эштәре, әлбиттә, минең өҫтә ине. Бөтөн аппаратура ла минең ҡулда булды. Төнөн "Голос Америки" радиостанцияһын тыңлап, хеҙмәттәштәргә һөйләй инем. Был турала кемдер берәү кәрәкле урынға хәбәр иткән, күрәһең, бер ваҡыт хәүефһеҙлек органдары менән дә арыу ғына аңлашырға тура килде хатта. Әрме хеҙмәтем шулай үтеп китте, еңелдән булмаһа ла, артыҡ ауырлығын тойманым. Хәҙер һағындыра.

**Хөрмәтулла:** 1978-80 йылдарҙа Һарытау өлкәһендә химия ғәскәрҙәре сафында хеҙмәт иттем. Еңелдән булманы: ҡыш көндәрендә ОЗК-ла йөрөүе ауыр булһа, йәй көндәре ныҡ тирләтә, бешерә торғайны. Хеҙмәт хеҙмәт менән, әммә әрмелә саҡта ла сәхнәгә сыҡтыҡ, йырланыҡ-бейенек. Сәнғәткә булған һөйөү һәр саҡ оҙата йөрөнө. Атайым бик матур бейей ине. Бәйләнеш уның аша ла килгәндер, тим. Ул боронғо йырҙарҙы ла яҡшы белде, үҙе мәрәкәсел, ҡунаҡсыл булды.

**▸ Ә хәҙер үҙегеҙҙең атай тәрбиәһе, улдарығыҙҙы нисек тәрбиәләүегеҙ тураһында һөйләшеп алайыҡ...**

**Хөрмәтулла:** Беҙҙең ғаиләлә өс малай: Айтуған, Азамат, Арыҫлан. 1984, 1988, 2001 йылғылар. Атайҙарҙың тәрбиәһе менән сағыштырғанда, беҙҙең тәрбиә бөтөнләй икенсе: уларҙың тәрбиәһе ҡатыраҡ ине. Үҙем шәхсән демократик ҡарашлы атаймындыр, тимен. Ниндәйҙер берәй мәсьәлә килеп тыуһа, күберәген кәңәшләшеп хәл итәбеҙ. Тиңлек бар: мин атай, һин бала, тип, өҫтән ҡарау юҡ. Ундай хәлдәр булһа ла бик һирәк. Теге йәки был осраҡта балаларға һайлау мөмкинлеге бирәбеҙ. Бәлки, был дөрөҫ тә түгелдер, әммә гел генә бала алдына талап ҡуйыу ҙа ярамайҙыр. Бәләкәй саҡтарында "аҡыл сыбығы" менән янауҙар булғандыр ҙа, бәлки, әсәләре лә атай абруйын аңлатҡандыр, шулай ҙа ҡаты һөйләшкәнемде иҫләмәйем.

Өйҙә гел башҡортса һөйләшәбеҙ, Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт ҡала гимназияһында башҡортса уҡынылар. Ете йыл Дим биҫтәһендә йәшәнек, ләкин балалар мәктәпте ташламаны, үҙаллы йөрөп уҡынылар. Бер мәктәпте тамамлауҙары үҙенә күрә йолаға әйләнде. Йыйылыштарға даими йөрөргә тырыштым. Берәй етешһеҙлектәре булһа, ҡатыраҡ әйтергә лә тура килә ине.

Тағы ла шул: өс улым да бәләкәйҙән театрҙа эшләне. Беҙҙең менән бергә гастролдәргә сыға инеләр. Оло улым унға яҡын ролдә уйнаны. Атайҙары икмәкте нисек табыуын бәләкәйҙән күреп үҫтеләр. Гастролдәр айҙарға һуҙылған ваҡыттар була, бергәләп сит илдәргә, Мәскәү, Санкт-Петербургҡа, Ҡаҙанға ҡуша йөрөнөләр, ҡәҙимге эш хаҡы алдылар. Эшкә һуңларға ярамағанын, режиссерҙы, етәкселәрҙе тыңларға кәрәк икәнен күреп-белеп йөрөнөләр. Аталары эш урынындағы ҡағиҙәләргә, ҡанундарға буйһона икән, шуны күргән балалар ҙа шулай тәрбиәләнә. Эшкә ҡарата булған мөнәсәбәтеңде, нисек әҙерләнеүеңде, текст ятлауыңды, йырбейеү өйрәнеүеңде, һәммәһен дә күреп, театр былай икән, гастроль улай икән, атай эше шулай икән, роль әҙерләгәндә атайға ҡамасауларға ярамай икәнен бәләкәйҙән аңланылар. Шуға күрә улар минең эшемде энәһенән ебенә тиклем беләләр. Әммә өс малайҙың береһе лә сәнғәт юлынан китмәне.

**Илдар:** Беҙҙең ғаиләлә лә өс малай: 1989, 1996, 2002 йылғылар. Башҡорт ғаиләһе булараҡ, туған телгә һәр саҡ тоғролоҡ һаҡланыҡ. Ҡыҙыҡ, бәләкәй саҡтарында ҡустылары русса һүҙ ҡушһа, олоһо, аңламайым, тип, боролоп китә лә бара торғайны. Ғөмүмән, ҡатыным Лира менән малайҙарҙың иғтибарын халҡыбыҙҙың тарихына ла, йәшәйешенә лә йәлеп иттек. Нимә ул Башҡортостан, уның элекке географияһы кеүек мәғлүмәттәрҙән башланыҡ. Күренекле тарихсылар Салауат Хәмиҙуллиндың сығыштарын яратып ҡарайбыҙ, профессор, мәрхүм Әнүәр Закир улы Әсфәндиәров ағай менән бик яҡшы мөнәсәбәттә инек. Уның йоғонтоһо ла ҙур булды. Оло улыбыҙ Илйәр башта музыка мәктәбендә уҡып, аҙаҡ дүртенсе кластан хореография училищеһын тамамланы. Уртансыһы Илгизәр башта эргәбеҙҙәге 90-сы мәктәптә уҡыны, аҙаҡ 158-се мәктәп төҙөлөп бөткәс, шунда күсте һәм унда бер йыл уҡығас, үҙе теләп хореография училищеһына инде. Әйткәндәй, ул театрҙа минең менән бер рәттән өҙлөкһөҙ туғыҙ йыл эшләне. Алты йәшенән һүҙле ролдәр уйнай башланы.

Үҙем ятратҡанғамы, малайҙарға бәләкәйҙән классик музыканы тыңлата торғайным. Йәштәр музыкаһынан да тыйманым, киреһенсә, үҙем дә ҡыҙыҡһынып тыңлай инем. Барыһының да һүрәт төшөрөргә барымы күренә. Мәктәптә саҡтарында уҡыуҙарына артыҡ ҡыҫылып барманым. Ә бына кесе улыбыҙ Илмораттың бала сағында дуҫы булдым, уйынсыҡтары менән дә уйнаныҡ, боҙҙа шайбаны ла бергә һуҡтыҡ. Өсөһөнә лә театр сәхнәһенә балалар ролдәрен уйнарға насип булды. Әммә балалар үҫә, тормош алға бара, ҡыҙыҡһыныуҙары ла, донъяға ҡараштары ла үҙгәрә. Киләсәктә, үҙҙәренең заманында уларға аңлайышлы үҙҙәре ҡорған донъяла йәшәйәсәктәр. Беҙ, атайҙар, малайҙарыбыҙҙы беҙҙең атайҙар кеүек үк киләсәккә оҙатабыҙ. Улар, һәр беребеҙҙең күңелендә ятҡан изге төшөнсәләребеҙҙе, рухи байлыҡтарыбыҙҙы, телебеҙҙе һаҡлап, беҙ баҫҡан тырмаларға баҫмай, оҙон, бәхетле юл үтһендәр ине тип теләйбеҙ!



**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йөрәгендә халҡы булмағандың... Халыҡ - ҙур, оло, тарихи төшөнсә. Ул бит бер көн эсендә барлыҡҡа килмәгән, меңәр йылдар дауамында бер телдә һөйләшкән кешеләрҙән, ғаиләләрҙән, араларҙан тупланған, туғандарыбыҙға, күрше-тирәбеҙгә ҡарата йылы мөнәсәбәттәрҙән, йөрәк йылыһынан хасил булған. Халыҡ, тибеҙ икән, иң тәүҙә милли ғаиләне күҙ алдына килтерергә кәрәк. Ни тиһәң дә, халыҡтың асылы, нигеҙе ғаиләлә. Ә ғаилә башлығы кем? Атай! Ата-бабаларыбыҙ төйәге атайсал бит атай һүҙенән...**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН**
**әңгәмә ҡорҙо.**

***✓ Был серле донъяла бөтәһе лә бар: әҙер ризыҡ, саф һауа, иркенлек. Ләкин бик теләһә лә, ул ҡала алмай, юғиһә, бөтөн бурысын ҡатыны түләргә тейеш буласаҡ. Рәүиз быға юл ҡуймаясаҡ! Ҡайтырға!***



Юҡ, сат йәбеште бит был әҙәм. Эйәртмәйенсә сара ҡалманы. Һуҡмаҡ буйлап ары киттеләр. Бер аҙҙан Ерәнгә йән инде:

- Алтын, тотош алтын! - тип ҡысҡырып ебәрҙе. - Алтын япраҡлы ағастар! Ҡайҙа баҡма, хазина!

- Алтын төҫөндә, тигән. Алтын япраҡ була, тиме ни, - тип шелтәләне Рәүиз.

- Мин алтынды таныйым!

Ерән тамам терелде. Ул әле бер, әле икенсе ағасты барып ҡосаҡланы, тубыҡланды, үкерҙе, олоно, бейене...

- Шул тиклем байлығың була тороп, нисек коллекторҙарҙан туҡмаҡ алып йәшәйһең! Быны нимә йәшерелгән ишегең артында! - Ул яман итеп көлөргә тотондо. - Быны тейәп сыҡһаҡ, тотош донъяға хужа булабыҙ!

- Нисек "тейәп"? Урлапмы? Кем һиңә рөхсәт итә?

- Төкөрҙөм мин рөхсәткә! - Ерән әтәсләнеп уға килә башланы. - Күрһәт сығыу юлын! Юҡһа, көрәгеңде алаһың, корректор!

Был һүҙҙән асыуы сыҡҡан Рәүиз тегегә нисек тондорғанын һиҙмәй ҙә ҡалды, һәм Ерән әллә ҡайҙа түкмәс атып барып төштө. "Мин әллә төш күрәмме?- тип уйланы шул саҡ Рәүиз . - Ҡайҙан миндә бындай көс?" Үҙенә-үҙе аптырап баш сайҡаны ла, ары атланы. Ерән уны шундуҡ ҡыуып етте, йәнә сат йәбеште:

- Бөттө, бөттө, аңланым! Ҡалдырма, мине ҡараңғылыҡ йота!

Был донъяның ҡанундары бөтөнләй икенсе икәнен Рәүиз үҙе лә һиҙә башлағайны. Ҡәйнәһе килеп эләкһә, ошо алтынлыҡҡа, иң бәхетле әҙәмгә әйләнер ине. Шул саҡта, бәлки, Дианаһы менән кейәүен тыныслыҡта ҡалдырыр ине. "Ҡатынды күрергә зар-интизармын, тик муйындан бурысҡа батҡас, бер ҙә ризалата алмайым шул..." Был серле донъяла бөтәһе лә бар: әҙер ризыҡ, саф һауа, иркенлек. Ләкин бик теләһә лә, ул ҡала алмай, юғиһә, бөтөн бурысын ҡатыны түләргә тейеш буласаҡ. Рәүиз быға юл ҡуймаясаҡ! Ҡайтырға! Шул саҡ ҡаршыла алтын баҫҡыс хасил булды. Рәүиз уның ҡайтыу юлы икәнен аңланы.

- Эй, һин ҡайҙа? - тип өндәште Ерән.

Рәүиз яуап бирмәне. Баҫҡыс буйлап үрләне. Шул саҡ Ерән аҫтан яман тауыш менән аҡырырға тотондо:

- Ай-ай, тотош ҡараңғылыҡ ялманы! Туҡта! Ҡалдырма мине! Корректор! Яҙмышым һинең ҡулда! Әүлиәм!

Ник шайтаныма олаҡмайһың? Үҙеңдең күңелеңде яҡтырта белмәгәнгә кем ғәйепле, күпме кеше яҡтылығында йәшәргә була һиңә? Эйе, яҙмышың хәҙер минең ҡулда. Ә ҡасан ғына минең яҙмыш һеҙҙең ҡулда ине!

Ерән уның артынан ташланды. Тик баҫҡысҡа тотоноу менән тегеһе өҙөлдө лә ҡуйҙы.

- Хөрмәтле корректор, туҡта, зинһар! Һин миллион тапҡыр хөрмәтле батыр йән!

"Хамелеон, ниндәй генә төҫкә инмәй был ике йөҙләләр! Хәҙер алып сыҡһам, ергә аяҡ баҫыу менән мине түпәләргә керешәсәк бит!" - тип нәфрәт менән уйланы Рәүиз. Ул туҡталманы, баҫҡыс буйлап үрләүен белде.

Рәүиз ишек артынан башын һоноп, тирә-яҡты байҡаны һәм аптырап китте. Бәй, был ниндәй ят баҡса? Был мәл Бузмый ишекте машинаһына һөйәп, коллектив баҡсала бер кеше менән ҡыҙыу сауҙалаша ине. Бузмыйҙың тауышын ул әллә ҡайҙан таный, һағая төштө. Ирекһеҙҙән, гәпләшеүселәргә ҡолаҡ һалды. Әле Бузмый ишеккә арты менән тора, уны күрмәй.

- Һинең бындағы өйөңә таптаман. Күп һорамайым. Биш йөҙ.

"Ҡәһәр төшкөрө нәмә, минең ишеккә "айыу майы" һөрткән бит!"

- Биш йөҙ бара... - Һатып алыусы ишеккә ҡараны, Рәүиздең башын күреп ҡалды ла, ҡашы маңлайына менде.




- Нимә, бире эйәртеп алып килдеңме әллә? Ниндәй баш һерәйгән?

- Һин нимә? - тине Бузмый. Уның тауышын ишетеү менән Рәүиз йәһәт кенә боҫа һалды. Бузмый ишек яғына ҡайырылды.

- Күҙеңә нимә күренә башланы? Ярай, ал өс йөҙгә.

Һатып алыусы ҡәнәғәт төҫ менән ишеккә ҡараны. Рәүиздең асыу тулы күҙҙәрен күргәс, төҫө үҙгәреп китте.

- А-а-а-а, ишегең дә, шайтаның да кәрәкмәй! Үҙем өҫтәп бирәм аҡса, бар кит! - Ул ҡул һелтәп ситкә атланы. Бузмый һүгенде:

- Тфү, наркоман, һиңә ваҡыт әрәм иткән мин алйот! Хәҙер күлгә алып барып быраҡтырам был нәмәне. Хәжәте бер тин!

Рәүиз ялп итеп аҫҡа сумғанын һиҙмәй ҙә ҡалды. Ул кире сыға алмай. Сөнки кире сығыу менән бөтәһе лә элеккесә ҡабатланасаҡ. Туҡмаҡ, янау... Бөтәһе лә үҙгәрешһеҙ ҡаласаҡ. Бузмый ишекте машинаһының кузовына һалды. Әле әйткәненсә, ишекте күлгә алып барып ташлаһа? Ул саҡта ергә сығыу юлы бикләнәсәк. Ерән! Быңа кем ярҙам итә ала! Рәүиз ул әҙәмде ауыр хәлдә ташлап китте. Үҙе тас ошо ике зобани һымаҡ ҡыланды. Шуның һөҙөмтәһендә үҙенең дә кире сыға алмауы бар... Бер нәмә асыҡланды, Ерәнде тегендә ҡалдырырға ярамай.

- Кире килдеңме, йомшаҡ күңелле корректор! - тип уны ҡосаҡлап алды Ерән. - Зинһар, мине ҡалдыра күрмә!

Икәүләп баҫҡысҡа тотондолар. Ләкин ни ғәжәп, баҫҡыс өҙөләп ыуалып төштө лә ҡуйҙы. Инде Ерән сәсен йолҡҡосларға кереште.

- Минең арҡала! Минең арҡала һин дә сыға алмайһың! Мин гонаһлы, мин ҡәбәхәт! Ер йотҡоро!

- Беҙ бөтәбеҙ ҙә гонаһлы,- тип мығырланы Рәүиз.

- Ох, мине бөтөнләй белмәйһең бит һин! Мин, хаин, ауырыу ҡатынымды, баламды ташлап киттем. Уларға бер тин аҡса ебәргәнем булманы. Алимент түләмәнем.

- Нисек түләмәнең? - тип шаҡ ҡатты Рәүиз.

- Түләмәйем, тиһәң, төрлө сараһы бар инде уның, юлы күп. Ғәзиз ереме кире сыға алһам, ант итеп әйтәм, бөтөнөһөн түләйем. Түләп бөтәм! - тине Ерән ғәйепле тауыш менән. - Мин ҡатынды ҡурҡыттым. Аҡса һораһа, баланан яҙаһың, ә һинең һөйәгеңде лә тапмаясаҡтар, тинем. Нимә өсөн шул тейешле аҡсаһын ҡыҙғандым? Йә, нимәгә ирештем? Кемгә ҡала малым! Был ҡараңғылыҡтан ҡотола алһам, йыйған аҡсамдың бер өлөшөн хәйриәгә бирәм. Үҙгәрәм. Мине ҡалдырма. Күп нәмәне аңланым. Һүҙһеҙ ҙә аңланым... Был алтын япраҡтар баламдың бер тамсы күҙ йәшенә тормай. "Атай" тип бер әйтеүе мең алтындан ҡыйбат.

Шул саҡ бер алтын япраҡ Рәүиздең усына килеп төштө. Унда яҙыу бар ине. "Беҙ "алтын япраҡ" тип түгел, "васыят япраҡтары", тип аталабыҙ". Япраҡ үҙе кире урынына эленде. Хәҙер Рәүиз телгә килде.

- Минең ишек әле Бузмый ҡулында. Ишекте юҡ итергә ирек ҡуйма, нисек тә унан кире алырға кәрәк.

- Ишек тик һинеке. Уға берәү ҙә ҡул һуҙмаясаҡ! - тип ҡысҡырҙы Ерән. Шул саҡ баҫҡыс хасил булды. Һәм шул мәлдә икенсе япраҡ Рәүиздең усына төшөп ятты: "Һин ашыҡма, юлдашың вәғәҙәһен үтәһен". Был япраҡ кире урынына эленеүгә, өсөнсөһө осоп, Ерәндең иңенә ятты. "Үҙе ҡунды, тимәк, минеке!", тине коллектор. Рәүиз ҡаршы булырға иткәйне, теле көрмәләнде лә ҡуйҙы. Ерән япраҡты ҡуйынына тығыуға, баҫҡыс хасил булды, һәм теге өҫкә үрләп күҙҙән юғалды.

Машинаһын ишек алдына индереп, кабинанан сыҡҡан ыңғайға Бузмыйҙың күҙенә нимәләр салынғандай булды. Йөртөмән кузовта ҡунаҡлаған Ерәнде күреп, шаҡ ҡатты.

- Шайтан алғыры, һин нисек бында?..

- Аңлатырмын, тик иң башта ишекте урынына апарып ҡуй.

- Конфискация! Бөттө-китте!

- Ишекте...

- Тағын эстеңме?

- Кире алып барырға кәрәк. Мин һүҙ бирҙем.

- Ҡайҙа, кемгә һүҙ бирҙең?

- Тылсымлы донъяла. Уға.

Бузмый хахылдап көлөргә тотондо:

- Айнығырға ваҡыт, алкаш! Бергә эстегеҙме!

- Алып бар.

Бузмый йәһәт кенә ҡулына балта эләктерҙе.

- Хәҙер онтайым был аламаны!

- Туҡта! - Ерән япраҡты кесәһенән сығарҙы. - Ә быны ҡайҙан алған тип уйлайһың?

Бузмый уның ҡулынан алтын япраҡты тартып алды, тегеләй ҙә, былай ҙа әйләндерҙе. Йөҙө үҙгәрҙе. Ҡыйбатлы металдың нимә икәнен, кем-кем, ә ул яҡшы белә.

- Ҡайҙан сәлдерҙең? Корректорҙыҡымы?

Ерән уға ҡараған килеш бер нәмә лә өндәшмәне.

- Бахыр Милана Дауисовна! - тине Бузмый ауыҙын ҡыйшайтып.

- Аңламаным, - тине Ерән.

- Кейәүен өшкөртөргә ул ҡотортто мине. Мәүеш, серек ҡул, тине. Шул мәүештән ҡотолмаҡсы ине. Кейәүенең бай икәнен белһә, әле бысраҡ табанын ялап ултырған булыр ине лә бит! - Бузмый яман итеп хахылданы. - Кейәүенең алтын эсендә мыҙырап ятҡанын белмәй, миңә күпме димләне ҡыҙыҡайын. Әйт, ҡайҙа ул? Ҡайҙа корректор? - тип Ерәнгә барып йәбеште.

- Ҡағылма миңә!

- Ҡағылыуҙы белмәйһең әле, себен теймәҫ сер итер!

- Әйтһәм әйтәйем инде, быны һин күҙгә төшкән себен булдың күптәр өсөн...

- Эйе, мин себендең дә себене! Һин урлаған хазина хәҙер минеке, төшөндөңмө? - Бузмый япраҡты ҡуйынына тыҡты, ҡорһағы менән һеҙөп әшнәһенең алдына килеп баҫты, ишеккә ымланы. - Ә был алама һинеке. Бергә - бер.

Ерән ишек тейәлгән машинаға инеп ултырҙы. Юл буйлап елдергәндә үҙенең иркенлеккә сыҡҡанын, азат икәнен аңлап ирәйҙе. Бузмыйҙан ул хәҙер ҡурҡмай. Буйһонмай. Корректорға килгәндә... Ерән уйланды, ул егеткә теге баҡсанда бөтөн шарттар бар ҙа баһа. Мәкерле ҡәйнәһе, бер ҡатлы диуана Дианаһы нимәгә кәрәк? Ҡалһын Рәүиз шул тылсымлы донъяла. Ишектә түгел мәсьәлә. Ишеккә Ерән урын табыр, эйе, бәлки, киләсәктә тап уға файҙаһы тейер.

Шул урында ирҙең фекер ебе ҡапыл өҙөлдө. Ҡаршыға килгән бер фура пикапҡа еңелсә генә ҡағылып үтеп китте. Һәм машина күҙ эйәрмәҫ тиҙлектә юл аҫтына тәгәрләне. Ерәндең башынан бер генә үкенесле уй һыҙып үтте: "Харап булдым, мин бит тәүбәлә инем!.."

Номеры буйынса тикшереп, пикап хужаһына шылтыраттылар. Бузмый БМВ-һына ултырҙы ла һәләкәт булған ергә елдерҙе. Хәтәр! Юл аҫтында йәмшәйгән, үтекләнгән пикабы ята. Күпме файҙа, табыш килтерҙе ул хужаһына, хәҙер эшкиндерерлек түгел. "Себен теймәҫ сер итер" машина йөрөтә лә белмәй... Юҡ, уға Ерән йәл түгел. Ныҡ ҡазаланған, тинеләр, үлеп-нитеп китһә, алтын япрағын таптырып, темеҫкенләнеп йөрөмәҫ. Бер аҙҙан Бузмыйҙың күҙе ҡаршылағы ағасҡа төштө. Дөрөҫөрәге, олонға барып терәлгән ишеккә. Атаҡ-атаҡ, нисек уға бер нәмә лә булмаған! Әллә ысынлап та берәй тылсымы бармы? Ошо алама өсөн һуғышырға әҙер Ерән йәнә күҙ алдына килеп баҫты. "Ашҡа төшкән себен", имеш. Хужаһы менән нишләп телләшеп маташты, йүнһеҙ? "Эйе, мин себен! Себендең дә себене, шуға ла берәүҙән дә туҡмалған да, еңелгән дә юҡ", - тип һөйләнә-һөйләнә Бузмый ишеккә табан атланы. Берәй йәнселгән урынын эҙләне, тапмағас, аптырап баш сайҡаны. "Эйе, һатырлыҡ булһа, һатып ебәрәм. Тәк, кем мин? Һа, мин себен, мин себен, һәр йөйҙө, шырауҙы тикшереп, асыҡлайым",- тип ҡабатлай-ҡабатлай ишек артына инеп китте. Тикшерҙе, тик кире сыҡманы.

* * *

Аяҡ-ҡулдары бинт менән асырмалған Ерән күҙен асып, саҡ-саҡ телгә килеү менән, ҡатынын саҡырырға ҡушты. Бына эргәһендә күп йылдар элек айырып ебәргән бисәкәйе бошонҡо йөҙ менән ҡарап ултыра. "Нисә тапҡыр янаның, нисә тапҡыр ҡурҡыттың, тик үҙең ялынғас, килдем инде", тигән һүҙҙәр яҙылғайны уның күҙҙәрендә. Ерәндең керпеге селт-селт килде.

- Васыят... Васыятымды әйтәм, Хәлисә. Баҡсамдағы өйҙә сейф бар. Бөтөн аҡса һеҙҙеке. Балабыҙҙыҡы. Бер өлөшөн хәйриә ойошмаһына бир. Мин үлгәс, сауап булыр.

- Тыныслан. Һине үлмәй, тинеләр. Ныҡ тирләп киттең, - тип ҡатыны ҡулъяулыҡ алып тегенең битен һөртөргә кереште.

- Мин илайым. Хәҙер генә япраҡтың нимә икәнен аңланым. Тимәк, теге япраҡта минең васыятнамә түгел.

- Аңламайым, ниндәй япраҡ? Ниндәй васыятнамә?

- Хәлисә, мин тәүбәлә... Шуны белһәң, еткән.

Ул арала Бузмыйҙың сейфына бикләп ҡуйылған алтын япраҡ үҙ рәүешен үҙгәртте. Ул яҙмаһы, мисәте булған ҡағыҙға әйләнде. Бузмыйҙың адвокатына заказлы хат булып килеп төштө. Унда: "Минең менән бер-бер хәл булһа, үлһәм йәки ғәйеп булһам, бөтөн мөлкәтем хәйриә ойошмаһына бүләк итеп бирелә," - тип яҙылған ине.

**(Дауамы. Башы 48-се һанда).**

*✓ Иң файҙалы ысул - көләү, ти белгестәр. Ул стресс булдырмай, йөрәк һәм ҡан тамырҙары эшен, матдәләр алышыныуҙы яҡшырта, ғүмерҙе оҙайта. Дарыуҙар һатып алып дауаланырға аҡсағыҙ булмаһа, ҡысҡырып көлөгөҙ.*



*БАШҠОРТ ЮМОРЫ*

# ТАЖЗӘХМӘТ ҒӘЛӘМӘТТӘРЕ



**Тажзәхмәт исеме алған был ауырыу тамам йонсотто, буғай. Ә шулай ҙа ошо ауыр хәлдә лә күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәгән кешеләр бар арабыҙҙа. Хатта ошо сетерекле хәлдән ниндәйҙер күңелле юмор килтереп сығарыусылар бар. Һүҙ - уларға.**

## Тик торғанда бурыслы булдым

Бер көн шулай урамға сығып бара инем, ҡапылдан ғына ҡәйнеш осраны. Һаулыҡты эйәк ҡағып ҡына һорашырға ла тиҙерәк тайырға ине иҫәп. Әммә ҡәйнеш етди аҙымдар менән миңә табан йүнәлде. Хәл юҡ, туҡтарға тура килде. Һаулыҡ алған арала, хәҙер был берәй нәмә һорай инде, тигән насар уй баштан үтеп китте. Ҡуй инде, белгән юҡ, һорашҡан юҡ, тигәндәй. Тик торғанда гонаһлы булып торола инде. Баҡтиһәң, ҡәйнеш минең янға бөтөнләй башҡа йомош менән килгән икән.

- Еҙнәй, ауыр һәм ҡатмарлы осорҙа йәшәйбеҙ. Бөгөн барһың, иртәгә юҡһың, тигәндәй. Етмәһә, бынау ковид тигән ауырыуы әллә ҡайҙан килеп сыҡты. Аллам һаҡлаһын инде, ниндәй затлы кешеләрҙе алып китте (ауыр көрһөнөп ҡуя). Һиңә әйтәм, еҙнәй, һаҡланып ҡына йөрө инде. Хәҙер бар өмөт һиндә генә (ҡәйнеште әйтәм, ҡалай матур һөйләй, ә бына ҡайһы яҡтан һәм нимәгә һуҡтыра, шуны аңлап булмай). Теге прививка тигән нәмәкәйен эшләткәнһеңдер ул? Кешә һүҙенә ҡарама. Бер нәмәгә ҡарамай, эшләтеп ҡуй. Кеше әллә нимә һөйләр ул. Һаҡланғанды һаҡлармын тигән әйтемде беләһең бит (бер аҙға тынып ҡала, шунан тамағын ҡырып ҡуя, тимәк, әйтер һүҙен хәҙер әйтәсәк). Ҡыҫҡаһы, еҙнәй, беләһең, миңә кеше араһында күп йөрөргә тура килә. Ә донъя хәлен белеп булмай. Минең менән дә төрлө хәлдәр булыуы бик мөмкин. Ә минең апайға бурысым бар. Шул күңелдә өйкәп тик йөрөй. Еҙнәй, бына шул бурысты түләүҙе һинә ауҙарырға тип уйлап торам әле. Оҙаҡҡа һуҙмай, ошо арала ғына түләп ҡуй. Һиңә сауап булыр, ә миңә күңел тыныслығы килер.

Ҡәйнеш шәп-шәп атлап китеп барҙы. Тормош барыбер ҡыҙыҡ шул, тик торғанда ла ошолай бурыслы булып була икән, тип уйлап ҡалдым уның артынан.

## Ҡул биреп күрешә алмайым

Ковид беҙгә бар яҡтан яңылыҡ индерҙе. Шуларҙың береһе бигерәк тә ҡыҙыҡ: хәҙер беҙ ҡул биреп түгел, ә йөҙрөктәр менән һаулыҡ һорашабыҙ. Сәләм, тип әйтәбеҙ ҙә уларҙы төкөштөрәбеҙ. Элек булһа, көлөп бер булыр инек. Ә хәҙер бер ҙә көлгө килмәй. Заманаһы шулай, ауырыуҙан шулай һаҡланабыҙ. Ә шулай ҙа ҡайһы берәүҙәр йөҙрөк төкөштөрәүҙе үҙһенмәй. Нишләптер ҡабул итмәй улар. Быуына ошондай "аңһыҙ" кешеләр әллә ҡайҙан йылмайып, әллә ҡайҙан ҡулдарын һуҙып киләләр инде. Сәләмен алмаһаң, унайһыҙ. Ҡулын ҡыҫһаң, әлеге лә баяғы ковид шикләндерә. Ә шулай ҙа былдай сетерекле хәлдән бик оҫта сығыусылар бар. Шундайҙарҙың береһен тыңлайыҡ әле.

- Ой-ой-ой, ҡулыңды ғына бирә күрмә инде!

- Нишләп?

- Ауырып киттем бит мин (һуҙылған ҡул йәшен тиҙлегендәй кире тартып алына, баҡтиһәң, тегенеһе лә ковидтан уттан ҡурҡҡан һымаҡ ҡурҡа икән).

Һәм, әлбиттә, киләһе һорау ошолай яңғырай.

- Корона менәнме?

- Аллам һаҡлаһын, ю-ю-юҡ!

- Ә нимә менән? (Ул аптырауға төшә, сөнки беҙ хәҙер йә ковид менән ауырыйбыҙ, йә бөтөнләй ауырымайбыҙ).

- Үҙем дә белмәйем, әллә нимә булды. Быуына хәҙер кеше ҡулы түгел, ҡатындың ҡулы тейһә лә көлгө килә лә китә. Шуныһы ҡыйын, тыйылып булмай. Кәмендә ярты сәғәт самаһы туҡтауһыҙ көләм. Шуға хәҙер һаҡланып ҡына йөрөйөм (ул бер аҙға тынып ҡала, сөнки әйтелгән һүҙҙәрҙе эшкәртер өсөн бер аҙ ваҡыт кәрәк, ә киләһе дәлил бигерәк көслө). Әйткәндәй, теге юлы ошо хәлдә белә тороп, ҡатын мине саҡ үлтермәне бит.

- Нисек?

- Эштән ҡайтып ингәйнем, әллә яңылыш, әллә юрамал, ҡапыл ғына мине ҡосаҡлап алды. Ундағы минең көлөүҙе күрһәң... Хатта ауыҙ тирәләре ап-аҡ булып күбекләнеп-күпереп китте. Саҡ ҡотҡарып алып ҡалдылар... Кемдәр булһын, шул врачтар инде... Береһе сикәгә һуғып ҡараған була. Ул һуҡҡан һайын мин ороро шашып көләм. Бәйләп алып киттеләр... Саҡ шәбәйеп ҡайтылды...

Сетерекле хәлдән ҡалай оҫта ҡотолдо, тип уйлап ҡуйҙым мин шул саҡ.

## Беҙ өйгә тура ҡайта алмайбыҙ!

Бер бүлмәлә йәшәгән иптәш йома көнө әйтә ҡуйҙы: "Әйҙә, ошо ялда беҙгә барайыҡ". Эстән генә шатланып ҡуйҙым. Бик һәйбәт булды әле. Тыуған яҡҡа ҡайтайым тиһәң, алыҫ, бүлмәлә ҡалайым тиһәң, күңелһеҙ. Ярай, мәйтәм, барайым, күрәйем, башҡаларҙың нисек йәшәгәненә күҙ һалайым. Шуныһы һәйбәт, автобус иптәштең ауылына хәтлем бара икән. Быуына әле беҙ унан төшөп ҡалдыҡ. Ауылға күҙ һалам. Апаруҡ ҙур ғына. Боронғоса шифер менән ябылған өйҙәр ҙә бар. Заманса профнастил менән ябылғандары ла осрай. Мин алан-йолан ҡаранып барған арала иптәшем һүҙ башлай.

- Әйтергә онотоп барам, беҙ өйгә тура ҡайта алмайбыҙ.

Ҡапылда ғына албырғап ҡалындым. Нисек инде, ҡайта алмайбыҙ? Ә нишләп ҡайта алмайбыҙ? Ә хәҙер ҡайҙа барабыҙ? Шул арала курсташым (иптәш тип әйтергә хатта тел әйләнмәй) бер ни булмағандай һүҙен дауам итә.

- Ауылда ковид бигерәк көслө. Беҙҙең урамда ауырымаған кеше ҡалмағандыр. Ысын булһа, хатта ауыл малы ауырый башлаған тей. Теге юлы атайым бер кәзәнең йүткереп торғанын күргән. Аҙаҡ шул кәзә үлгән. Кеше, бүре талаған, тей. Юҡ, ковидтан үлгән. Атайым бит йүткереп торғанын үҙ күҙҙәре менән күргән.

Быуына эш нимәлә икән! Ҡыҫҡаһы, кәйеф төштө, аҙымдар һүлпәнәйҙе. Ә курсташ (хәҙер уны курсташым тип әйтке лә килмәй) һаман һүҙен дауам итә.

- Хәҙер беҙ бер инәйгә барабыҙ. Кискә хәтлем шунда булабыҙ. Үҙенә күрә бер карантин була инде

Ниндәй инәй, ниндәй карантин... Тиҙерәк тайыр кәрәк был ауылдан.

- Карантин тигәнгә аптырама. Эш шунда, быуына ошо инәй ауырымай. Ковид миңә нипачум, тип әйтә тей үҙе. Ысынмылыр-бушмылыр, уныһын белмәйем. Ә шулай ҙа уның ауырығанын минең берҙе лә күргәнем юҡ. Бөгөн ауылға килгән һәр кеше иң тәүҙә ошо өйгә юл тота. Быуына хәҙер беҙ ҙә шул инәйгә барабыҙ. Кискә хәтлем шунда булырбыҙ. Ә кискеһен беҙгә барырбыҙ, дөрөҫөрәге, ҡайтырбыҙ.

Шул арала теге "нипачум" инәйҙең өйөнә килеп еттек. Ҡурҡыңҡырап инелгәйне, әйҙүк, балалар, әйҙүк, тип бик ихлас ҡаршы алды хужабикә. Ысынлап та оло ғына инәй икән. Беҙҙең өсөн өлтөрәп тора. Сәй эсерҙе, ашатты, хатта ял итергә айырым бүлмә бирҙе. Уҡый-уҡый күҙ нурығыҙ бөтөп киткәндәр инде, балаҡайҙар, тип беҙҙе бер килке йоҡлап ултырҙы. Баяғы гонаһлы уйҙар өсөн миңә хатта оят булып китте. Иптәшем әйтә, беҙҙең ауылда бөтә кеше шулай бер-береһенә ярҙамсыл, тей. Шул арала кис булды. Мәйтәм, ҡасан һеҙгә барабыҙ. Ә иптәшемдең үҙ өйөнә ҡайтҡыһы килмәй. Инәй ҡыуғансы йөрөйөк әле, тей. Үәт әй, үҙ өйөнә ҡайтҡыһы килмәгән кешене һеҙҙең күргәнегеҙ бармы?

Шул арала иптәшем әйтә. Бөгөн тағы юлаусылар бар икән, хәҙер улар ҙа ошо инәйгә килә инде, тей. Аптырамалы, былардың да инәй бик ипле ҡаршы алды. Былары дүртәү бит әле. Әммә инәй былар өсөн дә өтәләнеп тора инде. Теге юлаусыларҙы әйтәм, бик итәғәтле кешеләр икән. Бик матур һөйләшәләр, яңылыҡтары менән бүлешәләр. Әйтерһең дә, бер туғандар... Ошо мәлдә минең зиһен эшләп китә - иптәшем мине үҙ өйҙәренә алып ҡайтҡан да инде! Оло инәй тигәне һеңлеһе, ә әле ҡайтҡандары атаһы-әсәһе, ҡустыһы һәм һеңлеһе лә инде!

Кешене аптыратыр өсөн дә баш кәрәктер ул, тип уйлап ҡуйҙым шул саҡ.

**Әгләм ШӘРИПОВ.**

*БЫЛ -ҠЫҘЫҠ*



# КӨЛӨП ДАУАЛАНЫҒЫҘ

**Бөгөн ауырыуҙарҙы нисек кенә дауаламайҙар. Мәҫәлән, Новосибирск ғилми-тикшеренеү институты ғалимдары алкоголизм, наркомания, депрессия менән яфаланған, үҙ-үҙенә ҡул һалырға маташыусыларҙы сыбыҡ менән ярырға тәҡдим итә.**

Быуындай психосоматик ауырыуҙар йәшәү дәрте һүнгәндәрҙә барлыҡҡа килә. Әҙерәк "туҡмап" алғандан һуң кешелә эндорфин рецепторҙары әүҙемләшә һәм "бәхет гормоны" күпләп бүленә. Белгестәр нисек итеп һуғырға ла өйрәтә - "йомшаҡ" ергә 60 тапҡыр шыйыҡ сыбыҡ менән 30 көн дауамында һуғырға кәрәк. Был ысулды тәҡдим итеүсе, биология фәндәре докторы Сергей Сперанский үҙе ошо рәүешле депрессиянан һәм ике тапҡыр кисергән инфаркт эҙемтәләренән ҡотолған.

Һимеҙлек менән яфаланыусыларға солитер йоморҡаһы йоторға тәҡдим итәләр. Солитер эсәктә йәшәүсе оҙонлоғо 10 метрға еткән селәүсен. Ул кеше ашаған нәмәләр менән туҡлана.

Йылы нефть тултырылған ванналар быуындар һыҙлауынан ҡотҡара, ти. Артритты Әзербайжандың Нафталан ҡалаһы санаторийҙарында шулай дауалайҙар. Шулай ҙа АҠШ-та нефть ванналары составында канцероген бар, тип иҫәпләйҙәр.

Рельстар ҙа дауалай, дөрөҫөрәге уларҙан бүленеп сыҡҡан электромагнит тулҡындар. Был ысулды Индонезияла йәшәүсе таксист уйлап тапҡан. Өлөшләтә фалиж һуҡҡас, ул поезд аҫтында ҡалыу маҡсаты менән рельсҡа ятҡан. Тик токтан һуғылып, аяҡҡа баҫҡан. Хәҙер уның кәнәшен күптәр ҡабатлай икән.

Шулай ҙа иң файҙалы ысул - көләү, ти белгестәр. Ул стресс булдырмай, йөрәк һәм ҡан тамырҙары эшен, матдәләр алышыныуҙы яҡшырта, ғүмерҙе оҙайта. Дарыуҙар һатып алып дауаланырға аҡсағыҙ булмаһа, ҡысҡырып көлөгөҙ, һауыҡҡанығыҙҙы һиҙмәй ҙә ҡалырһығыҙ.

# НАСАР ХӘБӘР... ҺИМЕРТӘ

**Майами университеты (АҠШ) хеҙмәткәрҙәре раҫлауынса, насар хәбәрҙән кеше артыҡ ауырлыҡ йыя икән.**

Баҡтиһәң, негатив мәғлүмәт ишеткәндән һуң, кеше үҙе лә һиҙмәҫтән борсолоу тойғолары кисерә. Шул рәүешле стресс ҡорбанына әүерелгән кеше юғары калориялы ризыҡтарҙы күберәк ашай башлай. Былдай төркөмгә ҡараусылар насар яңылыҡтарға иғтибар итмәүселәргә ҡарағанда көнөнә 40 процентҡа күберәк ашай икән.

Тикшеренеүҙәр Америкала президент һайлауҙары тамамланған осорҙа үткәрелгән. Президент һайлау кампанияһы мәлендә иҡтисади хәлдәрҙең насарайыуы, сәйәси хаталар тураһында күберәк һөйләнелә. "Был мәғлүмәттәр кешеләрҙе күберәк калория ҡулланырға мәжбүр итә, сөнки уларҙа эволюцияның миллион йылдары эсендә барлыҡҡа килгән инстинкт уяна. Улар "мәлен файҙаланып, туйғансы ашап ҡал" тигән принципҡа эйәрә һәм калориялы аҙыкты ауыр көндәр өсөн "запас"ҡа тиңләй. Шуға ла кем артыҡ ауырлығынан ҡотолорға теләй, сәләмәт йәшәү рәүеше алып барығыҙ һәм насар яңылыҡтар тыңламағыҙ", - ти профессор Джулиано Ларан.

ИНТЕРНЕТТАН



# ҒҮМЕРЕҢДЕ...

## йоҡлап үткәрмә

■ Белгестәр иҫәпләп сығарыуынса, кеше үҙ ғүмеренең дүрттән бер өлөшөн йоҡлап үткәрә. Эштә коллегалар менән аралашыу, шулай уҡ социаль селтәрҙәр яҡынса 9 йыл ғүмерҙе ала. 3 йыл - транспортта эшкә йөрөүгә сарыф ителә, магазиндар буйлап йөрөүгә шулай уҡ дөйөм 4 йыл тирәһе ваҡыт кәрәк. Шуға ла ғалимдар көн тәртибен ныҡлап уйлап, кәрәкмәгән күп нәмәләрҙән баш тартырға кәңәш итә.

■ Торонтолағы медицина мәктәбе тикшеренеүселәре билдәләүенсә, туғандар менән аралашып йәшәү ғүмерҙе оҙайта. Экспериментта 57-84 йәшлек өлкәндәр ҡатнашҡан. Асыҡланыуынса, кем туғандары менән йышыраҡ аралашҡан, улар оҙағыраҡ йәшәгән. Психологтар ҙа, яңғыҙлыҡ кешенең сәләмәтлек торошона яҡшы йоғонто яһамай, ти. Шуға ла улар оло йәштәгеләргә әүҙем булырға, төрлө сараларҙа ҡатнашырға саҡыра.

■ Төндә насар йоҡлаһаң, йоҡларға ятыр алдынан физик күнекмәләр эшләп ал, тип кәңәш итә ғалимдар. АҠШ-тың Йоко милли фонды үткәргән һорау алыуҙарҙа ҡатнашыусылар яуаптары буйынса бер нисә төркөмгә бүленгән: уларҙың ҡайһылары күнекмәләрҙе даими яһаған, ҡайһылары еңелсә генә спорт менән шөғөлләнгән, ҡайһылары бөтөнләй ҡыбырларға яратмаған. Кем ниндәй ҙә булһа күнегеү төрө яһаған, улар яҡшыраҡ йоҡлаған. Кемдәрҙер матур төштәр күреүен дә билдәләгән. Көнөнә 10 минут ҡына йәйәү йөрөү ҙә йоҡоноң сифатын күпкә яҡшырта, ти белгестәр.

■ Балыҡ диетаһы яман шештән ҡайһы бер төрҙәренән дә һаҡлай. Ғалимдар билдәләүенсә, бигерәк тә һыуыҡ диңгеҙ һыуҙарында йәҙгән омега-3 майлы кислоталарына бай майлы балыҡтар файҙалы. Әбына шәхси кешеләр тарафынан фермаларҙа үрсетелгән балыҡ ашаусыларҙа яман шешкә ҡаршы тороу һәләте түбән, сөнки яһалма аҙыҡ ашап үҫкәнлектән, был балыҡтарҙа омега-6 майлы кислоталары күберәк. Һуңғыларына һөмбаш ғаиләһенә ҡараған балыҡтар инә. Балыҡтың нисек әҙерләнеүе лә мөһим. Мәсәлән, тоҙло балыҡ үҙенең профилактик үҙенсәлектәрен юғалта, ә ҡыҙҙырылғаны, киреһенсә, яман шеш хәүефен арттыра, сөнки ҡыҙған саҡта аҙыҡта канцероген аминдар туплана.

■ Сардиния уртауы - Италияның автономлы өлкәһендә йәшәүселәр йөҙ йәшкә үтеүселәре күп булыуы менән рекорд ҡуя. Фән әлегә быны сәбәбен асыҡлай алмай. Шулай ҙа күптән түгел Британияның биотехнологик компанияларының береһе Сардинияның көнсығышында урынлашҡан тарихи район Ольястра халҡын тикшереп ҡарарға булған. Унда оҙон ғүмерлеләр иҫәбе бөтөн донъя менән сағыштырғанда биш тапҡырға күберәк икән. Ғалимдар ғүмер оҙайлығына генетик факторҙарҙың һәм тирә-яҡ мөхиттең тәьҫирен өйрәнмәксе. Элегерәк бында көн күргән халыҡтың башлыса йәшелсә, емеш-еләк һәм балыҡтан торған сәләмәт аҙыҡ-түлек менән туҡланыуы уларҙы оҙон ғүмерле итә, тип иҫәпләйҙәр ине. Был ризыҡтар файҙалы матдәләргә бай, уларҙа май күп түгел. Әммә быға ышанып булмай, ти белгестәр, сөнки был диета күп илдәрҙә популяр, тик улар оҙон ғүмер менән маҡтана алмай.

БАШҠОРТ ТАРИХЫ ЙЫЛЫ

# ТҮБӘЛӘҪТӘР ҠОР ЙЫЙҘЫ

**Крайҙы өйрәнеүсе булараҡ, мин күптәнән үҙебеҙҙең Түбәләҫ ырыуы йыйынын үткәреү тураһында хыяллана инем, сөнки ата-бабаларыбыҙҙың үткән тормошо, уларҙың башҡарған хеҙмәте, мәҙәниәте, көнкүреше, йолалары - барыһы ла мине ныҡ ҡыҙыҡһындыра ине. Ниһайәт, ошо көндәрҙә хыялыма өлгәштем, тарихи ваҡиға тип атарлыҡ сарала ҡатнаштым - Салауат районының Табын иленә ҡараған Ҡыуаҡан тармағы түбәләҫ ырыуы төбәгенең төп ауылы Мөрсәлим ҡасабаһында ырыу ташын асыу тантанаһы уҙҙы.**

Ҡунаҡтарҙы Малаяҙҙа Салауат районы хакимиәте башлығы Марс Кашапов ҡаршы алды һәм уның эш бүлмәһендә "Янгантау" геопаркы үҫеше перспективалары буйынса эшлекле әңгәмә ойошторолдо. Янылыҡтар өмөтлө - шуныһы ҡыуандыра. Артабан юлыбыҙ түбәләҫ ырыуының тәүге ауылы Урмансыға алып килде. Бында Лидия һәм Сафуан Сәйетгәлиндар үҙ көстәре менән этноөй булдырған. Ишектән инеү менән Урмансы ауылының Түбәләҫкә ҡараған аңлатҡан күргәҙмә баннер иғтибарҙы йәлеп итә. Сәйетгәлиндарҙың нәҫел шәжәрәһе лә ҡуйылған. Һул яҡта - традицион һике, уның ҡаршыһында көнкүреш монаяттары ҡуйылған ҡашығаяҡ бүлмәһе. Мейескә бик иҫтәре китә икән килгән туристарҙың, етмәһә, ҡаҙаны ла бар. "Башҡорттар күсенеп йөрөгән бит", тиһәләр, "Йылы миҙгелдә күп һанлы малды көтөү өсөн сыҡҡандыр йәйләүгә, ә ҡыш көнө, әлбиттә, йорттарҙа йәшәгәндәр, тибеҙ", - тип һөйләй Сафуан. Түр яҡтың һул яғында сымылдыҡлы карауат, унда бишек эленеп тора. Йөн иләү ҡолғаһы һәм орсоҡ та шунда. Өҫтәлдә иҫке төркисә яҙылған "Мөхәмәҙиә" китабы урын алған. Башҡорт халҡының ҡунаҡсыллығын раҫлап, Сәйетгәлиндәр беҙҙе милли ризыҡтар менән һыйланы.

Түбәләҫ ырыуының төп ауылы булған Мөрсәлимгә юлланабыҙ. Миңә бында һәр ҡыуаҡ тигәндәй таныш, шуға ла тәбиғәттең күркәмлеге менән генә хозурланып ҡалмайым, күңелемдән генә топонимиканы барлайым. Урмансыны сығыу менән тәмле, татырлы һыуы менән тирә-яҡта даны таралған Бейек түбә аҫтынан сылтырап ағып ятҡан Һалҡын шишмәне, унан боронғо Тайшан ауылы урынын һәм реликт ағасыбыҙ, түбәләҫ ырыуының изге ағасы - йөҙйәшәр янғыҙ ҡарағасты үтәбеҙ. Урыҫ Илсекәйенән һуң Крәке йылғаһы күперенән ҡалҡыулыҡҡа күтәреләбеҙ. Башҡорт Илсекәйенән һуң Һикеяҙға Саған ҡушылған урындан бер аҙ түбәнерәк ҡоролған күперҙән үтәбеҙ.



Рус сәйәхәтсеһе Петер Симон Паллас Әй йылғаһына Саған (Шихан тип хаталы яҙған һәм Әй ҡушылдығын Саған йылғаһы тип кенә күрһәткән, тип фаразлайбыҙ. Хәҙерге ваҡытта Һикеяҙҙы Әй ҡушылдығы тип билдәләйбеҙ) ҡойған ерҙә Биктуған ауылы янында "Башҡорттар селитра һәм көкөрт табып, дары яһай" тип яҙып ҡалдырған. Паллас уларҙан шул урынды күрһәтеүҙе үтенгән, әммә башҡорттар уға серҙе асмаған. Һикеяҙ буйы төбәгенә ҡуҙғалаҡ менән йыуа йыйырға барғанда өлкән йәштәге апайҙар: "Бында борон тимерҙек булған", тиҙәр ине. Йәшерен рәүештә ҡорал эшләгәндәр, тимәк. Дарыны ла шунда етештергәндәрҙер, мөғайын, тип фекер йөрөтөргә була. Был урындан Әй буйындағы Һикеяҙ мәмерйәләр комплексы әллә ни йыраҡ түгел, боронғо һуҡмаҡтар буйлап, 12-13 саҡрымдыр. Салауат мәмерйәһе тигән исем аҫтында билдәле булған Иҙрис мәмерйәһе эргәһенән кисеп сығып, Көҙәй ырыуҙары менән бәйләнеш тотҡан түбәләҫтәр. Ат юлы булған

СӘЛӘМӘТ БУЛАЙЫҠ!

# МИН ДӘ СИРЛӘНЕМ...



**Күптәребеҙ инде заман афәтенә әүерелгән тажзәхмәт сирен һаман да ҡайҙалыр ситтә йөрөй, миңә ҡағылмай тип ҡабул итә.**

Беҙ ҙә шулай тип уйлай инек. Беренсе тапҡыр ҡышҡыһын ауырның, көслө йүтәл менән интектек. Әммә уны һалҡын алдырыуҙыр тип уйлап, табиптарға мөрәжәғәт итмәнек. Йүтәлдән тыш тажзәхмәттең башҡа билдәләре тойолманы. Икенсе тапҡыр көҙ уртаһында ауырырға тура килде. Тәүге көндө кис температура бер аҙ күтәрелде - 37,5 ине. Башҡа билдәләр тойолмағас, иртән температураны үлсәп тормай, эшкә киттем, шулай ҙа температура барлығын тоя инем. Эшкә ингәндә электрон термометр менән температураны үлсәп индерҙеләр - барыһы ла ал да гөл. Сәғәт 10-дар тирәһендә ҡапыл хәлем бөттө лә ҡуйҙы, хатта компьютерҙың клавиатура төймәһенә баҫырға ҡулымды ла күтәрә алмайым. Саҡ һөйрәлеп поликлиникаға барып еттем, ярай әле унығы эргәлә. Ингән ваҡытта тағы ла температура үлсәнеләр - температура юҡ. Ә мин үҙем температура барлығын тоям - эстән янам, хатта күҙ алдары ҡараңғылана. Табип бүлмәһендә лә электрон термометр температураны күрһәтмәне. Ғәҙәти, терегөмөшлө термометр таптырып, ҡабаттан үлсәттем - 37,8.

Табип нисек сирләй башлағанымды ентекле һорашып, анализ алып, эшкә яраҡһыҙлыҡ ҡағыҙы асып, ҡайтарып ебәрҙе. Икенсе көн бөтөнләй тора алмай яттым. Температура 39 һәм унан да юғары. Хәл бөтөнләй юҡ. Әйтерһең дә, ниндәйҙер икенсе үлсәмдәһең: бер нәмә лә тоймайһың, бер нәмә лә кәрәкмәй - бары тик ятаһың, хатта күҙеңде лә асып ҡарай алмайһың.

Ике көндән анализ һөҙөмтәләре килде. Ыңғай. Был ваҡытҡа ауырыу билдәләре ҡул менән һыпырып алған кеүек юҡҡа сыҡҡайны инде, әммә температура 37,2 - 37,8 кимәлендә ҡала бирҙе. Күҙ ҙә аса алмаған ваҡыт менән сағыштырғанда, хәл дә инде. Әммә ғаилә ағзаларым сирләп китте. Ҡыҙымдың температураһы булманы, әммә ныҡ йүткерҙе һәм ҡоҫто. Улымдың йүтәле лә, тымауы ла юҡ, бары тик температураһы 39,8-гә күтәрелеп, ут кеүек янып, хәлһеҙ тик ятты. Тормош иптәшемдә барлыҡ билдәләр ҙә булды. Уларға табип саҡыртттым, килеп анализ алдылар. Әйткәндәй, интернет селтәрендә яҙғандарынса, ҡабатлап та саҡыртманым, 3 көн дә көтмәнек - шул көндә үк килделәр.

Дүртенсе көнгә минең аяҡтарым һыҙлай башланы, бигерәк тә төнөн уларҙы ҡайҙа ҡуйырға белеп булмай. Улым да шулай интекте, хатта төндә тороп, иҙәнгә төшөп, тыпырсынып-тыпырсынып иланы. Иремдең бөтөн тәне һыҙланы. Анализдар килгәс, бары улымдың ғына ковид менән сирләүе раҫланды.

Ике аҙнанан компьютер томографияһы үттем. Тыным ҡысылмаһа ла, бер нимә лә борсомаһа ла, үпкәм 20 процентҡа зарарланғайны. Тағы ла ике аҙнанан ҡабат анализ тапшырҙым - ыңғай анализ килде. Ике көндән һуң тағы анализ бирҙем. Был юлы инде ковид раҫланманы.

Хәҙер барыһы ла артта ҡалған һымаҡ булһа ла, тиҙ генә арыйым, фатирға күтәрелгәнсе ҡаттар араһында туктап-туктап хәл йыйып алам. Үҙ башымдан кисермәй тороп, сирҙең нимә икәнен белмәйһең икән. Ә ул - мәкерле, уның тураһында яҙып ҡына аңлатып булмай, әммә башҡаларға кисерергә яҙмаһын. Һаулығыбыҙ өсөн үҙебеҙ яуаплы, һаулығыбыҙҙы һаҡлайыҡ. Унан башҡа бер ниндәй байлыҡ та кәрәк түгел.

**Наҙгөл МОРАТОВА.**
**Өфө ҡалаһы.**

✔ Түбәләстәр - тарихта билдәле ырыу, улар урта быуаттың бик күп яҙма хеҙмәттәрендә билдәләнә. XIV быуатта Рәшид әд-Дин Сыңғыҙхан яулап алған Үҙәк Азия ҡәбиләләре араһында баргут, кори һәм түләҫ ҡәбиләләрен иҫкә ала.





(17 саҡрым тиҙәр ине ҡарттар). Ғаилә туғанлығы барлыҡҡа килгән, Һабантуй, Ҡарғатуйҙарҙа танышҡан йөштәр, димләп ҡауыштырғандар.

Хәтирәләр юлды ҡыҫҡарта - Мөрсәлимдең яңы ял һәм спорт паркына килеп еткәнебеҙ һиҙелмәй ҙә ҡалған. Милли кейемдәге ырыуҙаштарым ҡаршы алды беҙҙе. Бында осрашыу Оло Табын ҡәбиләһенең Ҡыуаҡан тармағына ҡараған түбәләҫ ырыуы стелаһын тантаналы асыуҙан башланды. Артабан сара яңы төҙөлгән мәҙәниәт һарайында дауам итте. Һәр ауылдан берәр йәш ғаилә "Табын ырыуы ҡаны аға минең тамырҙарымда" тип аталған презентация, шәжәрә стенды әҙерләгән. Улар менән ентекле танышҡандан һуң тамашалар залына үтәбеҙ: мәктәп уҡыусылары сәхнәләштергән түбәләҫ ырыуы легендаһы ҡабат тарихҡа алып ҡайта...

Йыйындың пленар ултырышында Салауат районы хакимиәте башлығы урынбаҫары Марат Ғилманов һәм Мөрсәлим ауыл биләмәһе хакимиәте башлығы Айҙар Мөфлиханов тәбрикләү һүҙен еткергәндән һуң, һүҙ ҡунаҡтарға бирелде. Тарих фәндәре кадидаты, Башҡортостан юлдаш телеканалы журналисы Салауат Хәмиҙуллин үҙенең сығышында түбәләстәрҙең тарихы тураһында ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр килтерҙе: "Түбәләҫ ырыуы башҡорттары борон Салауат районының алты - Тирмән, Сүрәкәй, Илсекәй, Урманс, Ҡалмаҡкол һәм Ҡарағол ауылында ултырған. Шуға ла халыҡ араһында "Алты ауыл түбәләҫ" тигән лаҡап һаҡланып ҡалған да инде. Мөрсәлим ауылы Ҡалмаҡколов Мөрсәлим Ҡалмаҡкол улы (1746 - 1814) йөшәгән ауыл урынында тимер юл станцияһы барлыҡҡа килеүе һөҙөмтәһендә ҡалҡып сыға.

Түбәләстәр - тарихта билдәле ырыу, улар урта быуаттың бик күп яҙма хеҙмәттәрендә билдәләнә. XIV быуатта Рәшид әд-Дин Сыңғыҙхан яулап алған Үҙәк Азия ҡәбиләләре араһында баргут, кори һәм түләҫ ҡәбиләләрен иҫкә ала. Бында түләҫ атамаһы түбәләҫ этнонимының хаталы яҙылышы. XVI быуаттың "Таварих-и гузида-йи нусрат-наме" аноним яҙмаһында Көнбайыш Себерҙең күсмән үзбәк дәүләтенә ниғеҙ һалыусы Әбелхәйер хан (1428 йылдан 1468 йылға тиклем) буйһоноуында түбәләҫ ҡәбиләһе лә булыуы теркәлә. Күсмән үзбәктән Урта Азияға миграцияланғас, уларҙың бер өлөшө тороп ҡала һәм башҡорттар составына инә. Был ырыуҙың үзбәк тармағына ҡағылышлылығы тураһында шуны әйтергә кәрәк: улар Шибанидтар династияһына яҡын була, сөнки Бохар ханы Ғәбәйҙулла хандың әсәһе - түбәләҫ ҡәбиләһе бәгенең ҡыҙы.

Башҡорт түбәләстәре лә абруйлы клан була. Башҡорт ырыуҙарының шәжәрәһендә Түбәләҫ башҡорт халҡының ата-олатаһы һәм легендар хан Иштәктең улы тип күрһәтелә. Түбәләҫ, башҡорт яҙыусыһы Тажетдин Ялсығолов яҙмаларына ярашлы, хатта Әйләнең ағаһы була һәм быҙың менән түбәләстәрҙең әйләләр алдында юғарылығы күрһәтелә.

Р. Ғ. Кузеев яҙыуынса, XVIII быуатта рус хакимдарының башҡорт ырыуҙары тураһындағы яҙмаһында түбәләстәр яңылыш әйләләргә инделә. Ғәмәлдә, улар Ҡыуаҡан ҡәбиләһенең бер өлөшө була".

Крайҙы өйрәнеүсе Рифат Мирхәйҙәров "Түбәләҫ ырыуы тарихы. Полковник Собханғол Килтәков - Салауат Юлаевтың көрәштәше" темаһы буйынса сығыш яһаны. Собханғол Килтәков 1720 йылда Сүрәкәй (Нуғай) ауылында тыуған. 1765 йылдан Рәсәй империяһы Себер юлы Түбәләҫ улусы старшинаһы. 1773 йылда уның командаһында 91 хужалыҡ һаналған. 1773 йылдың декабрь уртаһында үҙенең улусынан саҡырылған 25 башҡорттан торған командаһы менән атаман И. С. Кузнецов отрядына ҡушылған. Ғәскәре менән 22 декабрҙә Һатҡы заводына, 24 декабрҙә - Златоуст заводына килә; Златоуст, Ҡатау-Ивановск, Һатҡы заводтарында урындағы үҙидаралыҡ органдарын ойоштороуҙа ҡатнаша. Бердский баш күтәреү үҙәгенә пушка, ҡорал, һуғыш кәрәк-яраҡтары, аҡса оҙата. 1774 йылдың ғинуар башында 50 яугиры менән Салауат отряды сафтарында Красноуфимскиҙы, 23-24 ғинуарҙа Көңгөрҙө алыуҙа ҡатнашҡан. Салауат Юлаев ҡаты яраланып, дауаланырға киткәндән һуң, Сура Рәсүлев менән берлектә башҡорт отрядына етәкселек иткән. Ғинуар һуңында, Сура Рәсүлев етәкселегендә башҡорт атлылары сигенеүе, баш күтәреүселәр етәкселәре араһындағы конфликт арҡаһында, атаман И. Н. Зарубиндың секретары И. И. Суконников уны ҡулға ала. 1774 йылдың 4 февраленда Пермь провинция канцелярияһында Собханғол Килтәковтан һорау алына, шунан һуң аяуһыҙ яҙаларға дусар ителә һәм генерал-аншеф А. И. Бибиков ҡушыуы буйынса Көңгөрҙә аҫып үлтерелә...

Сара программаһы буйынса ҡаралған сығыштар, йәнле фекер алышыуҙарҙан һуң резолюция ҡабул ителде. Артабан түбәләҫ ырыуы ҡор башы итеп Рифат Мирхәйҙәров һайланды. Ул "Салауат районында Башҡорт тарихы йылы" махсус штандартын Әйләләр берләшмәһенең туғыҙ ауылды үҙ эсенә алған тырнаҡлы ырыуы вәкиле, Лағыр урта мәктәбе директоры, крайҙы өйрәнеүсе Ринат Ситдиҡовҡа тапшырҙы. Тырнаҡлылар Ҡараһаҡалды хан итеп күтәреүҙәре менән билдәле. Хәйер, был хаҡта киләсәктә улар үҙҙәре һөйләр.

**Миңнылыу АБДУЛЛИНА,**
**крайҙы өйрәнеүсе.**
**Өфө ҡалаһы.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Һүҙенде үлсәп һөйлә

Һәр ваҡыт бер үк төрлө төштәге өнгә мөрәжәғәт итегеҙ. Тәүҙә һеҙгә үҙегеҙҙе эшегеҙҙә бәхетле итеп "күреү" кәрәктер. Шунан һуң үҙегеҙҙе эш һуңына тиклем барлыҡ эшегеҙҙең дә осона сыҡҡан итеп күҙаллағыҙ. Артабан инде етәксегеҙҙең йылмайыуын, яңы индерелгән үҙгәрештәргә яраҡлашҡан итеп күрегеҙ. Шундай юҫыҡта күҙаллауҙарҙан ҡәнәғәтлек алығыҙ. Теләк, өмөт, ышаныс менән эшләгеҙ һәм өндәге төшөгөҙ тормошҡа ашыр.

Ниһайәт, үҙ-үҙегеҙ менән һөйләшеүҙәрегеҙҙе анализлағыҙ. Һөйләшеү - ул ғәҙәт. Беҙ сираттағы һүҙҙе әйтер алдынан сираттағы аҙымды баҫыр алдынан уйланған кеүек уйланабыҙ. Сикләүсе һәм кире энергия тартыусы һүҙҙәрҙән ҡотолоу өсөн көсөргәнеште йомшартып, уйҙар һәм ыңғай аффирмация ярҙамында ҡайтанан программалашыуға мөрәжәғәт итергә кәрәк.

Мәғлүм булыуынса, тәүҙә һүҙ ижади ҡеүәткә эйә булған. Был Илаһтың матди йәшәйеш булдырыу буйынса эшмәкәрлегенең башы булып тора. Мәҫәлән, "тырышырмын" тигән һүҙҙе генә алып ҡарайыҡ. Беҙ уны йыш ишетәбеҙ. Русса ул "попытаюсь" тип әйтелә. Кем тырыша, йәғни "пытается" (попытаюсь - пытка, интектереү һүҙенән алынған), бер ваҡытта ла бер нәмәгә лә өлгәшә алмаясаҡ. Иң яҡшыһы - "Мин эшләйәсәкмен", "Мин унда буласаҡмын", "Мин еңәсәкмен" тиергә. Рәҫлау һүҙҙәрен ҡулланып, һеҙ аңыҡығыҙға тейешле күрһәтмә бирәһегеҙ. Ул үҙе өҫтөнлөктәрҙе билдәләй һәм ижади һәләтегеҙҙе әүҙемләштереп, һеҙ еңеп сығаһығыҙ.

Күптәр "булдыра алмайым" тигән һүҙҙе ҡуллана. Шулай тип һеҙ үҙенән-үҙе тормошҡа ашасаҡ фараз ҡылаһығыҙ. "Булдыра алмайым" тип әйтәһегеҙ икән, ысынлап та, уныш ҡаҙаныу мөмкинлегегеҙ була тороп та быны булдыра алмаясаҡһығыҙ.

Күреүегеҙсә, көндәлек һөйләшеүҙәрегеҙҙе ҡайтанан программалаштырыу - уйығыҙҙа таҙарыныуға ҙур аҙым.

**Программалаштырыуҙы ошолайыраҡ атҡарығыҙ:**

- Уңайлы итеп ултырығыҙ һәм тәнегеҙҙе көсөргәнештән арындырығыҙ. Күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ. Өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ һәм бер нисә тынҫ күренеште күҙ алдығыҙға килтерегеҙ.
- Бер нисә тапҡыр уйығыҙҙан ғына: "Мине сикләүсе һүҙҙәрҙе ҡулланыуым тураһында үҙ-үҙемә отчет бирәм. Мин уларҙың тормошома кире йоғонто яһауын аңлайым. Әммә мин яҡшыраҡ йәшәргә теләйем һәм шуға күрә бынан һуң ыңғай һәм ижад энергияһы йөрөтөүсе һүҙҙәрҙе генә ҡулланасаҡмын", - тиегеҙ.
- Уйығыҙҙа ғына: "Мин үҙ аңымда һәм хәҙер ыңғай әһәмиәте булған һүҙҙәрҙе ҡулланам", - тип, күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ.

Һүҙҙәр телмәребеҙҙә шул тиклем ныҡлы урын ала, әгәр ҙә берәй ваҡыт үҙегеҙҙе сикләүсе һүҙҙәр йәки "булдыра алмайым" тиһегеҙ икән, әлеге күнегеүҙе ҡабат-ҡабат ҡабатлағыҙ.

Артабан беҙ көсһөҙлөк һәм ғазапланыуға килтереүсе һүҙҙәр тураһында һөйләшербеҙ. Аңыбыҙ тормошобоҙ, бигерәк тә тәнебеҙҙең тормошо менән идара итә. Тормошобоҙ сығанағы Илаһ булғанлыҡтан, уның менән мейебеҙҙең уң яҡ ярымшары ярҙамында бәйләнеш булдырыу өсөн эшләнгән һәр ғәмәлебеҙ һәр көнөбөҙҙө идеаль итеүгә бер аҙым булып тора.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**

ФӘҺЕМЛЕ ХИКӘЙӘТТӘР

# НӘУАДИР ТӘРЖЕМӘҺЕ

**XIX-XX быуат саттарында милли мәҙәниәт өлкәһендә тәрән эҙ ҡалдырыусыларҙың береһе, билдәле башҡорт уҡымышлыһы Хәбибназар Үтәки ғәрәп әл-Ҡолйубиҙың "Нәуадир" йыйынтығын төрки теленә ирекле тәржемәлә баҫтырып сығара. Уның "Нәуадир тәржемәһе" китабы XIX-XX быуат башҡорт мәғрифәтселек әҙәбиәтенең айырылғыһыҙ биттәрен тәшкил иткән әһәмиәтле ҡомартҡы булып тора. Ошо китаптан ҡайһы бер фәһемле хикәйәттәрҙе "Киске Өфө" гәзитен уҡыусыларға тәҡдим итәбеҙ.**

## Сөләймән бәйғәмбәр

Сөләймән ғәләйһиссәләмгә етмеш мең төрлө ҡоштар хеҙмәт һәм итәғәт итер булған. Уларҙың һәр ҡайһыһының төҫө һәм ҡиәфәте үҙенә башҡа булып, берберенә аслан оҡшамаған, ти. Улар Сөләймән ғәләйһиссәләмдең баш өҫтөн, күктәге болот кеүек, ҡаплап торғандар, ти. Бер ваҡыт Сөләймән ғәләйһиссәләм ҡоштарҙан: "Һеҙҙең тормош-мәғишәттәрегеҙ нисек? Нисек йөмортҡа һалаһығыҙ, нисек бала сығараһығыҙ?" - тип һораған. Ҡоштар: "Беҙҙең бәғзеләребеҙ һауала йомортҡа һалып, һауала бала сығара; бәғзеләребеҙ йомортҡаһын ҡанатына ҡуйып, балаһын сығара; бәғзеләребеҙ йомортҡаһын суҡышына ҡуйып, бала сығара. Бәғзеләребеҙ йомортҡа ла һалмай, бала ла сығармай, шулай ҙа нәҫеле артып тора", - тигәндәр.

Сөләймән ғәләйһиссәләмдең ебәктән эшләнгән бер балаҫы булған, уны ендәр эшләгән, имеш. Ул әлеге балаҫҡа барса ғәскәрен, аттарын, башҡа мәжлестәштәрен, ендәрҙе һәм януарҙарҙы, ҡоштарҙы - барсаһын ултыртып, ер менән күк араһында осоп йөрөй алған, ҡайҙа барырға теләһә, шунда барыр булған. Сөләймән ғәләйһиссәләмдең шулай уҡ гәүһәрҙән һәм яҡуттар менән биҙәлмәле бер тәхете, шул тәхеттең тирәһендә вәзирҙәр һәм ғалимдар ултыра торған өс мең көрси-урындыҡтары ла булған. Ғәскәрҙәре тағы күберәк: әҙәмдәрҙән торған ғәскәре егерме биш фәрсәх (150-175 км самаһы ара), ендәрҙән булған көсө егерме биш фәрсәх, януарҙарҙан һәм ҡоштарҙан булған көстәре егерме биш фәрсәх икән. Аш бешерелә торған урында һәр көн йөҙ мең ҡуй, ҡырҡ мең һыйыр һуйылыр һәм бешерелер булған. Шулай ҙа Сөләймән ғәләйһиссәләм ул ашты ашамай, үҙенең ҡул көсө менән тапҡан аҡсаһына арпа икмәге алып ашай икән.

Бер көн балаҫ өҫтөндә ғәскәре менән осоп йөрөгәндә Сөләймән ғәләйһиссәләм күңелендә дәүләтенең олуғлығына һоҡланыу, ғорурлыҡ хисе ярала. Шул арала балаҫы һелкенә башлап, ике мең ғәскәре һәләк була. Сөләймән ғәләйһиссәләм: "Ғәҙел бул!" - тип балаҫҡа һуҡкан икән, уныһы телгә килеп: "Хәлифә ғәҙел булһын!" - тигән. Сөләймән ғәләйһиссәләм, әлеге ҡазаға үҙенең күңелендәге ғорурлығы сәбәпсе икәнен аңлап, сәждәгә бара һәм ул тәүбә ҡылғас, балаҫ уртаса рәүешкә инеп, тыныслыҡ килгән, ти...

**Илшат ЯНБАЕВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**



## 6 ДЕКАБРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 16.00 Т/с "Кулагины". [16+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20, 22.30 Т/с "Ключ от всех дверей". [12+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20, 3.10 Т/с "В зоне риска". [16+]
4.00 Т/с "Личное дело". [16+]
4.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Бабушка-детектив". [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [12+]**
**16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Ради добра. [12+]**
**17.45, 5.15 История одного села. [12+]**
**18.00 "Пофутболим?" [12+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Адмирал" (Владивосток). КХЛ.**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00 Х/ф "Лапочка". [12+]**
**3.00 Спектакль "Нәркәс". [12+]**

## 7 ДЕКАБРЯ
## ВТОРНИК
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 16.00 Т/с "Кулагины". [16+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20, 22.30 Т/с "Ключ от всех дверей". [12+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20, 3.10 Т/с "В зоне риска". [16+]
4.00 Т/с "Личное дело". [16+]
4.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Бабушка-детектив". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Хазина". [6+]**
**15.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**15.30, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Дорога к храму". [0+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - ХК "Сочи". КХЛ.**
**22.00 Теге өсәү! [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Сделка". [16+]**
**3.00 Спектакль "Убей меня голубчик". [12+]**
**5.00 "Хазина". [12+]**

## 8 ДЕКАБРЯ
## СРЕДА
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 16.00 Т/с "Кулагины". [16+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20, 22.30 Т/с "Ключ от всех дверей". [12+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20, 3.10 Т/с "В зоне риска". [16+]
4.00 Т/с "Личное дело". [16+]
4.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Бабушка-детектив". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30, 5.00 Тормош. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [6+]**
**15.45 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Тайм-аут. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Х/ф "Пластик". [16+]**
**3.00 Спектакль "Белые ночи Акмуллы". [12+]**
**4.45 История одного села. [12+]**

## 9 ДЕКАБРЯ
## ЧЕТВЕРГ
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 16.00 Т/с "Кулагины". [16+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20, 22.30 Т/с "Ключ от всех дверей". [12+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20, 3.10 Т/с "В зоне риска". [16+]
4.00 Т/с "Личное дело". [16+]
4.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Бабушка-детектив".**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Теге өсәү! [12+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Этно-краса". [6+]**
**20.45, 23.45 История одного села. [12+]**
**21.00 Крылья. [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**0.00 Х/ф "Жмот". [16+]**
**3.00 Спектакль "Посетитель". [12+]**
**4.45 Үткән ғүмер. [12+]**
**5.00 Башҡорттар. [6+]**

## 10 ДЕКАБРЯ
## ПЯТНИЦА
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 16.00 Т/с "Кулагины". [16+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Юморина-2021. [16+]
23.00 Веселья час. [16+]
0.45 Х/ф "Разлучница". [16+]
4.00 Т/с "Личное дело". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Д/ф "Телеуты коренной народ Сибири". [12+]**
**10.30, 23.30 "Автограф". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15, 21.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30 "Үткән ғүмер". [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Автограф. [12+]**
**14.00 "100 шагов на войне..." Отрывки из военной прозы башкирских писателей. [12+]**
**14.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**14.30 Башҡорттар. [6+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.00 "Ҡуласа". [12+]**
**17.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 "Башҡорт йыры-2021". [12+]**
**19.45, 20.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00 Х/ф "Денежный самолет". [16+]**
**2.00 "Спектакль "Асылъяр". [12+]**
**4.15 Әлләсе... [12+]**
**5.00 "Бай". [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**

## 11 ДЕКАБРЯ
## СУББОТА
### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
12.35 Доктор Мясников. [12+]
13.40 Х/ф "Доктор Улитка". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Дом, где сердце". [12+]
1.15 Х/ф "От судьбы не зарекайся". [12+]
4.33 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 "Ете егет". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 Преград. Net. [6+]**
**10.15 "Этно-краса". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [0+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Этап Кубка мира по сноуборду.**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Юлдаш-хит-2020. [12+]**
**19.00, 4.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**19.45 Ради добра. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 1.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2021". [12+]**
**0.00 Х/ф "Вид сверху лучше". [12+]**
**2.15 Спектакль "Вот так случилось..." [12+]**
**4.30 История одного села. [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**

## 12 ДЕКАБРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### РОССИЯ 1

5.20, 3.10 Х/ф "Роман в письмах". [12+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 Большая переделка.
12.30 Парад юмора. [16+]
14.20 Х/ф "Танец для двоих". [12+]
18.40 Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов "Синяя Птица".
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Д/ф "Россия. Новейшая история". [12+]
1.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Ҡурай даны". [6+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "Сулпылар". [0+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.00 "Елкән". [6+]**
**11.30 Преград. Net. [6+]**
**11.45 "Этно-краса". [6+]**
**12.00 Этап Кубка мира по сноуборду.**
**13.30 "Ете егет". [12+]**
**14.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**15.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.30 "Дорога к храму". [0+]**
**17.00, 5.30 Историческая среда. [12+]**
**17.30 Юлдаш йыры-2020. [12+]**
**19.20 Хоккей. "Ак Барс" (Казань) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**22.00, 23.30 Республика LIVE #дома.**
**22.30 Новости недели (на рус.яз).**
**23.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**0.00 Х/ф "За гранью". [16+]**
**2.15 Спектакль "Эти свободные бабочки". [12+]**
**4.45 "Млечный путь". [12+]**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**7 декабрь "Амеля"** (Н. Крашенинников, А. Балгазина). 12+
**8 декабрь "Һөйәһеңме - һөймәйһеңме..."** (Ф. Бүләков), трагикомедия. 12+
**9 декабрь "Ай тотолған төндә"** (М. Кәрим), трагедия. 12+
**10 декабрь Премьера! "Эңер төшкәс"** (А. Дударев), мелодрама. 12+
**11 декабрь "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия. 18.00 12+
**Премьера! "Эңер төшкәс"** (А. Дударев), мелодрама. 18.00 12+
**12 декабрь "Мөхәббәт ҡоштары"** (И. Йомағолов), музыкаль комедия. 18.00 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**7 декабрь "Үлмәҫбай"** (М. Кәрим), хикәйәт. 12+
**10 декабрь "Аҡса булһа бер муҡса"** (М. Багаев), музыкаль комедия. 12+
**11 декабрь "Ханума"** (А. Цагарели), музыкаль комедия. 18.00 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**11-12 декабрь "История одной снежинки"** (В. Аношкин). 11.00, 13.00 0+
**"Что такое Новый год?"** (В. Щербакова), бэби-спектакль. 16.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**8 декабрь "Ҡыллы квартет презентацияһы"**. 6+
**9 декабрь "Ее глаза на звезды не похожи..."** Шекспир осоронан. 15.00 6+
**10 декабрь "В сердце светит Русь"**, С. Есенинға арналған музыкаль-әҙәби кисә. 11.00, 13.00 6+
**11 декабрь "Джаз-квартет Касимова"**. 15.00 6+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**6, 7, 9 декабрь "Шахтер"** (Б. Ҡаһарманова), драма. 14.00 12+
**8 декабрь "Шахтер"** (Б. Ҡаһарманова), драмаһы менән Ейәнсура районы, Иҫәнғол РМЙ сәхнәһендә гастролдәрҙә. 12.00, 15.00, 19.00 12+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**7-8 декабрь "Конец игры"** (З. Сөләймәнов", йәштәр өсөн социаль драма. 15.00 12+
**9 декабрь "Йөрәк майым"** (Б. Абдуразаков), мелодрама. 16+
**11 декабрь "Кошкин дом"** (С. Маршак), әкиәт. 13.00 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**9 декабрь "Минең йөрәк һиндә тибә"** (Р. Ҡуйбағаров), драма. 12+
**10 декабрь "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай), музыкаль комедия. 12+
**11 декабрь "Ҡатын түгел - аждаһа!"** (Д. Сәлихов), комедия. 18.00 12+
**12 декбрь "Занимательная наука - музыка"**. 12.00 0+
**"Музыка русской души"**, Рус халыҡ инструменттары оркестры концерты. 14.00 6+
**"Иң матур йырҙарҙы һайлап ҡына"** "Ашҡаҙар" төркөмөнөң караоке-концерты. 16.00 6+
**"Дуҫлыҡ күпере аша"** бейеү театры. 18.00 6+
**"Эти лунные ночи... привет из 90-х"** филармония солистары. 20.00 16+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

**1443 һижри йыл.**

| Декабрь (Йомадиәл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 6 (2) дүшәмбе | 7:55 | 9:25 | 13:30 | 15:18 | 16:48 | 18:18 |
| 7 (3) шишәмбе | 7:57 | 9:27 | 13:30 | 15:18 | 16:48 | 18:18 |
| 8 (4) шаршамбы | 7:58 | 9:28 | 13:30 | 15:17 | 16:47 | 18:17 |
| 9 (5) кесе йома | 7:59 | 9:29 | 13:30 | 15:17 | 16:47 | 18:17 |
| 10 (6) йома | 8:00 | 9:30 | 13:30 | 15:17 | 16:47 | 18:17 |
| 11 (7) шәмбе | 8:02 | 9:32 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |
| 12 (8) йәкшәмбе | 8:03 | 9:33 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 11 ДЕКАБРЬ - ХАЛЫҠ-АРА ТАУҘАР КӨНӨ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**48-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Изгелек. Барто. Ҡорос. Арба. Домино. Маҡсат. Лифт. Ер. Тарих. Амеба. Ҡош. Аманат. Ҡарбабай. Таныҡлыҡ. Нужа. Лавр. Ыҙма. Сара. Ынйы. Наза.

**Вертикаль буйынса:** Кырандас. Алмиҙеү. Ат. Арҡан. Ҡапсыҡ. Ылымыҡ. Ҡор. Губернатор. Ыласын. Серге. Баҡа. Крокодил. Айҙар. Ара. Атаман. Ифтар. Ожмах. Тула.

ҮӘТ, ҠЫҘҘАР!

## РӘССАМ



**Күптән түгел "ФормART" стрит-арт фестиваленә йомғаҡтар яһалды. Волга буйы федераль округы төбәктәренән бөтәһе 13 ижадсы ҡатнашты. Бөтә Рәсәй халҡы ҡатнаша алған тауыш биреүҙәр 1 октябрҙән 15-нә тиклем барҙы.**

Халыҡ һәм эксперттар биргән тауыштар һөҙөмтәһендә Башҡортостандан йәш дизайнер Ләйсән Билалова өсөнсө урын яуланы. Уның "Киләсәк - йөрәктә" тип исемләнгән граффитиһы Нефтекама ҡалаһы йорттарының береһенә төшөрөлгән. "ФормART" урам сәнғәте проекты РФ Президентының Волга буйы федераль округында тулы хоҡуҡлы вәкиле Игорь Комаров башланғысы менән тормошҡа ашырыла. Фестиваль йәш рәссамдарҙың ижадын күтәрмәләү, округ төбәктәрендә граффити сәнғәте ярҙамында заманса ҡала мөхите һәм яңы мәҙәни кодтар булдырыуға йүнәлтелгән. Быйылғы конкурсҡа илдең һәм яңы технологияларҙың үҫеш мөмкинлектәрен сағылдырған "Киләсәккә ҡараш" тигән дөйөм темаға арналған эштәр ҡабул ителгәйне.

## УҠЫУСЫ



**Туғыҙ йәшлек Регина Хужина "Miss & Mister Effulgence" Халыҡ-ара матурлыҡ конкурсынан "Мини мисс" исемен яулап ҡайтты. Конкурс 11-13 ноябрҙә Мәскәүҙә уҙҙы.**

Ҡыҙ Мостай Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһында уҡый. Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбленең балалар төркөмөндә шөғөлләнә. Регинаны был конкурсҡа "Һомай" театр-дефилеһы" мәҙәниәтте һәм ижадты үҫтереү студияһы әҙерләгән. Быйыл май айында Регина балалар номинацияһында "Башҡортостан гүзәле" исеменә һәм Гран-приға лайыҡ булғайны.

ҺАҠЛАНЫУ КӘРӘК!

# БЫЛ ДА ҠУРҠЫНЫС АФӘТ



Ошо көндәрҙә Бөтә донъя СПИД-ҡа ҡаршы көрәш көнө билдәләнде. Был шулай уҡ ҡурҡыныс сирҙәрҙең береһе тураһында хәҙер барыһын да беләбеҙ кеүек. Уның күсеү юлдары, организмға хәүефе, кире эҙемтәләре хаҡында ла хәбәрҙарбыҙ. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, донъяла минут һайын тиерлек 15-тән 24 йәшкә тиклемге биш кеше уны йоҡтороуы билдәләнгән. Кешелеккә хәүеф янаған сиргә нисек ҡаршы торорға? Унан нисек һаҡланырға? ВИЧ-инфекцияһы хаҡында мәғлүмәтле булыу ғына уны йоҡтороу ҡурҡынысынан аралаймы? Врач Маргарита УТИЦКАЯ менән ошо һорауҙарға яуап эҙләнек.

Иң беренсе, нимә ул ВИЧ һәм СПИД? ВИЧ - ул кешенең иммун дефициты вирусы, уны йоҡторған осраҡта организм төрлө инфекцияларға һәм шештәргә ҡаршы көрәшеү һәләтен юғалта. Ә СПИД, йәғни йоҡторолған иммун дефициты синдромы - ВИЧ фонында сирҙәрҙең үҫеше. Инфекцияның һуңғы стадияһында организмдың һаҡланыу көсө юғала һәм төрлө ауырыуҙарға ҡаршы тороу һәләте бөтә. Ҡәҙимге тормошта еңел үтә торған ауырыуҙар, мәҫәлән, үпкә елһенеүе СПИД менән ауырыған кеше өсөн фажиғә менән тамамланырға мөмкин. Ҡайһы саҡта ауырыу үҙен һиҙҙерә башлағансы оҙаҡ ваҡыт, хатта тиҫтәләп йылдар үтеүе ихтимал. Сәләмәтлеге насар кешеләрҙә, шулай уҡ тәмәке тартҡандарҙа, алкоголле эсемлек менән мауыҡҡандарҙа, наркотик ҡулланғандарҙа, насар туҡланғандарҙа, даими күңел төшөнкөлөгөнә бирелгәндәрҙә уның тиҙерәк үҫешеүе мәғлүм.

ВИЧ-инфекция тулыһынса дауаланамы, тигән һорау күптәрҙе борсой. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бөгөнгә ул дауалап булмай торған ауырыуҙар иҫәбендә. Әммә уның киҫкенләшеүен һәм СПИД стадияһына күсеүен кисектергән дарыуҙар бар. Инфекцияны йоҡтороуҙан һаҡлаған вакцина ла әлегә юҡ.

Вирустың кешенән кешегә йоғоуының өс юлы билдәле: ҡан аша - наркомандар бер шприц менән ҡулланғанда, стерилләнмәгән инструмент менән татуировка эшләгәндә, донор ҡаны һалғанда, сит кешенең теш щеткаһы, ҡырынғысы һәм башҡа шәхси гигиена әйберҙәре менән файҙаланғанда; енси юл: һаҡланыу сараһын ҡулланмайынса осраҡлы енси бәйләнешкә ингәндә; ауырыу әсәнән балаға: ауырлы ваҡытта, бала тапҡанда, имеҙгәндә.

Бөгөнгә иң таралғаны - енси юл. Осраҡлы кеше менән енси бәйләнеш аша сифилис, гонорея, трихомониаз, герпес, хламидоз, В, С гепатиттары һәм башҡа сирҙәр ҙә йоға. Ҡиәфәтенә ҡарап кешенең ВИЧ-инфекцияһы йөрөтөүен белеп булмай. Күп осраҡта был хаҡта ул үҙе лә белмәҫкә мөмкин.

Йөклө саҡта һәм бушанғанда әсә махсус препарат ҡабул итһә, һуңынан баланы имеҙмәһә, инфекция күсеү хәүефе 2 процентҡа тиклем кәмей. Шуға күрә ауырға ҡалғас та буласаҡ әсә врачҡа мөрәжәғәт итергә тейеш.

ВИЧ-инфекцияһы ишек тотҡаһы, йәмәғәт транспортындағы тотонғостар аша ла йоға, тип уйлаусылар бар. Сир көнкүреш әйберҙәре, йәш, төкөрөк, тир, һауыт-һаба, китап, кейем, ҡан һурыусы бөжәктәр (серәкәй, себен, талпан) тешләүе аша, үбешкәндә, ҡосаҡлашҡанда, күрешкәндә, йүткергәндә, сөскөргәндә, спорт һәм һыу процедуралары менән шөғөлләнгәндә йоҡмай.

Ауырыуҙы билдәләү өсөн махсус лабораторияла тикшереү, тест үтергә кәрәк. Инфекция ҡанға эләкһә, иммун системаһы антитәнсәләр эшкәртеп сығара башлай. Организмда вирус була тороп та ВИЧ-ты билдәләү өсөн эшләнгән тест, антиматдәләрҙең аҙ булыуы сәбәпле кире һөҙөмтә бирергә мөмкин. Шуға күрә шикле осраҡтарҙа 3-6 айҙан һуң ҡабаттан тикшереү уҙғарыла.

ВИЧ-инфекциянан нисек һаҡланырға? Осраҡлы енси бәйләнештәрҙән һаҡланығыҙ. Яратҡан кешегеҙгә тоғро булығыҙ. Әлбиттә, уның да һеҙгә тоғро булыуы мөһим. Наркотик ҡулланмағыҙ, дауаханала, тату-салондарҙа стериль инструменттар талап итегеҙ. Теш щеткаһы, ҡырынғыс һәм маникюр кәрәк-яраҡтарын кешегә бирмәгеҙ, үҙегеҙ ҙә сит кешенекен ҡулланмағыҙ.

**Лена БАРЫЕВА яҙып алды.**

АФАРИН!

**Ошо көндәрҙә элек-электән мәғрифәт һәм мәҙәниәт үҙәге булып һаналған Стәрлебаш ауылы йыйҙы төбәк-ара мөнәжәт башҡарыусылар конкурсында ҡатнашыусыларҙы. Пандемия сәбәпле, быйыл ул онлайн-форматта үтте. Район мәҙәниәт йортонда сараны ойоштороусылар һәм баһалама ағзалары ғына йыйылды, әммә заманса техника ярҙамында был сараны бөтә районлар ҙа ҡарай алды.**

# МӨНӘЖӘТ БӘЙГЕҺЕ



*Учалы районы Ҡунаҡбай ауылының Аҡ теләк ағинәйҙәре "Иман нуры"ның маҡтаулы баһаһына лайыҡ булды.*

"Мөнәжәт" һүҙе - ғәрәп теленән алынған, ул яңғыҙлыҡта үҙ-үҙең менән һөйләшеү, Аллаһ Тәғәләгә мөрәжәғәт итеү тигәнде аңлата. Шуға ла сара райондың имам-мөхтәсибе Зөфәр хәҙрәттең фатихаһы менән башланды. Артабан ҡатнашыусыларҙы бәйгене ойоштороусыларҙың береһе - район хакимиәте башлығының социаль мәсьәләләр буйынса урынбаҫары вазифаһын башҡарыусы Флүр Шаһисолтанов сәләмләне. Ә филология фәндәре кандидаты, Башҡортостан Республикаһының халыҡ уҡытыусыһы, райондың "Ағинәй" йәмғәт ойошмаһы етәксеһе Хәнә Баһаутдинова бәйгелә ҡатнашыусылар тураһында мәғлүмәт менән таныштырҙы. "Йылдан-йыл бәйгенең мәртәбәһе арта. Хәҙер ул төбәк-ара статусын алып, күберәк кешене йыя, - тине Хәнә Ишмөхәмәт ҡыҙы. - Быйылғы бәйгелә республиканың 19 районы, өс ҡалаһынан һәм күрше Татарстандан төрлө йәштәге 120-нән артыҡ ағинәй, аҡһаҡал, урта йәштәгеләр, уҡыусы балалар ҡатнашып, нәсихәттәр, мөнәжәттәр рәүешендә илһамлы, иманлы һүҙҙәрен әйтте. Һәр сығыш ижади ҡараш менән айырылып торҙо, эҙләнеүҙәр, табыштар күренде, үҙенсәлекле импровизациялар булыуы ҡыуандырҙы. Мөнәжәт ижад итеп, иман нурын таратыусы авторҙарҙың күп булыуы ла һөйөндөрҙө. Быйыл жанрҙар төрлөләгә лә һиҙелде. Оло йәштәге ағинәйҙәребеҙ бала саҡтан әсәй-өләсәйҙәре һөйләгән мөнәжәттәрҙе көйләп, уҡып киндерҙе".

Баһалама комиссияһы рәйесе, филология фәндәре докторы Розалия Солтангәрәева был бәйгенең дауамлы булыуын теләп, шулай тине: "Мөнәжәт әйтеү - иман нығытыу, рух нығытыу, тәбиғәтте, күңелде таҙартыу ул. Ошо мөнәжәт байрамында моң-көй сығарып, ихлас күңелдән һүҙ әйткәндәргә рәхмәт. Хоҙай Тәғәләнән беҙгә бирелгән ҡаты һынауҙар мәлендә: "Аллаһ Тәғәлә, беҙ һинә зекер ҡылабыҙ, һынатмаҫҡа тырышабыҙ", - тип, төрлө сырхауға дауа таба торған сара ул. Бер нисә быуат дауамында мәсеттәре нурланып, иманды нығытҡан ошо изге Стәрлебаш ерендә ер ҡото көсәйеп, ошо байрам республика байрамына әүерелһен ине..."

Ысынлап та, тәрбиәләү, өгөтләү, аңлатыу ҡеүәһе бар мөнәжәттә. Шуға күрә лә ул халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижадында Ислам дине индерелгән дәүерҙән бирле ижад ителә, яратып башҡарыла торған жанр булып йәшәй. Бындай бәйгеләрҙә генә түгел, ә башҡа сараларҙа һәм байрамдарҙа мөнәжәт Аллаһ һүҙен халыҡҡа еткереү-аңлатыу сараһы булып тора. Хатта дин тыйылған һәм ҡыҫырыҡланған заманда ла өләсәйҙәребеҙ телендә мөнәжәт тирбәлгән, йәштәргә өгөт-нәсихәт биреү, иман тәрбиәләү сараһы булып торған. Халҡыбыҙҙың быуындан-быуынға күсә килгән ауыҙ-тел ижадында яңғыраған йырлы-моңло мөнәжәттәрҙә тынлағанда күңел яҡтырып, йөрәктең иң ескә ерена барып етеп, юғары аңға тоташҡандай була. Бындай аһәңле көйлә сихри һүҙҙәр яңғырағанда тирә-яҡ нурға күмелә, күңел тыныслана. Шуға ла был мөнәжәт бәйгеһе ысын мәғәнәһендә иман байрамына әйләнде лә инде.

Бәйге булғас, уның еңеүселәре, айырыуса айырылып торғандары ла була. Әммә баһалама комиссияһы ағзаһы Хәнә Ишмөхәмәт ҡыҙы әйтеүенсә, ҡатнашыусыларҙың барыһы ла Маҡтау ҡағыҙҙары, Рәхмәт хаттары, Дипломдар менән бүләкләнгән.

Эйе, халҡыбыҙ күңелендә ошондай фәһемле хазиналар ята. Ихлас күңелле ағинәйҙәребеҙҙең һүҙҙәренә ҡолаҡ һалып, Аллаһ ҡушҡанса, тыйылғандарҙан тыйылып йәшәгәндә генә донъяларыбыҙға бәрәкәт килер, үҙебеҙҙең күп һорауҙарыбыҙға яуап табырбыҙ, тип ышанғы килә.

**Мөнирә ӘҺЛИУЛЛИНА.**

УЙЫНЛЫ-ЫСЫНЛЫ...

# КИЛДЕЛЕ-КИТТЕЛЕ ҺҮҘЛЕК

**Яҙмаларымды "Уйынлы-ысынлы, килделе-киттеле һүҙлек" тип атаным. Исеменән күренеүенсә, был һүҙҙәргә аңлатмаларҙан логик нигеҙләү эҙләргә кәрәкмәй. Рәхәтләнеп көлһәгеҙ йә һис юғы йылмайып ҡуйһағыҙ, шат булырбыҙ. Үткән һанда (47-се һан) "А" хәрефенә миҫалдар килтергәйнем, хәҙер һеҙҙең иғтибарға "Б" хәрефенә килделе-киттеле һүҙҙәр.**

## Б

**Бакалавр** - лавр япрағына оҡшаған баҡа.
**Балл** - балл етмәгәндә өҫтәмә мәрәй өсөн башҡорт балы.
**Балалайка** - Буранбай Исҡужин лайканың көсөгө, ти.
**Балдыҙ** - Учалыларҙың ҡәйнеше.
**Балерина** - инә балер.
**Балкон** - ҡала фатирының аласығы, усаҡлығы.
**Банк** - аҡсаны банкала һаҡлай торған урын.
**Барак** - Обама түгел.
**Баррикада** - ил эсендәге сик һыҙығы.
**Баҫма** - баҫырға ярамаған урын.
**Бата** - ике яҙмышты бер-береһенә батыра торған доға. Шуға ла киленгә "барған ереңә таш булып бат" тиҙәр.
**Баян** - моң бәйән итеүсе.
**Бифштекс** - ни тиклем аңлайышһыҙ булһа, шул тиклем тәмлерәк.
**Бот** - бер бот иттең ауырлығы.
**Ботинка** - ботҡа кейә торған аяҡ кейеме.
**Бөжәк** - бө + жук.
**Брак** - бөйҙәклыҡты браҡҡа сығарыу йолаһы.
**Буйҙаҡ** - өйләнеү тураһында ғүмер буйы оҙаҡ уйланып йөрөүсе.
**Бушлат** - элек әрмелә бушлай бирә торғайнылар.
**Бүрек** - бүре тиреһенән тегелгән кәпәс.
**Быҙау** - быуаҙ һыйырҙың балаһы.
**Бынамын** - бына мин!
**Бысаҡ** - икмәкте бысып телә торған ҡорал.
**Быуа** - Учалылар бабайҙы "быуай" ти, тимәк, йәштәрҙең юлын быуыусы кеше.
**Быяла** - үтәнән-үтә күренә торған кәртә.
**Бәгерем** - бағыр балығынан алынғандыр, сөнки ул "Ҡыҙыл китап" ҡа индерелгән.
**Бәке** - ҡәйнештәр билдәләгән апай хаҡы.
**Бәлә** - дөрөҫ тәрбиә бирелмәгән тәртипһеҙ бала.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы. Башы 47-се һанда).**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ОҘОН ҺҮҘҘЕҢ ҠЫҪҠАҺЫ...

## ана, ишек тотҡаһы

Аҡылһыҙ башҡа дан ҡунмаҫ, ҡунһа ла оҙаҡ тормаҫ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

"Һинән бәхетһеҙерәк кешеләр ҙә бар был донъяла". Әлбиттә, был һүҙҙәр һине һыйындырыр ҡыйыҡ түгел, әммә улар ниндәйҙер дауылдан йәшеренергә етеп тора.

**(Г. Лихтенберг).**

Әгәр ҙә беҙ табылғандар менән генә ҡәнәғәтләнһәк, бер ваҡытта ла бер ни ҙә тапмаҫ инек.

**(Кесе Сенека).**

Яҙмыш үҙенә буйһондормаҫ элек уны бала кеүек ҡулынан тотоп йөрөтөргә һәм үҙ иркенә буйһондорорға кәрәк; ә инде яҙмыш һине үҙенә буйһондороп өлгөргән икән, уны яратыу фарыз.

**(Ф. Ницше).**

Ҡайғылы яҙмыш ҡүктән төшмәй, ә кеше ахмаҡлығы менән тыуа.

**(Л. Альберти).**

Беҙ йәшәргә өйрәнеп бөткәс кенә... ғүмер үткән була.

**(М. Монтень).**

Бер үк ваҡытта әфәнде лә, ҡол да булып булмай. Ҡол булғың килһә, кешеләрҙең һәр береһенә ялағайлан һәм ярарға тырыш, әфәнде булғың килһә инде, үҙеңде ошо ҡылыҡтарҙан азат ит.

**(Эпиктет).**

"Минеке" һәм "Һинеке" тигәндең араһында айырма күрмәгән кешенең тормошо тыныслыҡта үтә.

**(Публиций Сир).**

Эштән арып-талсығыу түгел, ә күңелле тормош, тутыҡ кеүек, кешенең йөрәген тиҙерәк юҡҡа сығара.

**(Б. Франклин).**

Кем дә кем аҙға ғына ҡәнәғәтләнеп йәшәргә өйрәнмәй, ул һәр саҡ ҡол.

**(Гораций).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер һаран үҙенең бар байлығын йәшереп тотҡан һәм ғаиләһен мәхрүмлеккә дусар иткән. Ләкин бер ваҡыт уның улы атаһының йәшергән бар байлығын эҙләп тапҡан. Аҡсаларҙы алған, уның урынына ҙур бер таш һалып ҡуйған. Үҙе атаһының бар байлығын уңлы-һуллы туҙҙырып бөтөргән. Оҙаҡламай атаһы байлығының юҡҡа сығыуын белеп ҡалған һәм ҙур ҡайғыға талған. Улы атаһын йыуатҡан була ти: "Аҡса - туҙҙырыу өсөн, таш йәшереп ҡуйыу өсөн яҡшы".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт:
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99, 246-03-24
Матбуғат таратыу 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
3 декабрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3250
Заказ - 1469